ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

17-23 июнь (һөтай) 2023

№23 (1065)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һыуҙан ҡоро сыҡмаһылар**



5

**Ҡанундар...**

кеше мәнфәғәтен яҡлаһын



6

**Шашка уйыны аша...**



Башҡортостандың көсөн күрһәтәбеҙ 8-9

**Әҫәрҙәремде...**

иң тәүҙә балаларым уҡый



11

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Иғтибар! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2023 йылдың икенсе яртыһы өсөн баҫмабыҙға 842 һум 28 тингә яҙылырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*АФАРИН!*

## ТАНЫРЛЫҠ ТА ТҮГЕЛ!

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров баш ҡаланың боронғо рекреацион зоналарының береһе - Нефтехимиктар мәҙәниәт һәм ял паркын асыу тантанаһында ҡатнашты. Паркка 1947 йылда нигеҙ һалынған. Республика етәксеһе паркта йөрөгәндә бында башҡарылған реконструкция эштәрен баһаланы. "Нефтехимиктар паркын танып та булмай, ул һиҙелерлек үҙгәрҙе, яҡты һәм сағыу, шул уҡ ваҡытта үҙенең үҙенсәлеген һаҡлап ҡалды. Хәҙер бында рәхәтләнеп йөрөргә мөмкин, балалар өсөн бынамын тигән урын. Һеҙгә парктарға ошондай иғтибар бүлгәнегеҙ өсөн ҙур рәхмәт", - тине Черниковкала йәшәүселәр Радий Хәбировҡа.

- Шуныһы иғтибарға лайыҡ: беҙ парктың исемен үҙгәртмәнек. Был иһә республикабыҙ иҡтисадын булдырған нефтехимиктарға хөрмәт күрһәтеү. Белеүегеҙсә, хәҙер Өфө - Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы, Еңеүҙе яҡынайтҡан төп учреждениелар башлыса Черниковкала урынлашҡан. Бөгөн был биҫтә үҫешә, үҙгәрә: яңы парктар, скверҙар барлыҡҡа килә.Минеңсә, беҙ бында балаларыбыҙ өсөн яңы тормош шарттары булдырабыҙ! - тине Радий Хәбиров.






## ЕҢЕҮСЕГӘ - АВТОМОБИЛЬ!

Ленин исемендәге майҙанда Өфө хакимиәте кубогына көрәш буйынса асыҡ турнирҙа тотош республиканан 100 көрәшсе араһынан Өфөнән Артур Зөлҡәрнәев абсолют еңеүсе булды. Еңеүсегә һарыҡ һәм төп бүләк - автомобиль тапшырылды. Билбаулы көрәш буйынса алты тапҡыр донъя чемпионы Артур Зөлҡәрнәев әйтеүенсә, ул төрлө, шул иҫәптән халыҡ-ара ярыштарҙа бер нисә тапҡыр еңеү яулаған, әммә автомобилде беренсе тапҡыр отҡан.

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

## ОСРАҠЛЫ ТАНЫШЫУҘАН...

### ныҡлы дуҫлыҡҡа

**Матди яҡтан кеше ни хәтлем бай булып та, рухи йәһәттән ярлы икән, уның тормошо тулы була алмай. Ә рухи байыу ни рәүешле башҡарыла һуң? Халҡыбыҙҙың дине, йыр-моңо, аһәңле шиғриәте, йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре - барыһы ла беҙҙең күңелдәрҙе рухи яҡтан байыта, иманлы итә, әхлаҡлы, матур уй-хисле булырға саҡыра. Шулай уҡ намыҫ, выждан, киң күңеллелек кеүек рухи байлыҡ төшөнсәләрен тәрбиәләүҙә һүҙ көсөнөң әһәмиәте ҙур. Ә һүҙ көсө шиғриәт йәки әҙәби әҫәрҙәр менән бер рәттән ваҡытлы матбуғатҡа ла ҡағыла.**




Әлбиттә, барлыҡ гәзит-журналдарҙы ла яҡшы тәрбиә өлгөһө, тип әйтеп булмай, хатта ундай ваҡытлы баҫмалар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Ләкин шул иҫәпле генә гәзит-журналдарыбыҙ араһында үҙенең йөкмәткелеге, республикабыҙға, халҡыбыҙға бар булмышы менән хеҙмәт иткән баҫмалар бар. Шулар араһында республикабыҙҙа сығып килгән, күптәргә төрлө өлкәгә ҡағылышлы һорауҙарға яуап табырға булышлыҡ иткән, кәңәшсе ролен үтәгән, киләсәккә ышаныс өҫтәгән, тарихыбыҙҙың бөтә тәңгәлдәрен дә уҡыусыһына төплө мәғлүмәт аша еткергән "Киске Өфө" гәзите иң юғары баҫҡыстарҙың береһен алып тора.

Гәзит менән танышыуым осраҡлы булды. Студент саҡта әсәйем ауылдан ебәргән күстәнәстәре араһына ҡәҙерләп кенә, айырым шыптырға һалып "Киске Өфө"нөң бишләп һанын ебәргән һәм араһына: "Уҡып сыҡ та, каникулға ҡайтҡанда кире алып ҡайтырһың", - тигән яҙыу ҙа һалған. Гәзиткә күрһәтелгән был тиклем хөрмәткә аптыраным да бер һанын алып уҡый башланым һәм бөтә номерҙарын да уҡып бөтмәй тороп, йоҡларға ятманым. Студент кеше дөйөм ятаҡҡа гәзит-журнал яҙҙырмай бит инде, шуға күрә ҡулға килеп эләккәндә ҡараштырып сыҡһам да, ошо мәлгә тиклем күңелемде ҡуҙғатып ебәрерҙәй баҫмаға тура килгәнем юҡ ине. Ә "Киске Өфө" гәзите мине бер уҡыуҙан "ғашиҡ" итте, сөнки ун алты битлек баҫмала бер кәрәкмәгән мәғлүмәт юҡ, һәр береһе урынлы, ваҡытлы, мөһим, йөкмәткеле.

Хәҙер үҙем яҙҙырып уҡыйым, атай-әсәйем дә һәр ваҡыт алдыра. Шуныһы ҡыуаныс: гәзит үҙенең булмышын юғалтмайынса, беренсе һанынан алған юлынан тайпылмайынса, төрлө замандың төрлө яҡҡа иҫкән елдәренә бирешмәйенсә, алға барыуын дауам итә. Баҫманың тағы бер үҙенсәлеге - еңел булмаған темаларҙы бер кемдең дә маҙаһына теймәйенсә, ялҡытмай ғына бирә алыуында. Ҡайһы бер баҫмалар үҙ мәҡәләләрен шул тиклем ауыр телдә яҙа, уҡып та, аңлап та булмай, ә "Киске Өфө"ләргә был йәһәттән тел теймәҫлек түгел... 

**Рөстәм АРҒЫНБАЕВ,**
**Өфө ҡалаһы.**

12+

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# "ҺАҠЛАНҒАНДЫ ҺАҠЛАРМЫН", ТИГӘН...

**Хас та әкиәттәге бер нисә башлы аждаһа төҫлө булды лабаһа был ковид: бер башы көсһеҙләнеп, юҡ булыуға, урынына икенсеһе үҫеп сыға тора, ташҡүлсәйем! Дельта, цербер, грифон, кракен, омикрон... Атамалары ла ниндәй бит әле! Вирустарҙың төрлө штамдарға әйләнеп, төрлө "төҫ-киәфәт" алыу һәләте һәм аҫтыртын мәкер дәрәжәләренә эйә булыуы, күрәһең, өр-яңы заман бактериологик ҡорал эйәләре һәм кешелекте юҡҡа сығарыу өҫтөндә эшләүсе ғалимдарҙың залимлығын үҙенә һеңдергәндер.**

Әле бына халыҡ саҡҡа тын алып, битлектәрҙең нимә икәнен дә онотоп бара ине, бына һиңә - мә! Һиндостанда өр-яңы ковид "йондоҙо" ҡабынды - нишләптер уға Төньяҡ ярымшарҙа балҡыған иң сағыу Арктур йондоҙоноң исеме бирелгән. Был йондоҙ Ерҙән бик алыҫта булһа ла, уның исемен йөрөтөүсе штамм беҙгә яп-яҡын. Быйылғы йылдың февраль аҙағында аҙнаһына 100 процент тиҙлек менән таралыусы "грифон" варианты ла хакимлыҡ иткән, тиҙәр. Һәм шуныһы ғәжәп: яңы штамм илдәге иң эҫе осорға - 35 градус температура шарттарында таралған.

Белгестәр әйтеүенсә, иртәрәк шатланғанбыҙ: ковид миҙгелле сир булып ҡалырға бер ҙә ашыҡмай, тимәк. "Арктур" менән иң күп сирләүселәр һаны Һиндостан, Сингапур, Австралияла булып, артабан ул 29 илгә таралып та өлгөргән. Йоғошлолоҡ тиҙлеге, әйтеүебеҙсә, күҙ асып йомғансы, ти табиптар. Шуныһы хәүефле: күберәк ул балаларҙы һайлай икән. Ковидтың башҡа төрҙәренә хас булмаған үҙенсәлеге - конъюнктивит билдәләре, күҙҙәр ҡысыта һәм ҡыҙара. Бынан тыш, тымау, йүтәл, тамаҡ ауыртыу күҙәтелә, уның ҡарауы, юғары температура һәм еҫ-тәм юғалтыу кеүек билдәләре теркәлмәгән. Роспотребнадзор етәксеһе Анна Попова белдереүенсә, "арктур" шул тиклем тиҙ йоға, бының өсөн сирле кеше янында аҙ ғына тороу ҙа етә.

Рәсәйҙә был "ҡунаҡ"тың иң көслө таралыу осоро май аҙаҡтарына тап киләсәк, тиҙәр. Әлбиттә, бәхеткә, пандемия башланған саҡтағыса хәүефле клиник күренештәр көтөлмәһә лә, вирус үҙенең төп мәкер үҙенсәлектәрен юғалтмай әле. Был бигерәк тә уның эҙемтәләрендә күренә һәм шуныһы хәүефле: улар бер нисә айҙан һуңыҡлап беленә башлай, йыш ҡына хатта ковидты енел үткәргән кешеләрҙә лә зарарлауы ихтимал. Бындай эҙемтәләргә аритмия, тын етешмәү, ҡан ҡуйырыу, йоҡоһоҙлоҡ, нервылар ҡаҡшауы, матдәләр алмашыныуының боҙолоуы һәм башҡалар инә. Бындай билдәләр бер айҙан ярты йылғаса һуҙылырға мөмкин. Хәйер, ковид һәм уның үҙенсәлектәре, эҙемтәләре хаҡында мәғлүмәттәр етерлек, шуға был мәсьәләгә ентекле туҡталыу кәрәкмәйҙер.

Әммә сирҙән мөмкин тиклем һаҡланыу саралары хаҡында табип кәңәштәрендә лә бер ниндәй ҙә яңылыҡ юҡ: шул уҡ ҡул йыуыу ғәҙәтен ташламау мөһим, сөнки ишек тотҡалары, автобус тотонғостары, лифт төймәләре һәм башҡа шундай нәмәләр инфекция сығанағы булыуҙан туҡтамаясаҡ. Кеше күп урындарҙа йөрөүҙән дә тыйылыу кәрәк.

Әйткәндәй, бөгөн битлек кейеп, йәмәғәт транспортында барыу, магазинға инеү ғәйеп эш һымаҡ күренә башланы. Шәхсән минең үҙемә генә лә нәсихәт уҡымайынса йә урынһыҙ иҫкәртеү яһамайынса ҡалғандары юҡ: "Ковид күптән бөттө бит, нишләп битлек кейәһегеҙ?" - тип төпсөнөүҙә, йә иһә: "Сирләйһегеҙме әллә?" - тип шик белдереп ҡуйыуҙар, бер яҡтан, әҙәпһеҙлек булһа, икенсе яҡтан, вирустың бер ҡайҙа ла китмәүенә, ә беҙҙең арала йөрөү ихтималлығына үҙҙәренең дә ышаныуы хаҡында һөйләй. Тимәк, һаҡланыу бер кем өсөн дә язык ғәмәл түгел, айырыуса балалар бар урындарҙа уларҙың хәүефһеҙлеген ҡайғыртыу бер ҙә артыҡ булмаҫ. "Һаҡланғанды - һаҡлармын", тигәнме? Шуны онотоп ебәрмәйек, йәмәғәт.

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

*БАШ ҠАЛАМ*

**"Өфө ҡалаһы ни өсөн матур?" тип бынан тиҫтәләрсә йылдар элек танылған композитор Сара Садиҡова менән шағир Нәби Дәүли йыр ижад иткәндә, моғайын, уларҙы баш ҡаланың ҡояшлы иртәләре, кешеләренең ағымлылығы, йылмайыулы арбағандыр, ҡорос атында баш ҡала ҡунаҡтарын ҡаршылап-оҙатып тороусы дуҫлыҡ, именлек, тоғролоҡ символы Салауат Юлай улының ғәйрәтле һыны әсир иткәндер, тип ышанабыҙ. Баш ҡалабыҙ гимнына әүерелгән легендар "Өфө йүкәләре" авторҙарын да бит йәшлек йылдарын хәтерләтеп тороусы аллея һәм йәшеллеккә күмелгән урамдары илһамландырған.**

# АҒЫ ЛА БАР, ҠАРАҺЫ ЛА...



Эйе, әле лә күркәм, матурлана, яңыра баш ҡалабыҙ, юғарыға ла, киңлеккә лә үҫә, төҙөкләндерелә. Иҫке йорттар урынына яңылары ҡалҡып сыға. Элек беҙ һоҡланған Өфө йүкәләре лә йәштәре менән алыштырыла. Тере йәшеллек тә мәңгелек түгел бит, ағастар ҙа ҡартая, серей. Һәҙәмтәлә йығылып, кешеләргә зыян килтерергә мөмкин. Ундайҙары хаҡында һүҙ ҙә юҡ: ҡыр-ҡырға, ләкин һәр бер ҡырҡылған ағас урынына яңыһын ултыртырға! Тик асылда эш нисек торалыр; ниндәйҙер иҫәп алып барылалырмы был юҫыҡта - уныһы беҙгә ҡараңғы, сөнки, биология фәндәре докторы Алексей Кулагин билдәләүенсә, "...бөгөн ултыртыу материалдары менән проблема: совет осоронан ҡалған ағас үҫентеләре үрсетеүсе питомниктарҙы ябып бөттөләр..."

Ә бит йәшелләндереү эше бөгөн ҡалабыҙға һиу һәм һауа кеүек кәрәк. Элекке төтөнө борлап торған завод-фабрикалар бүлеп сығарған зыянды бөгөн ҡала автотранспорты дауам итә, хатта артығы менән. Мәсәлән, ошо йылдың 18 майы киске сәғәт етелә һауа атмосфераһының рөхсәт ителгән кимәлдән күпкә артығыраҡ күләмдә зарарлы химик матдәләр менән бысраныуы теркәлгән: хлорлы водород кислотаһының тупланышы 1,4 тапҡырға артығыраҡ булған һәм ҡала өҫтөндә смог рәүешендә тупланған туҙан болото ла шул уҡ кимәлдә тәшкил иткән. Ә инде унан алдараҡ үткәрелгән мониторинг буйынса баш ҡалабыҙ һауаһы өс тапҡыр көкөрт водороды, биш тапҡыр хлорлы водород кислотаһы, углерод оксиды, азот, этолбензол менән бысратылған.

Ҡала халҡының һаулығы өсөн бындай хәүефле мәғлүмәттәр беҙгә күптән инде яңылыҡ түгел, беҙ уны һауа һулаған, һыу эскән кеүек "тәбиғи" ҡабул итәбеҙ, күнеккәнбеҙ. Ә бит ҡала экологияһы мәсьәләһе торлаҡ һәм эш хаҡы кимәле, ғүмер оҙайлығы, халыҡтың тығыҙлығы, енәйәттәр һаны кеүек күрһәткестәр менән бергә йәшәү өсөн иң яҡшы һәм уңайлы ҡалалар рейтингын төҙөүҙә төп факторҙар булып иҫәпләнә. РФ Хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университетының былтыр үткәргән тикшеренеүҙәре буйынса Өфө йәшәү өсөн иң уңайлы тип табылған 25 ҡала иҫәбенә лә эләгә алманы... Халыҡтың тығыҙлығы тигән күрһәткестең дә "тығыҙ" булыуы ҡала тормошонда ыңғай роль уйнамай, әлбиттә.

Башҡортостанға Урта Азия һәм Кавказ төбәктәренән күпләп эшкә, шулай уҡ даими рәүештә йәшәргә килеүселәр арта барған һайын, урындағы халыҡтың республиканы һәм уның баш ҡалаһы Өфөнө ташлап, ситкә яҡшы тормош эҙләп китеүселәр һаны ла арта бара. Шуларҙың күбеһе әллә ни алыҫҡа ла түгел, ни бары Татарстанға һәм уның баш ҡалаһы Ҡазанға юлланған. Уртаса алғанда, 1500 кешенең 900-ө, шулай итеп, күрше республикаға күскән, тип яҙа иҡтисадсы Рөстәм Шәйәхмәтов. Әлеге иҫке йырҙың һүҙен-көйөн үҙгәртмәй генә "Ҡазан ҡалаһы ни өсөн матур?" тип йырлай башлаһалар, бер ҙә аптырарға түгел икән, сөнки Ҡаҙан ҙур, таҙа, уңайлы ҡала; уртаса эш хаҡы ла Өфөләгенә ҡарағанда юғарыраҡ, эш табыуы ла проблема түгел, тиҙәр.

**Ә беҙгә ситтән күсеп килгәндәр ни ти һуң?**

**Андрей:** "Мине иң тетрәндергәне - "Ҡунаҡһарай" туҡталышындағы пассажир транспорты тығылышы булды. Автобустар өсөн туҡталҡа майҙаны ла, Ленин урамы ла тар ғына, автобус водителдәре берберенә юл бирмәй, туҡтауһыҙ сигналға баҫалар, юл ҡағиҙәләрен боҙалар, һүгенәләр... Ике йыл инде хәҙер Өфөлә йәшәүемә, ләкин транспорт өлкәһендә, яңы, ҙур автобустар йөрөй башлауға ҡарамаҫтан, тәртип ягы үҙгәрмәне, автобустарҙы оҙаҡ көтөргә кәрәк..."

**Альбина:** "Өфөлә бик йыш һауа сафлығы боҙола, бындай хәл, ғәҙәттә, йома кис йә ял көндәре көсәйә..."

Ә **Рафаил** исемле егет шулай ти: "Миңә Өфөлә ғаилә менән ял көндәрен үткәрергә парк һәм скверҙарҙың күп булыуы оҡшай. Айырыуса беҙ Ағиҙел ярына сығырға яратабыҙ..." Ошолай баһа биреүселәр барыбер күберәк беҙҙең баш ҡалала. Ә, халыҡ әйтмешләй, ул ҡәҙәре генә етешһеҙлек хан ҡыҙында ла була. Ысынында, Өфөбөҙ беҙҙең өсөн иң гүзәл, иң уңайлы ҡала. Шулай булмаһа, бөгөн урам тултырып йөрөр инеме ни русса аҙ-маҙ һупалаған, эшкә тип, уҡырға тип ситтән күсеп килеүселәр...

**Мәҙинә ФӘЙЗИЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2023 йылдың 14 июненән 17-һенә тиклем барған XXVI Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында Башҡортостандың рәсми делегацияһын республика етәксеһе Радий Хәбиров етәкләй. Рәсәй төбәктәрендә инвестиция мөхите торошоноң милли рейтингы һөҙөмтәләре менән таныштырыу Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында төп ваҡиғаларҙың береһе булмаҡсы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2021 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан унда икенсе тапҡыр рәттән бишенсе урынды алды.

✓Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында ҡатнашыусылар республика стендында Башҡортостандың инвестиция, туристик, сәнәғәт һәм фәнни-белем биреү ҡеүәте менән танышырға мөмкин. 390 квадрат метр майҙанды биләгән стенд функциональ зоналарға бүленгән. Бында пилотһыҙ авиация өлкәһендәге ҡаҙаныштар, шул иҫәптән БАС-200 осоу аппараты күрһәтелгән. Шулай уҡ стендтың мультимедиалы панелдәрендә "Муха" студияһы төшөргән "Төньяҡ амурҙары" йәнһүрәте күрһәтелә.

✓Башҡортостан спортсыһы Илья Кандалин грек-рим көрәше буйынса Европа беренселегендә еңеү яуланы. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында хәбәр итеүенсә, Илья Венгрия көрәшсеһе Петр Тоток менән алышта ышаныслы еңеү яуланы, дөйөм иҫәп - 6:3. Ильяға 15 кенә йәш булһа ла, ул - өс тапҡыр Рәсәй беренселеге еңеүсеһе, 16 йәшкә тиклемге Европа беренселегенең бронза призеры. Ул - Октябрьский ҡалаһының көрәш мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе.

✓Азат Йыһаншин Башҡортостандың ветеринария буйынса дәүләт комитеты рәйесе итеп тәғәйенләнде. "Башҡортстан Башлығының 2023 йылдың 9 мартындағы "Башҡортостан Республикаһы дәүләт власының башҡарма органдары структураһын камиллаштырыу буйынса саралар тураһында" указына ярашлы, Йыһаншин Азат Салауат улын биләгән вазифаһынан бушатып, республиканың ветеринария буйынса дәүләт комитеты рәйесе итеп тәғәйенләргә", - тиелә документта.

✓24 июнь Йәштәр көнөн байрам итеүгә бәйле Башҡортостанда хәмер һатыу тыйыла. Быға тиклем Йәштәр көнө 27 июндә билдәләнә ине. Быйылдан Йәштәр көнөн байрам итеүгә арналған саралар июндең һуңғы шәмбеһенә күсерелде. Тыйыу алкоголь продукцияһын магазиндарҙа һатыуға ҡағыла.

***✓ Гәзит эше телде, грамматиканы белеү менән генә сикләнмәй, бында тормошто, халҡыҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын һәм башҡа бихисап әйберҙәрҙе белеү ҙә мөһим.***



*ХӘТЕРЛӘП...*

# ЖУРНАЛИСТ - ҺӨНӘР ТҮГЕЛ,

## ә йәшәү рәүеше



**Гәзит уҡыусыларҙың күбеһе кеүек, мин дә элек ваҡытлы матбуғат эшен кнопкаға баҫыу менән конвейер буйлап гәзит-журнал теҙелеп китә икән, тип кенә күҙ алдына килтерә инем. Төптө яңылышҡанмын, тиһәм, бер аҙ алдаҡсы булып сығырмын, сөнки матбуғат эше, ысынлап та, конвейер кеүек. Тик ул теҙелеп киткән гәзит-журнал түгел, ә баҫма битендә донъя күргән мәҡәлә үткән юл.**

Редакцияға килгәнгә тиклем егерме өс йыл ярым инженер-конструктор булып эшләнем. Проект һыҙырға ултырыу - унда эштең ҡап яртыһы һанала, сөнки уйлап табыу, йыйыныу үҙе ҙур көс, ваҡыт һәм, иң мөһиме, ҡыйыулыҡ талап итә. Гәзит эшендә лә шул уҡ хәл. Мәҡәлә яҙырға уйлаһаң, уны тәүҙә башынан аҙағына тиклем күҙалларға кәрәк була. Ҡағыҙ битенә төшөрөү - икенсе этап. Бынан һуң төп көс редакция хеҙмәткәрҙәре иңенә төшә. Хаттар бүлеге хәбәрсеһе материалды уҡый, теркәй һәм тейешле йүнәлеште алып барған бүлеккә тапшыра. Бында инде хатты ентекле итеп уҡыйҙар, эшкәртәләр, компьютерҙа йыялар, яуаплы сәркәтип, баш мөхәррир уҡый, йыйыу операторы табылған етешһеҙлектәрҙе төҙәтә, верстка операторы гәзит битенә һала. Быныһын инде баш мөхәррир менән корректор уҡый, төҙәтеп, типографияға оҙаталар. Был һанап киткән эштәр - конвейерҙың иң ҡыҫҡа варианты.

...2001 йылдың 21 ноябре иртән эш урыныма - "Минераль ашламалар" акционерҙар йәмғиәте проект-конструкторлыҡ бүлеге начальнигы бүлмәһенә инеүем менән мине район хакимиәте башлығы саҡырыуын әйттеләр. Ҡабул итеү бүлмәһе халыҡ менән тулы ине, мине генә көткәндәй, бөтәһе лә эскә үтте. Район етәксеһе Әҙләм Әлибаев районда асыласаҡ башҡортса гәзит хаҡында аңлатма бирҙе, ултыра торған, минә баш мөхәррир вазифаһын тәҡдим итеүҙәрен аңлап ҡалдым. Әҙләм Әҙһәм улынан тыш, эште ойоштороу хаҡында бер кем дә һүҙ күтәрмәне. Бөтәһе лә ҡарар бар, тимәк, үтәргә генә кәрәк, тигән фекерҙән ары китмәне. Гәҙәттәгесә, эш ошо ҡоро һүҙ һөйләү менән тамамланды.

26 декабрь ҡала Советы сессияһында башҡортса гәзит булдырыу мәсьәләһе яңынан күтәрелә. Икенсе көнөнә ауылға һыуыҡ тейҙереп ауырып ятҡан минә машина ебәрелә. Хакимиәткә килһәм, хакимиәт башлығы урамға сығып бара. Етер, ауырып ятма, бар, ана гәзит сығар, тине. "Путь Октября" гәзитенең тәржемә бүлегенә юлландым. Бүлек мөдире Сәкинә Кинйәбаева бер башҡортса гәзиттең бер битен сығарып, әҙерләп тә ҡуйған икән. Минә уҡырға бирҙе, уҡып сыҡҡас, ҡултамға ҡуйып, кире ҡайтарҙым. Редакцияла беренсе эшем шул булды.

Кискә тиклем гәзиттең башҡа биттәрен йыйҙыҡ. Икенсе көндә яҙамға "Башҡортостан" гәзитенең үҙ хәбәрсеһе Юнир Кинйәбаевты саҡырҙым. Тәжрибәле журналист Юнир Сәмиғулла улы шунда уҡ гәзиткә девиз уйлап тапты. Ул шул тиклем уңышлы килеп сыҡты, мин эшләгәндә уны үҙгәртергә теләгән бер кем дә табылманы. 28 декабрь киске һигеҙенсе яртыла алты битле гәзит пленкаларын типографияға тапшырып, мин, Сәкинә һәм Юнир Кинйәбаевтар, яңы гәзит йыйҙыҡ, тип шатланыша-шатланыша ҡайтып киттек...

Шулай итеп, районда сығып килгән рус телендәге "Путь Октября" гәзитен башҡорсаға тәржемә итеп ултырыусы хеҙмәткәрҙәр яңы, үҙаллы "Көнгәк" гәзите редакцияһына эшкә күсерелә. Бер ниндәй алдан әҙерлекһеҙ, ҡыҫҡа ғына осорҙа, шәхси ваҡыттары менән иҫәпләшмәйенсә, гәзит сығара башлаған тәүге хеҙмәткәрҙәр эшмәкәрлеген мин батырлыҡҡа тиңләр инем. Беренсе айҙарҙа эш хаҡы ла алмай, тейешле йыһаз-техникаһыҙ, хатта ултырып эшләр өсөн ултырғыс та булмауы бөгөн насар төш кеүек кенә хәтерҙә.

Кемдер, эш башҡарғандар, имеш, тиер. Ситтән ҡарағанда, ваҡыт уҙыу менән бөтәһе лә баҙыҡлана бара, ләкин район халҡын әҙәпкә, әхлаҡҡа әйҙәгән баҫма булһын өсөн тырышлыҡ онотолорға тейеш түгел. Әсәм теле үҫһен, һаҡланһын, ул телдә һөйләшһендәр, шатланһындар, йырлаһындар, үҙ халҡының бай тарихын өйрәнһендәр, бының өсөн үҙ телебеҙҙә район гәзите сыҡһын тип көрәшкәндәрҙең ҡайһы берҙәре был шатлыҡты уртаҡлаша алмай вафат булып ҡалды, бик күп егет-ҡыҙҙарыбыҙ нәҡ башҡортса баҫма даулап, ысын мәғәнәһендә, "янды".

...Бер нисә йыл уҙғас, верстка бүлмәһенә инһәм, ҡыҙҙар кәйефһеҙ генә ултыра. Ни булыуын һорап ҡуйҙым. Улар, бер ағай шылтыратып, гәзит биттәрендәге хаталарға анализ яһай, ләкин ул хаҡлы түгел, тиҙәр. Тағы шылтыратһа, минең телефон номерын бирергә тәҡдим иттем. Бер аҙ ваҡыт уҙғас, телефон шылтыраны.

- Мин редакцияға эләктемме?

- Эйе.

- Минә баш мөхәррир кәрәк ине.

- Тыңлайым, ағай.

Ул оҙаҡ ҡына гәзиттәге "хаталар"ҙы һананы. Туҡтағас, пенсияға тиклем кем булып эшләүеңһ һорап ҡуйҙым. Токарь булып эшләгән икән. Шул саҡ мин һорау бирәм:

- Валдың диаметры 20 миллиметр булғанда, втулканың рөхсәте (допуск) һәм ултыртыу (посадка) күпме була?

Трубканың теге осонда тынлыҡ. Бер аҙҙан:

- Ә мин ҡайҙа эләктем әле?

- "Көнгәк" гәзите редакцияһына. - Тағы тынлыҡ.

- Ә был кем әле?

- Баш мөхәррир.

- Ә баш мөхәррир уларҙы ҡайҙан белә? - тип һорап ҡуйҙы был.

- Әгәр токарь грамматика ҡағиҙәләрен һәйбәт белә икән, нинә баш мөхәррир допуск-посадкаларҙы белмәскә тейеш? Үҙен-үҙе ихтирам иткән токарҙың станогы янында вал менән втулканың диаметры 0-дән 500 миллиметрға тиклем булғанда допуск-посадкалар таблицаһы элеүле тора. Мин дә үҙемде-үҙем ихтирам итәм, шуға күрә һәр саҡ өҫтәлемдә һүҙлектәр, ҡағиҙәләр китабы ята, - тип әйтеп тә бөтмәнем, трубканы ташланы был.

Гәзит эше телде, грамматиканы белеү менән генә сикләнмәй, бында тормошто, халҡыҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын һәм башҡа бихисап әйберҙәрҙе белеү ҙә мөһим. Һәйбәт журналист, кем әйтмешләй, яңғын булырын ун минут алдан белеп барып көтөп торорға тейеш.

**Сәйфулла ӘМИРОВ,**
**Мәләүез районы "Көнгәк" гәзитенең беренсе баш мөхәррире.**

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...*

# ҺӘР ЙОРТҠА...

## гәзит килергә тейеш



Атайым Нурулла Мөхөтдин улы Миһранов - ғүмерен балаларға белем биреүгә арнаған педагог, мәктәп директоры ғына булманы, республикаһың барлыҡ матбуғат сараларының яҡын дуҫы булды. Почта аша Башҡортостанда сыҡҡан баҫмаларҙан тыш, Мәскәүҙән дә әллә күпме гәзит-журнал, уҡыту әсбаптары алдыра ине. "Иң тәүҙә Нурулла ағайға алып барып ҡалдырһам, сумкамдың яртыһы бушай", - тип шаярта торғайны почтальон. Ә ул заманда ауылдарҙа һәр йортта күпләп ваҡытлы матбуғат алдырҙылар. Ул баҫмаларҙың әһәмиәтлеләре, кәрәкле мәғлүмәт туплағандары өйҙәге китапханаға инеп ята, ҡайһыларын уҡып бөткәс, макулатураға тапшыра торғайныҡ.

Унан һуң, атайым баҫмаларҙы уҡыусы ғына булманы. Ул улар менән әүҙем хеҙмәттәшлек итте. Эштән ҡайта ла, ултырып яҙыша ине. Ошоларҙы ла күреп үҫтек. Беҙ инде төрлө ҡалаларҙа белем алырға сығып киткәс, был мәҡәләләрҙе беҙҙең аша ебәрә. Кем - Өфөгә, кем Белоретҡа шулай хат алып китә. Ошо хаттарға редакцияның яуаптарын да беҙ ташыныҡ. Шуға ла беҙ бөгөн дә редакциялар ишеген асып инергә ҡыймай тормайбыҙ. Ситтән ҡарағанда, уның ишектәре барыһына ла асылмаған кеүектәр, ысынында иһә унда ябай, ихлас кешеләр эшләй. Ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыр мәл еткәс, почтальон ауылдың бер осонан, атайым икенсе осонан төшеп китер ине. Халыҡ менән һөйләшеп, уларҙы гәзиткә яҙылырға өгөтләйҙәр. 90-сы йылдарҙа донъялар болғанып, халыҡ ҡулаҡса күрмәй башлағас иһә, гәзит-журналдарға яҙылыусы бөтөнләй үҙе ойоштора башланы. Өфөгә редакцияларға килеп яҙыла, улай хаҡы ла осһоҙораҡ була. Ауылдаштарға ла шулай гәзит ташыны бер ваҡыт. Иртәнге электричка менән төшкә ҡарай баш ҡалаға килеп төшә. Йә беҙ машина менән редакциялар буйлап йөрөтөп сығабыҙ, йә автобуста йәки таксиҙа барып әйләнә лә, киске электричка менән ҡайтып та китә. Әле лә ҡышын Өфөлә булыуына ҡарамаҫтан, ауылдағы адресҡа гәзиттәр яҙҙыра. Ауылға почта килергә тейеш тигән фекерҙә. Журналдарҙы Мәскәүҙән дә алдыра. Декада башлана, яҙылдығыҙмы әле, тип, беҙҙән дә һораштырып ҡына тора. Әле бер шулай Инйәрҙә почта бүлексәһе ябыла тип ишеткән дә, бер килке шуға борсолоп алды. Халыҡ нимә эшләргә тейеш, уларҙы бөтөнләй гәзитһеҙ ҡалдыралар бит, тип көйәләнә. Ярай, аҙнаһына ике көн булһа ла эшләйҙәр икән, тынысландырҙыҡ атайҙы.

Маныштыбалаларында ваҡытлы матбуғатҡа ҡыҙыҡһыныу уятыу өсөн, үҙенең исемендәге премия булдырҙы. Премия ныҡ ҙур ҙа түгелдер, әммә был юсыл да яҡшы, хәҙер балалар гәзит-журнал уҡырға ла өйрәнә, унда баҫылып та була икәнен аңлай, ошоға ынтыла ла. Бөгөнгө йәштәр бит ҡулға гәзит тотоп уҡыуҙың нимә икәнен белмәй. Ә беҙгә, уҡып үҫкән быуынға, ҡағыҙ баҫма яҡыныраҡ. Үҙем Белореттың район гәзитенә, "Киске Өфө"гә электрон вариантҡа ла яҙылғанмын. "Киске Өфө"нө былай ҙа алдырам. Электрон вариантын уҡыған булһам да, ҡағыҙға баҫылғаны нисектер башҡараҡ ҡабул ителә. Ул күңелемә яҡыныраҡ.

**Рөстәм МИҺРАНОВ,**
**Эске эштәр министрлығы Өфө юридик институтының өлкән уҡытыусыһы.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан граждандар өсөн енәйәт яуаплылығының айырым критерийҙарын индергән закон проекты Дәүләт Думаһына ҡарауға индерелде. Билдәле булыуынса, яныһыҡ мобилизацияланған һәм контракт буйынса хеҙмәт иткән яугирҙарҙы хәрби хеҙмәткә тиклем ҙур булмаған һәм уртаса ауырлыҡтағы енәйәттәр өсөн яуаплылыҡтан азат итеүҙе күҙ уңында тота. Бүләкләгәндән йәки хәрби хеҙмәттән бушатылғандан һуң яуаплылыҡты бөтөрөргә тәҡдим итәләр. Закон проекты авторҙары - сенатор Андрей Клишас, депутаттар Павел Крашенинников һәм Ирина Панькина.

✓Дәүләт Думаһы сайтында хәбәр ителеүенсә, депутаттар беренсе уҡыуҙа Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодексҡа тимер юл транспортының транспорт инфраструктураһы объекттарында граждандарҙың хәүефһеҙлек кимәлен күтәреүгә йүнәлтелгән үҙгәрештәрҙе ҡабул итте. Башланғыс авторҙары фекеренсә, бөгөн ярамаған урындарҙа тимер юл буйлап йөрөгән өсөн 100 һум штраф һалыу имгәнеү кимәлен кәметеү буйынса көтөлгән һөҙөмтәгә килтермәй. Ошо закон проектына бәйле штрафты ике мең һумға тиклем арттырырға тәҡдим ителә.

✓Башҡортостанда химия, әҙәбиәт һәм география буйынса Берҙәм дәүләт имтиханының тәүге һөҙөмтәләре билдәле булды. Республика Мәғариф һәм фән министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, республикабыҙҙан 20 уҡыусы 100 балл йыйған, шуларҙан географиянан - 3 максималь һөҙөмтә, әҙәбиәттән - 1, химиянан - 16. 598 кеше 81 һәм унан юғарыраҡ балл алған. Имтиханда бөтәһе 3249 кеше ҡатнашҡан.

✓Стәрлетамаҡ районының Алға ауылында бал ҡорттары ҡустәре күпләп һәләк булған. Был хаҡта умартасылар үҙҙәре хәбәр итә. Улар социаль селтәргә ошо турала видеояҙма һалған. Ролик авторы әйтеүенсә, үле бал ҡорттарын ул 12 июнда тапҡан. Уларҙың күпләп ҡырылыуының сәбәбе әлегә билдәһеҙ. Республиканың Россельхознадзор идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, ведомствоға бал ҡорттарының күпләп ҡырылыуы тураһында мөрәжәғәттәр килмәгән. Мәғлүмәт аныҡлана.

ҠЫҪҠАСА

# ФИЗКУЛЬТУРА ДӘРЕСЕНӘ...

**Рәсәй Президенты Владимир Путин балаларҙы физкультура дәрестәренә табиптарҙан алған белешмә менән генә индерергә рөхсәт итеү тураһында законға ҡул ҡуйған.** Дәүләт Думаһы депутаттары "Граждандарҙың һаулығын һаҡлау нигеҙҙәре тураһында" һәм "Мәғариф тураһында" закондарға төҙәтмәләрҙе бер тауыштан ҡабул иткәйне. Парламенттың матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, төҙәтмәләргә ярашлы, махсус әҙерлеге булған педагогтар һәм башҡалар тәүге ярҙам күрһәтергә мөмкин. Был уларҙың бурысы түгел, ә хоҡуғы ғына. Хәҙер бала физкультура дәресенә табип һығымтаһы яҙылған ҡағыҙ менән генә инергә тейеш. Уны медицина тикшереүе үткәргәндән һуң бирәләр. Сөнки мәктәптәге бәхетһеҙлек осраҡтарының күпселеге физкультура дәрестәрендә теркәлә. Бынан тыш, яңы ҡағиҙәләр буйынса белем биреү ойошмалары уҡыусыларға беренсе ярҙам күрһәтеүҙе тәьмин итергә бурыслы. Был мәктәптәргә генә түгел, балалар баҡсаларына ла ҡағыла.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында Баймаҡта сәғәтенә 160 тонна етештереүсәнлеккә эйә яңы асфальт-бетон заводын монтажлау тураһында хәбәр итте.** Уның һүҙҙәренсә, заманса завод Урал арьяғын юлдар һалыу һәм ремонтлау өсөн юғары сифатлы асфальт менән тәьмин итергә тейеш. "Заводты төп объекттарҙың береһе - Сибай - Аҡъяр трассаһы өсөн сафка индерәбеҙ. Ул халыҡты айырыуса борсоған юлдарҙы төҙәкләндереү буйынса яңы республика программаһына инде. Ике йыл эсендә бында 60,5 саҡрымлыҡ участканы йүнәтәсәкбеҙ", - тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы. Билдәле булыуынса, 2023 йылдың майында Башҡортостанда халыҡ йыш зарланған юлдарҙы ремонтлау буйынса яңы төбәк программаһы башланды. Ул муниципалитеттарҙағы емерек юлдарҙы тергеҙеү мәсьәләһен хәл итергә тейеш

✓ **Муниципалитеттарҙа "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" программаһы буйынса мәҙәниәт белгестәренә бер тапҡыр түләнә торған аҡса биреү дауам итә, тип белдерҙе Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров.** Уның һүҙҙәренсә, түләүҙе квалификациялы, һөнәри белемле, мәҙәниәт өлкәһендә эшләгән, 2021 йылдан мәҙәниәт өлкәһендә белем биреү эшмәкәрлеге алып барған, бер һәм унан күберәк ставкаға эшкә урынлашҡан 35 йәшкәсә белгес алырға хоҡуҡлы. Республика Башлығы Радий Хәбировтың ҡарары буйынса, түләүҙең күләме 1 миллион һумға тиклем арттырылды. Түләү торлаҡ шарттарын яҡшыртыу өсөн бирелә. Шулай уҡ Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса быйылдан аҡсаны шәхси автотранспорт һатып алыуға йүнәлтергә мөмкин. Башҡортостанда "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" программаһы буйынса 90 йәш белгескә ярҙам күрһәтелгән.

✓ **Башҡортостандың 14 фермеры ғаилә фермаларын үҫтереү өсөн грантка эйә булды. Уларға 1,5-19 миллион һум күләмендә дәүләт ярҙамы күрһәтелә.** Дәүләт ярҙамының дөйөм суммаһы 95,2 миллион һум, тип хәбәр итте Башҡортостан Премьер-министры Андрей Назаров. "Был гранттарҙы республикабыҙҙың төрлө районларынан фермер хужалыҡтары алды. Башлыса "Ғаилә фермаһы" конкурсында ҡатнашыусылар - хужалыҡтарын үҫтереүҙе маҡсат итеп ҡуйған, яңы технологияларҙы, яңы йүнәлештәрҙе үҙләштергән эшҡыуарҙар. Дәүләт ярҙамы уларға уй-ниәттәрен тиҙерәк тормошҡа ашырырға ярҙам итһә, республика аҙыҡ-түлек етештереү күләмен арттыра. Фермерҙарыбыҙ республиканы туйындыра, беҙ уларға ҙур өмөттәр бағлайбыҙ", - тине Башҡортостан Премьеры. Башҡортостандың ауыл эшҡыуарҙары яңы эш башлаған фермерҙар өсөн "Агростартап", шулай уҡ "Агротуризм", ауыл хужалығы кооперативтарының матди-техник базаһын үҫтереү программалары сиктәрендә дәүләт ярҙамынан файҙаланырға мөмкин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ӨФӨ ҮҪӘ, МАТУРЛАНА



**Республика етәксеһе Радий Хәбиров Башҡортостан баш ҡалаһының социаль-иҡтисади үҫеш мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үткәрҙе.**

Ҡала хакимиәтендә ул Өфөнөң ҡала төҙөлөшөнә һәм киләсәктәге проекттарына бағышланған күргәҙмәне ҡараны, эре төҙөлөш компанияларының яңы торлаҡ комплекстары концепцияһы сағылдырылған был биләмәлә бер ынғайҙан социаль инфраструктура объекттары - балалар баҡсалары, мәктәптәр һәм поликлиникалар төҙөлөшөн дә проектҡа индереү кәрәклеген билдәләне.

Башҡортостан етәксеһе кәңәшмәлә Өфө ҡалаһының республикалағы башҡа муниципалитеттар үҫешенә йүнәлеш биреүен билдәләне. Шулай уҡ Өфө ҡалаһының 2024 йылда билдәләнәсәк 450 йыллығына әҙерлек тураһында ла һүҙ булды. Радий Хәбиров хәл итеүҙе көткән мәсьәләләр теҙмәһен, байрам итеүгә әҙерлек барышында айырыуса парктар һәм скверҙарға етди иғтибар бүленергә тейешлеген билдәләне. "Быйыл беҙ ҡала халҡына Аксаков исемендәге баҡсаны, В. Альбанов исемендәге поляриктар музейы янындағы скверҙы, яңыртылған Ҡурсаҡ театры алдындағы аллеяны, Затондың "Тулҡын" паркындағы бәләкәй күл яны биләмәһен, Зорге урамы Спорт һарайы янындағы С.М. Михалев исемендәге скверҙы файҙаланыуға тапшырырға тейешбеҙ",- тине Радий Хәбиров.

# ЭШҺЕҘЛЕК ПОСОБИЕҺЫ

**БР Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығында эшһеҙлек буйынса пособие тураһында ниҙәр белергә кәрәклеге тураһында һөйләнеләр.**

Төбәк хеҙмәт министрлығының "Башинформ"ға биргән аңлатмаһында әйтелеүенсә, әгәр эшһеҙ кеше мөшгүллек үҙәгендә теркәлә һәм 10 көн эсендә уға яраҡлы эш тәҡдим итә алмаһалар, был граждандә эшһеҙлек буйынса пособие тәғәйенләнә һәм ул рәсми рәүештә эшһеҙ тип таныла. "Әгәр ҙә кеше ун көн эсендә тәҡдим ителгән ике варианттан баш тартһа, уға эшһеҙ статусы бирелмәй һәм, шуға ярашлы, пособие ла тәғәйенләнмәйәсәк",- тип әйтелә министрлыҡ аңлатмаһында. Иң ҙур күләмдәге пособиеға ла күптәр дәғүә итә алмаясаҡ. "Әгәр һеҙ һуңғы йыл эсендә 26 аҙнанан аҙыраҡ эшләгәнһегеҙ һәм ниндәйҙер ярамаған ғәмәл ҡылған өсөн эштән сығарылғанһығыҙ йә булмаһа бер йылдан да артыҡ эшләмәгән икәнһегеҙ, был осраҡта иң аҙ күләмдә пособие тәғәйенләнә, - тип аңлата белгестәр. - 2023 йылда минималь пособие 1725 һум, ә иң күп күләмдәгеһе - 14 711 һум". Максималь пособие өс айға тәғәйенләнә, ә уны түләү ваҡыты алты ай дауам ителергә мөмкин, ләкин был пенсия алды йәшендәгеләргә ҡағылмай. Әгәр эшһеҙ кешегә пенсияға сығырға 5 йәки унан әҙерәк ваҡыт ҡалған икән, уларға эшһеҙлек буйынса максималь пособие 24 ай буйы түләнеүе мөмкин. Шул да мәғлүм булһын: 2023 йыл башынан республиканың 30 мең кешеһенә эшһеҙлек буйынса түләнгән пособие күләме 583 млн һум тәшкил итте.

# ОҘАТТЫЛАР

**Совет майҙанынан "Башҡортостан" ирекле мотоуҡсылар полкының Советтар Союзы Геройы Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин исемендәге башҡорт батальонын хәрби әҙерлек урынына оҙатыу тантанаһы үтте.**

Уның менән бергә матди тәьминәт ротаһы һәм мотоуҡсылар полкының ремонт ротаһы ла хәрби әҙерлек урынына юлланды. Батальон командиры Фәрит Миңранов Башҡортостан Башлығына хәрби подразделение төҙөү тураһында хәбәр итте. "Бөгөн беҙ Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин исемендәге батальонды һәм ике подразделениены хәрби әҙерлек урынына оҙатабыҙ. Шулай итеп, беҙ Башҡортостан ирекле мотоуҡсылар полкын ойоштороуҙы тамамлайбыҙ. Уның ике батальоны һәм биш подразделениеһы хәрби әҙерлек үтә. Республика исеменән һеҙгә Ватан һағына баҫырға ҡарар итеүегеҙ өсөн рәхмәт белдерәм. Эшләгеҙ, туғандар", - тине Радий Хәбиров, яугирҙарға мөрәжәғәт итеп. Рәсәй Геройы, запастағы генерал-майор Сергей Тулин яугирҙарға изге теләктәрен еткерҙе. "Беҙҙең егеттәр махсус хәрби операция зонаһында хәрби бурыстарын намыҫ менән үтәй. Республикабыҙ яугирҙарына хөрмәт һәм ихтирам", - тине Сергей Тулин. Яугирҙар Тыуған илебеҙ өсөн гүмерҙәрен ҡорбан иткән ата-бабаларыбыҙҙың иҫтәлеге өсөн көрәшә, беҙҙең эшебеҙ хаҡ, еңеү беҙҙең яҡта булыр, дошман тар-мар ителер, тине батальон командиры. Яҡындары менән хушлашҡандан һуң подразделение яугирҙары "Башҡортостан" ирекмәндәр полкының башҡа частары урынлашҡан Һамар өлкәһенә хәрби әҙерлек үтергә юлланды.

# ОҘАЙЛЫ ҺАҠЛЫҠ

**Рәсәйҙә Оҙайлы һаҡлыҡ программаһы (ПДС) барлыҡҡа киләсәк - Дәүләт Думаһы депутаттары тәүге уҡыуҙа ошо закон проектын хуплап сыҡты. 2024 йылдың 1 ғинуарынан рәсәйҙәргә дәүләттән финанс ярҙамы алырға мөмкинлек тыуасаҡ.**

Бының асылы шунда: программала ҡатнашыусы аҡса һала һәм дәүләт тарафынан ошо тупланмаға аҡсалата ҡушымта индерелә. Билдәләнеүенсә, бындай һаҡлыҡ төрө оҙайлы осорға - 15 йылға тиклем иҫәпләнә. Ул граждандар тарафынан үҙаллы рәүештә ирекле иғәнәләр һәм пенсия тупланмалары иҫәбенә йыйыла. Программала ҡатнашыусы йыл һайын 52 мең һумға тиклем индерелгән суммаға физик шәхестәрҙән килем өсөн һалымды (НДФЛ) ҡайтарыу иҫәбенә өҫтәмә килем аласаҡ. Ә индерелгән аҡса дәүләт тарафынан 2,8 млн һум суммаға страховкаланасаҡ.

Оҙайлы һаҡлыҡ программаһы Владимир Путин ҡушыуы буйынса эшләнде. "Оҙайлы һаҡлыҡ программаһы киләсәктә граждандарҙың финанс тупланыуын һәм тотороҡлоған тәьмин итергә мөмкинлек бирәсәк", - тине Рәсәй финанс министры Антон Силуанов.

Иҡтисад фәндәре докторы, Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институты ректоры Азат Йәнгиров билдәләүенсә, Оҙайлы һаҡлыҡ программаһы ил халҡының тормош кимәлен әҙмә-әҙ яҡшырта барыуҙа етди сара булып торасаҡ. "Шуның менән бергә иҡтисад оҙайлы рәүештәге ресурсҡа эйә буласаҡ һәм ул инфраструктур проекттарға, мегапроекттарға һалынып, Рәсәй иҡтисадын үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк", - тине Азат Йәнгиров.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң Затон биҫтәһендә төҙөлгән 9-сы ҡала дауаханаһының яңы ете ҡатлы поликлиникаһын ҡараны. Медицина учреждениеһы составына 6-сы балалар поликлиникаһы филиалы һәм ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһы ингән. Дауаханаһын баш табибы Марсель Зарипов һүҙҙәренсә, бинаның майҙаны - 13,3 мең квадрат метр. Бында Өфө ҡалаһының Ленин районында йәшәгән 41 мең кешегә - 26 мең өлкән кешегә һәм 15 мең балаға табип ярҙамы күрһәтелә. Киләсәктә поликлиникаға яҡындағы Өфө районы халҡын да беркетергә ниәтләйҙәр. Поликлиника сменаһына 900 кешене ҡабул итәсәк.

✓Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев Өфө ҡалаһы журналистарын һәм барлыҡ киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәрен һөнәри байрамы менән тәбрикләне. "Өфө медиатармағы - ул тиҫтәләрсә төрлө баҫмалар, журналистар, хәбәрселәр, телевидение һәм радио алып барыусылары, блогерҙар. Һеҙҙең ярҙамығыҙ менән өфөләр баш ҡалабыҙҙағы хәл-ваҡиғалар тураһында белеп тора, көнүҙәк һәм кәрәкле мәғлүмәт ала. Һеҙҙең ваҡиғалар араһына сумып, ҡала халҡы өсөн кәрәкле мәғлүмәт алырға әҙер булыуығыҙ оло хөрмәткә лайыҡ", -тине ҡала мэры.

✓Өфө хакимиәтендә кадрҙар үҙгәрҙе. Архитектура һәм ҡала төҙөлөшө баш идаралығы етәксеһе итеп 2022 йылдың сентябрь аҙағынан Капиталь төҙөлөш идаралығы етәксеһе булып эшләгән Руслан Хәйруллин тәғәйенләнде. Был вазифа оҙаҡ ҡына ваҡыт буш булды. Өфөнөң элекке баш архитекторы Олег Байдин 2022 йылдың мартында отставкаға китте, шул уҡ йылдың июнендә Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең төҙөлөш һәм архитектура департаменты етәксеһе вазифаһына тәғәйенләнде.

✓13 июндән 3 июлгә тиклем Өфөнөң Зәки Вәлиди урамында генерал-губернатор Перовский урамынан Ғафури урамына тиклемге участкала хәрәкәт ябылды. Был хаҡта ҡала хакимиәте хәбәр итә. Хәрәкәтте сикләү Рәсәй һәм Беларусь төбәктәренең X юбилей форумын уҙғарыу менән бәйле. Йәмәғәт транспорты хәрәкәте схемаһы ла үҙгәрә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Америка конгрессмендары Байденға үҙенең аҡыл һәләте һәм психикаһы торошона тест үтеүен һорап, дүрт тапҡыр мөрәжәғәт итеүгә тиклем барып етте.***



*БЫНАҒАЙЫШ!*

**Оҙон телесериалдарҙан торған "Менттар һуғышы" мажараларын ҡарап, уның сюжеттары күбеһенсә уйҙырмаға ҡоролған тип уйлаусылар булһа, улар нык яңылыша ине, әлбиттә. Хоҡуҡ һаҡлау органдарындағы әҙәм ышанмаҫлыҡ мажараларҙың фашлана башлауы ҡайһы бер тамашасыларҙы сериалдарҙың бөгөнгө тормошобоҙҙан алынған дөп-дөрөҫ күсермәһе икәненә ышанырға мәжбүр итте.**

# ҺЫУҘАН ҠОРО СЫҠМАНЫЛАР



Хәйер, уға тиклем дә халыҡтың хоҡуҡ һаҡсыһы формаһындағы кешеләргә ышаныслы ярайһы ҡаҡшағайны инде. Коррупцияға ҡаршы "көрәшеүсе" - фатирында 9 млрд һум, йәғни 1,5 тонна аҡса һаҡлаған "күренекле" полковник Захарченко миҫалы үҙе генә ни тора! Коррупция хаҡында "Менттар һуғышы" һәм шуға оҡшаш башҡа фильмдарҙа ла хатта уға тиң герой юҡ. Уғрылыҡҡа, ришүәтселеккә ҡаршы намыҫлы хоҡуҡ һаҡсыһы формаһына йәшеренгән мафия әһелдәре, асыҡланыуынса, беҙҙең арала, йәнәшәбеҙҙә генә йөрөй икән дә... Гәзит уҡыусы хәтерләһә, ошо уҡ осорҙарҙа "Киске Өфө"лә оҫта ришүәтсе - "алтын гаишник" Илдус Шәйбәков хаҡында яҙып сыҡҡайныҡ инде. Уның иһә, "алтын прокурорҙар" тигән ҡушаматлы енәйәт төркөмөндә азға булып тормаһа ла, үҙенең эш биләмәһендә законһыҙ юл менән дөйөм суммаһы 44 миллион һумдан ашыу байлыҡ туплауы асыҡлана.

Әлбиттә, хоҡуҡ һаҡлау органдарында намыҫлы, ғәҙел хеҙмәткәрҙәр ҙә күп, ләкин әле һүҙ уларҙың тап киреһен көүҙәләндергән енәйәтселәр хаҡында бара. Ошо көндәрҙә Мәскәүҙән килгән хәбәр бынан 5 йыл элек үк фаш ителгән "прокурорҙар мафияһы" эшен тағы хәтергә төшөрҙө. Эйе, 2018 йылдың көҙөнә тиклем Башҡортостан прокуратураһында төбәк күҙәтеү ведомстволы начальнигы урынбаҫары Олег Горбунов етәкселегендә ойошторолған енәйәт төркөмө хакимлыҡ итә. Улар юғары вазифалы һәм хәлле генә граждандарҙы үҙҙәре тәғәйенләгән хаҡҡа енәйәт эҙәрләнеүенән ҡотҡарыу һәм енәйәт эштәрен туҡтатыу менән шөғөлләнгән. Эштәрҙең ҡатмарлығына ҡарап, улар енәйәт эшен ябыу өсөн 5-тән башлап 20 миллионға тиклем аҡса алған. Мәҫәлән, Өфө ҡалаһы мэрының шул ваҡыттағы урынбаҫары Александр Филиппов ришүәт алыусыларға 10 млн аҡса биргән. Дәүләт тарафынан ышанып тапшырылған вәкәләттәрен шәхси маҡсаттарҙа һәм байыуы өсөн файҙаланып, ошондай аҫтыртын һәм зыянлы эштәрҙе күп ҡыла был төркөм. Ләкин былдай ҡырын эштәрҙең ҡасан да булһа осо килеп сыға бит ул. "Прокурорҙар мафияһы" пирамидаһының ахыры Өфө ҡалаһы Совет районы прокуроры Рәмил Ғарифуллиндың ҙур суммала ришүәт алған ваҡытында тотолоуынан башлана. Был хоҡуҡ һаҡсыһының өйөндә үткәрелгән тентеү һөҙөмтәһендә дөйөм суммаһы 1,4 млрд һумлыҡ "серегән" байлыҡ тупланыуы асыҡлана. Үҙ ҡулы аҫтында эш итеүсе Ғарифуллиндың хәлен ишетеп, Башҡортостан прокурорының беренсе урынбаҫары, мафия башлығы Горбунов ашығыс рәүештә отставкаға ғариза яҙа һәм илдән ҡасырға була, ләкин Мәскәү аэропорттарының береһендә ҡулға алына. Ул миллионлаған һум ришүәт алыуҙа ғәйепләнә һәм үҙенең әшнәләре - прокуратураның енәйәт эштәрен алып барыуға күҙәтеү идаралығы начальнигының элекке урынбаҫары Артур Шәретдинов менән бая телгә алынған Рәмил Ғарифуллин янына тикшереү изоляторына оҙатыла. Был төркөм эшендә ҡатнашҡан тағы ла Өфө ҡала советы депутаты Вадим Рамаҙанов, эшҡыуар Фәйим Мөхитов һәм адвокат Рәшит Сафыевтар ғәйепләнә. Экс-прокурорҙарҙың енәйәт эштәре буйынса тикшереүҙәр бик оҙаҡҡа һуҙыла. Күрәһең, хоҡуҡ һаҡсыларының законды мөмкин тиклем оҫта урап үтеү буйынса тәжрибәләре бай булалыр. Беҙҙең закон нигеҙҙәре "фантазияһы" бай һәм "ни ҡылһа ла үҙ ҡулында" мөмкинлеге менән вазифаһы булған бер генә кешегә һыуҙан ҡоро сығырға ярҙам итмәне...

Башта әйтелеүенсә, был төркөмдөң енәйәт эше аңлы рәүештә Өфөлә үткәрелмәй, сөнки, "өйрәнгән яу" һуғышырға яҡшы, тигәндәй, кем белә, урындағы судьялар араһында ла енәйәтселәргә мәрхәмәт белдерергә йыйыныусы әшнәләре юҡ түгелдер, тигән ҡараштан сығып, эш Мәскәүҙә, Бабушкин район судында ҡарала башлай.

Ниһайәт, дүрт-биш йылға һуҙылған был эш буйынса ошо йылдың 30 майында Мәскәү суды хөкөм ҡарарын иғлан итте. Прокурорҙар мафияһы башлығы Олег Горбунов 17 йылға иркенән мәхрүм ителде һәм был срокты ул ҡаты режимлы колонияла үткәрәсәк. Унан шулай уҡ 40 млн һум күләмендә штраф түләтеләсәк. Уның әшнәһе Рәмил Ғарифуллин - 16 йылға (өҫтәүенә 20 млн штраф), Артур Шәретдинов - 8,5 йылға (20 млн штраф), Рәшит Сафыев - 8 йылға (20 млн штраф) хөкөм ителде. Ғәҙел суд ил күләмендә киң яңғырауыҡ алған был эштә аралашсы-"йомошсо" сифатында ҡатнашҡан Фәйем Мөхитов менән Вадим Рамаҙановты ла йәлләп тормаһа: уларҙың тәүгеһе - 7 йыл (20 млн штраф), ә икенсеһе 5 йыл колонияға (8 млн һум штраф) хөкөм ителде.

"Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә", "Беҙ тоҡта ятмай", "Бурлыҡ - хурлыҡ" тип халыҡ белмәй әйтмәгән бит.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# МИРОНОВ... БАЙДЕНДЫ ЙӘЛЛӘЙ



**Америка Президенты Джо Байден Төньяҡ Каролиналағы хәрби базаға рәсми визиты мәлендә сығыш яһағандан һуң тағы ла йүнәлешен юғалтты һәм сәхнәлә ни эшләргә белмәйенсә, билдәһеҙлеккә текләп бер аҙ торғас, алғы рәттәге ҡатын-ҡыҙ янына ынтылды. Ярай әле, уның ярҙамсы-тән һаҡсыһы ваҡытында килеп өлгөрҙө һәм хужаһының ҡолағына шыбырҙап, уны үҙ артынан күндәм генә эйәртеп, сәхнәнән алып төштө.**

Кемдең ҡасан яҙа баҫырын көтөп кенә торған сит ил журналистарына был етә ҡалды. Улар "Байден бабайҙың" бынан алдағы яҙыҡтары хроникаһын да сәғәте-минуты менән хәтергә төшөрҙө һәм киң мәғлүмәт сараларында шау-шыу тыуҙырҙы, мыҫҡыллы комментарийҙар бирҙе. Ләкин эш бының менән генә лә сикләнмәне: Америка конгрессмендары Байденға үҙенең аҡыл һәләте һәм психикаһы торошона тест үтеүен һорап, дүрт тапҡыр мөрәжәғәт итеүгә тиклем барып етте, сөнки президенттың сығышындағы буталсыҡтар, телмәрендә юҡ-бар мәғәнәһеҙлектәр ысҡындырыуы менән һис тә килешерлек түгел ине шул.

Ярай ҙа, Аҡ йорт хужаһының трапҡа менеп-төшкәнендә күпме тапҡыр әләгеп йығылыуҙарын уның оло йәшенә һылтарға була ине, ти; тик бына уның тигеҙ ерҙә лә ҡолай башлауын күреү бер ҙә көлкө тыуҙырмай ине инде. Һүҙ Колорадо штатында хәрби академия курсанттарына диплом тапшырыу тантанаһында уның сәхнәлә әләгеп йығылыуы хаҡында бара. Дональд Трамптың улы социаль селтәрҙә төртөрөп яҙыуынса, публика алдында, камералар төбәлгәндә лә хатта йыш ҡолағас, янында журналистар юҡ саҡта күпме тапҡыр йығыла икән президент?!

Ҡартлыҡ - түгел шатлыҡ, тиҙәр бит. Ана шулай әләгә-ҡолай йөрөүенә ҡарамаҫтан, Байден киләһе йылда үтәсәк АҠШ президентын һайлау кампанияһында ҡатнашасағы хаҡында рәсми белдереү яһаны. Һаулыҡ һәм аҡыл кимәле хәүеф тыуҙырыусы ҡарт кешене власть башына ҡуйыу Американың махсус хеҙмәт даирәләре, ФБР һәм НАТО өсөн отошлораҡ, күрәһең, тип белдерә сәйәсмәндәр, сөнки уларға үҙҙәренең быҫраҡ сәйәсәтен ихтыярһыҙ һәм үҙҙәренә унайлы булған "ҡеҫә президенты"на ышыҡланып ғәмәлгә ашырыу өсөн сикһеҙ мөмкинлектәр бирә. Әйткәндәй, Байдендан бит улар "колағынан тартып", таушыу биреүҙәр тәртибен тупаҫ боҙоп, үҙҙәре президент "яһаны", ә был иһә бөтөн мир алдында, йәнәһе лә, "демократия тантана иткән" Америка тарихындағы хурлыҡлы биттәрҙең береһе булып яҙылды.

Эйе, былдай хәлгә беҙҙең депутат та хатта битараф ҡала алманы. Һәр ҡырын эшкә үҙ ҡарашын белдереп барырға ғәҙәтләнгән "Ғәҙел Рәсәй - Хаҡлыҡ хаҡына" партияһы етәксеһе Сергей Миронов Байденды уратып алған кешеләрҙең уны үҙ маҡсаттарында файҙаланыуҙы ҡарт кешенән көләү һәм уның менән ауыҡыҙ мөғәмәлә тип атаны. Үҙен хоҡуҡ авангарды тип атаған ил өсөн бының хурлыҡлы күренеш булыуын әйтте һәм Америка элитаһын Байденды мыҫҡыллауҙарҙы һәм үҙ маҡсаттарында файҙаланыуҙы туҡтатырға саҡырҙы. Юғиһә, депутат әйтмешләй, бының АҠШ өсөн генә түгел, ә бөтөн донъя кимәлендә хәүефле эҙемтәләргә килтереүе бик ихтимал.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йөрәк хәлһеҙлеге

❖ 1 балғалаҡ петрушка орлоғона 1 стакан һыу ҡойоп, 8 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 4 тапҡыр 0,25 стакан эсергә. Был сара бәүел ҡыуҙырғыс, шуға йөрәк хәлһеҙлегенә бәйле шешенеүҙәр осоронда эсеү кәңәш ителә.

❖ 1 ҡалаҡ баланды бутҡа итеп иҙергә. 1 ҡалаҡ бал ҡушырға һәм 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 2 тапҡыр эсергә. Был рәүешле 1 ай дауаланғас, 1,5 аҙна туҡтап торорға һәм ҡабатларға.

### Грипп

❖ Мүк еләге (клюква), сөгөлдөр һуттарын, бал һәм араҡыны бер тигеҙ өлөштә ҡушып, ҡараңғы, һалҡын урында 3 көн төнәтергә, ваҡыты-ваҡыты менән һелкетеп, болғатып торорға. Дауаны ашарҙан 1 сәғәт алда көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Мүк еләгенең һуты елһенеүҙәрҙе һәм вирустарҙы юҡ итә, лайлалы тиресәнең ҡуҙғыуын баҫа, температураны төшөрә. Сөгөлдөр һутында витаминдар һәм микроэлементтар күп. Шулай ҙа был төнәтмәне ашҡаҙан сей яраһы, юғары әселектәге гастрит, бөйөн ауырыуҙары булғанда ҡулланырға ярамай.

❖ 5 ҡалаҡ ҡайын бөрөһөнә 2 стакан араҡы ҡойорға һәм бүлмә температураһында, ҡараңғы урында 40 көн төнәтергә, ваҡыты-ваҡыты менән һелкетеп, болғатып торорға. Шунан һөҙөргә, 2 ҡалаҡ бал ҡушырға һәм яҡшылап болғарға. Грипп булғанда көнөнә бер нисә тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Ҙур булмаған кәстрүлгә 1 стакан һыуыҡ һыу ҡойорға, 0,5 стакан әнис орлоғо ҡушырға һәм ҡайнап сыҡҡас, талғын утта тағы 15 минут тоторға. Һөҙөп алынған сарағ 0,25 стакан йүкә балы һәм 1 ҡалаҡ коньяк ҡушырға, тағы ла ҡайнар хәлгә еткерергә һәм һыуынғансы төнәтергә. Төнәтмәне һыуыҡ тейгәндә, грипп, бронхит ауырыуҙарынан ҡулланырға. Уны 1-се көндә 30 минут һайын 1-әр ҡалаҡ эсеп торорға. Артабан көнөнә 3 тапҡыр эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләнә.**

✓ *Шулай аҙымлап ҡына булһа ла ыңғайға йүнәлеш буласаҡ ул, бының өсөн ҡайһы бер закондар ҡабаттан ҡаралып, төҙәтеләсәк. Кеше тормошонан ҡәнәғәт булһын тигән принциптан сығып эшләйбеҙ беҙ ҙә.*



### ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



## БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

**Яға.** Учалы төбәкте өйрәнеү музейында һаҡлана. Тапшырылыу урыны - Байһаҡал ауылы. Оҙонлоғо 41 см, өҫкө киңлеге 23 см, аҫҡы киңлеге 36,5 см.



**Яға.** Учалы ҡалаһында һаҡлана. Оҙонлоғо 42,5 см, өҫкө киңлеге 28 см, аҫҡы киңлеге 37 см.



**Яға.** Учалы ҡалаһында һаҡлана. Оҙонлоғо 44 см, өҫкө киңлеге 27 см, аҫҡы киңлеге 37 см.



**Яға.** Озерный ҡасабаһында һаҡлана. Оҙонлоғо 42 см, өҫкө киңлеге 25 см, аҫҡы киңлеге 35,5 см.



**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

### ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

**Рәсәй Ҡоралл Көстәрендә, Эске эштәр органдарында, һалым полицияһында хеҙмәт иткәндә лә, 2000 йылдарҙан БР Хөкүмәтендә төрлө вазифаларҙа, шул иҫәптән, республиканың Контроль-иҫәп палатаһы рәйесе йөгөн тартҡанда ла, ҡыҫҡаһы, ҡайҙа ғына эшләмәһен, бөгөнгө геройыбыҙ намыҫлылығы, ғәҙеллекте тәүге урынға ҡуйыуы арҡаһында барыһының да ихтирамын яулай. Депутат булып һайланғас та ул иң ауыр йүнәлештәрҙең береһен етәкләй. Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Һаулыҡ һаҡлау, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эштәре буйынса комитет рәйесе Салауат Фәттәх улы ХАРАСОВ менән уның бөгөнгө эшмәкәрлеге хаҡында әңгәмәләшәбеҙ.**

# ҠАНУНДАР...

## кеше мәнфәғәтен яҡлаһын



**➔ Салауат Фәттәх улы, исемегеҙ менән ғорурланаһығыҙмы? Ошо исемде йөрөткән шәхестәр араһында кемеһе Һеҙҙең өсөн өлгө?**

- Хәҙер йәштәр улдарына Салауат исемен бик ҡушып бармайҙар, ахыры. Бына минең йәштәштәрем араһында Салауаттар бик күп. Уларҙың күптәре менән дуҫтар булып йәшәйбеҙ, араларында табиптар ҙа, депутаттар ҙа бар. Атайым менән әсәйем Башҡортостандан булһа ла, мин Тажикстанда тыуғанмын. Өйөбөҙҙә милли батырыбыҙ хаҡында "Салауат Юлаев" тигән китап бар ине, шуны уҡып үҫтем мин. Шуға ла, моғайын, уның яҙмышы, фиҙаҡәрлеге, илен, телен яратыуы минең өсөн матур өлгө булып торғандыр. Ғөмүмән, мин бик бәхетле кеше, атайым менән әсәйем иҫән, улар хәҙер Өфөлә йәшәй. Ике һеңлем, бер ҡустым - хәҙер инде балалар, ейәндәр менән уларҙы иғтибарҙан өҙмәҫкә тырышабыҙ.

Ситтә йәшәһәк тә, нисектер күңелемдә гел Башҡортостан булды. Новосибирск юғары хәрби-сәйәси училищеһын тамамлағас, мине юллама менән Ырымбур өлкәһе Тоцкое ҡасабаһына хәрби хеҙмәткә ебәрҙеләр. Унда ла Башҡортостанға эш сәфәре килеп сыға ҡалһа, барырға теләк белдерә һала инем. Шулай йөрөй торғас, кәләшемде осраттым. Ләйсән менән Айһылыу исемле ҡыҙҙар үҫтерҙек, 6 ейән-ейәнсәрем бар, улар ҙа матур башҡорт исемдәре йөрөтә, башҡорт йырҙарын тыңлайҙар. Ҡартатай тип өндәшеүҙәренә, минең менән үҙҙәренсә ғорурланыуҙарына күңелем була.

**➔ Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа һеҙ етәкләгән комитет иң ҡатмарлыһылыр, моғайын?**

- Ҡатмарлы, сөнки ул халыҡҡа иң яҡыны. Шуға ла иң кәрәге, тиһәк, дөрөҫөрәк булыр. Һаулыҡ һаҡлау үҙ эсенә бер нисә йүнәлеште ала, социаль сәйәсәт тә киң тармаҡлы, унда ғаилә, әсәлек, аталыҡ, балалыҡты һаҡлау мәсьәләләре лә, хеҙмәт мөнәсәбәттәре лә, айырым категория граждандарын социаль яҡлау ҙа инә. Комитетҡа бөтәһе 18 төрлө мәсьәләне ҡарарға, хәл итергә тура килә. Профсоюз хәрәкәте лә беҙҙең комитеттың эсендә, улар ҙа гел иғтибар табап итә. Хатта ерләү эшенә бәйле һорауҙар ҙа ошо комитет эсендә ҡарала, әйтәйек, зыяраттарҙы киңәйтеү талабы тыуып тора.

Әле яҙғы сессияның аҙаҡҡы ултырышында 1000 кешенән аҙыраҡ халыҡ йәшәгән ауылдарҙа, социаль йәһәттән әһәмиәтле булған объекттарҙа, төбәккә һәм муниципалитеттарға ҡараған юлдарҙа сифатлы бәйләнеш булдырһа, бәйләнеш операторҙарына килемгә һалынған һалымдың күпмелер өлөшөн кире ҡайтарыу мөмкинлеге биреү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Былар барыһы ла халыҡтың тормошон уңайлы итеү өсөн эшләнә.

**➔ Шуныһы ла бар, социаль өлкә - халыҡ тарафынан тәнҡит утына ла күберәк тотола...**

- Был эшләмәгәндән түгел, киреһенсә, эшләгән һайын, күберәк эшләргә кәрәк. Әле бына ҡала көнөндә генә Нефтехимиктар паркын асыуҙа ҡатнаштыҡ. Әммә ремонт һәм яңыртыуҙы көткән парктар тағы ла күберәк бит, тимәк, быныһын күреп, халыҡ тағы һораясаҡ. Социаль мәсьәләләр ҙә шулай. Мәҫәлән, күп балалы ғаиләләр өсөн льготалар яңы барлыҡҡа килгәндә, халыҡҡа ул шул тиклем ҙур ярҙам кеүек тойолғайны. Хәҙер иһә ул категорияға ҡараған ярҙамдың ниндәйе генә юҡ. Күптәр социаль ғәҙеллек талап итеп, мөрәжәғәт итә. Быны ла мин яҡшы аңлайым. Әйтәйек, күршеләш булып ике йортта күп балалы ғаиләләр йәшәй икән. Береһендә ғаилә башлығы балаларҙы бер нәмәнән дә мәхрүм итмәйем тип, ике урында эшләй икән ти. Һөҙөмтәлә, килемдәре тейешле сумманан 10 һумға артығыраҡ булған өсөн, пособие юллай алмайҙар. Ә күршеһендәге ғаилә был ярҙамды ала. Ҡараһаң, икеһе лә 3-әр бала тәрбиәләй, ул балаларҙы берҙәй ашатырға, кейендерергә кәрәк. Беҙгә хәҙер ошо йәһәттән мәсьәләне хәл итергә кәрәк. Бәлки, ниндәйҙер комиссия, йәмәғәт советымы ҡарарға тейештер быны. Пенсиялар буйынса мөрәжәғәттәр күп. Пенсияһының яртыһын коммуналь түләүҙәргә тотоноп, ҡалған ғына өлөшөнә йәшәгәндәр күп. Медицинаға ҡағылышлыларын һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин менән тығыҙ бәйләнештә хәл итәбеҙ, уның эш алымдары бик оҡшай миңә.

Демография яҡшырһын, тиһәк, халыҡтың йәшәү шарттарын яҡшыртыуға иғтибар артырға тейеш. Беҙ бөгөн йәшәйешебеҙгә илһөйәрлек тойғоһон кире ҡатарырға тырышабыҙ, әммә ул дәүләт ярҙамы менән дә нығытылырға тейеш. Юғары белемдең түләүле булыуы, ипотекаға фатир һатып алыу һ.б - былар барыһы ла беҙгә көсләп тағылған сит идеология икәнен төшөндөк бит инде. Кеше иртәгәһе көндән хәүефләнмәһен, нисек белем алыр, ҡайҙа йәшәр, ҡайҙа эшләр, тип, балаһының киләсәге өсөн ҡурҡмаһын. Әле бына Болон белем биреү системаһынан баш тартыу тураһында һүҙ сыҡты ла, тағы ла тынып ҡалды. Ә ул яҡшы идея ине, элекке юғары белем биреү системаһының донъяла тиңе юҡ ине бит. Шулай аҙымлап ҡына булһа ла ыңғайға йүнәлеш буласаҡ ул, бының өсөн ҡайһы бер закондар ҡабаттан ҡаралып, төҙәтеләсәк. Кеше тормошонан, йәшәйешенән һәм, әлбиттә, ҡанундарҙан мөмкин тиклем ҡәнәғәт булһын тигән принциптан сығып эшләйбеҙ беҙ ҙә.

**➔ Һеҙ социаль селтәрҙәрҙә лә халыҡ менән әүҙем аралашаһығыҙ, был эшегеҙҙе яҡшыртыр өсөн яңы мөмкинлекме?**

- Бөгөнгө депутат эшмәкәрлеге закондар сығарыу, кешеләр менән аралашыу, уларҙың проблемаларын хәл итеү генә түгел. Социаль селтәрҙәр аша иһә бөтөн төрлө мәғлүмәтте тиҙерәк алып була. Шуға ла ниндәйҙер теләктәрегеҙ, һорауҙарығыҙ бар икән, мине интернетта таба алаһығыҙ. Әле яңы ғына Махсус хәрби операциянан егеттәр мөрәжәғәт итте. Бер часта Өфөнөң Киров районынан 4 егет бергә хеҙмәт итә икән. Республиканың ярҙам иткәнен беләбеҙ, беҙгә ВАЗ машинаһы алып бирә алмаҫһығыҙмы икән, тип яҙалар. Беҙ, депутаттар, йыйылышып, фонд булдырып, шундай мәсьәләләрҙә ярҙам күрһәтергә тырышабыҙ. Яңыраҡ ҡына Луганск өлкәһенең Красный Луч ҡалаһынан мәктәп директоры ашхана өсөн тундырғыс лар һорағайны, һатып алып ебәрҙек. Бик рәхмәтле булдылар, хәҙер ит, балыҡ һаҡларға урын бар, тип ҡыуаналар.

Социаль селтәрҙәр тигәс, халыҡ гел генә насарлыҡты яҙмай унда. Мине ирекле формированиелар штабының кураторы итеп тәғәйенләгәйнеләр. Әле унда 200 меңдән ашыу кеше тупланды. 60 йәшкә тиклем сикләү бар бит инде. 65 йәшкә тиклем үҙгәртеп булмаҫмы икән, тип һорайҙар. "Рәсәй ветерандар союзы" ветерандарҙың Бөтөн Рәсәй йәмәғәт ойошмаһына мөрәжәғәт итеп, генерал-полковник Азаров үҙе Шойгуға сығып, шуны хәл иттек. Шуға ла социаль селтәрҙәр аша ла күп эштәргә башланғыс һалырға була.

**Ләйсән ВӘЛИЕВА**
**әңгәмәләште.**

✔ *Өйҙәрҙең стеналары ағастан ҡоролоп, бағана терәктәр менән нығытылған. Тикшеренеүселәр саргат ҡәбиләләренең хужалыҡтарында малсылыҡтың асыҡтан-асыҡ сағылыш табыуын раҫлай.*



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Дүртенсе бүлек. Көньяҡ Урал гун эпохаһында



**Урманлы дала һәм урман зонаһының ултыраҡ ҡәбиләләре**

Б.э. тиклем VII-III быуаттарҙа көн иткән ананьин мәҙәниәте ҡәбиләләрен Көнбайыш Урал буйында (Ағиҙел һәм Урта Кама йылғалары бассейны) б.э. тиклем III-II быуаттар сигендә пьянобор мәҙәниәтенә (б.э. тиклем II быуат - б.э. II быуаты) ҡараған төркөмдәр алмаштыра. Уларҙы ананьинсыларҙың туранан-тура вариҫтары, тип иҫәпләйҙәр, әммә пьянобор ҡәбиләләре союзы һәм уларҙың мәҙәниәте формалашыуында ултыраҡ тормошҡа күскән күскенселәрҙең айырым бер төркөмдәренең ҡатнашыуын инҡар итеп булмай.

Ҡомартҡылар материалдарын анализлау пьянобор мәҙәниәте эпохаһының Көнбайыш Урал буйындағы ултыраҡ тормошта йәшәгән халыҡтың үҫешендә яңы, бик мөһим этап булыуын күрһәтә. Пьянобор дәүерендә ананьин мәҙәниәтенә ҡараған байтаҡ ҡына ҡаласыҡтарҙың булыуы һәм ҡәберлектәрендә элекке ерләү рәүеше һаҡланыуы билдәле, быны, һис шикһеҙ, ошо ике ҡәүем төркөмдәренең генетик күсәгилешлеген раҫлаусы дәлил итеп ҡарау фарыз.

Пьянобор ҡомартҡыларында, айырыуса ҡәберлектәрҙә, бронза әйберҙәр күпләп табыла. Улар - ҡойолоп яһалған йә иһә спираль формаһындағы сикә сулпылары, беләҙектәр, кейемгә тегелгән төрлө формалағы пластинкалы күкрәксәләр. Пьяноборсыларҙың күптәре киң билбау ҡайыштарын ҡулланған, уларға тотошлай металл биҙәүестәр беркетелгән, ҡайыштар төрлө формалағы таралғылар менән ҡаптырылған, билбауҙың бер осонда ныҡ итеп беркетелгән ырғаҡ, ҡайыштың икенсе осонда уға ҡаптырыла торған элмәк булыуы характерлы. Таралғы-ҡаптырмалар араһында ҙур эполет рәүешендәгеләре бигерәк тә һоҡландырғыс, улар күбеберәк торған ҡалҡыу урындары булған ҙур түңәрәк нигеҙҙән тора, ырғаҡ уға бер нисә оҙонса таяҡсыҡтар менән беркетелгән.

Күп һанлы пьянобор дәүере ҡомартҡылары Ағиҙел йылғаһының урта ағымы бассейнында табылды, Биктимир, Өфө, Яңы Өфө (Новоуфимский), Шипово һәм Охлебинино ҡәберлектәре һәм улар менән бәйле ҡаласыҡтар, тораҡтар улар араһында иң ҙурҙарҙан һанала. Ошо ҡомартҡыларҙың ҡайһы берҙәре б.э. тиклем V быуаттан да һуң түгел хасил булып, б.э. тиклем III-II быуаттарға тиклем даими ғәмәлдә булған. Улар тураһында үткән бүлектә иҫкә алғайныҡ инде.

Айырым алғанда, әҙәбиәттә ҡомартҡыларҙың ошо төркөмөн ҡараабыҙ мәҙәниәте, иртә бер төркөмдө (б.э. тиклем V-III бб.) ананьин мәҙәниәтенең ҡараабыҙ варианты, ә һуңғарағын (б.э. тиклем II б. - б.э. II б.) - берҙәм пьянобор мәҙәниәте варианты, тип ҡарау тәҡдим ителгәйне.

Ошо ҡомартҡыларҙың хужалары булған халыҡтар төркөмө Ағиҙел йылғаһының һул яҡ яр буйҙарын биләгән күскенселәр араһында көн итә. Ошо яҡынлыҡ ултыраҡ тормошта йәшәүсе пьянобор халҡы мәҙәниәтендә сағыу эҙ ҡалдыра. Мәҫәлән, уларҙың ҡәберлектәрендә был яҡтарға килеп еткән күскенселәр өсөн характерлы булған балсыҡ һауыт-һаба, ошо ике төркөм ҡәүемдәренә берҙәй хас булған ҡоралдар, биҙәүестәр күп осрай.

Беҙҙең эра сиктәрендә Өфө йылғаһы тамағы районының (Өфө ҡалаһының Киров районы территорияһы) мөһим мәҙәни үҙәккә әүерелеүен билдәләп үтергә кәрәк. Ошо замандан "Йәшел сауҡалыҡ" санаторийы территорияһындағы ҡәберлек (Мәскәү археологы В.В. Гольмстендың ҡаҙыу эштәре) һәм хәҙерге "Динамо" стадионы, Башҡорт дәүләт университеты территорияһын тулыһынса биләгән грандиоз ҡәберлек беҙҙең осорға килеп еткән. XX быуаттың 50-80-се йылдарында алып барылған ҡаҙыу эштәре барышында бик күп ерләү урындары билдәле була, уларҙан барса пьянобор халҡына хас булған күп биҙәүестәр менән бер рәттән, мәҫәлән, бында ситтән килтерелгән, постаментта ятҡан арыҫлан рәүешендәге Египет мәрйендәре кеүек, һирәк осрай торған 105 табылдыҡ ҡаҙып алына. Улар беҙҙең эраның тәүге быуаттары менән даталана.

Беҙ Өфө ҡалаһы территорияһындағы боронғолоҡ темаһына ҡаттан-ҡат әйләнеп ҡайтасаҡбыҙ, һәм, ошо айҡанлы, Өфө ҡалаһы территорияһының эре тораҡ пункты булараҡ күтәрелешенең беҙҙең эра сиктәренә тура килеүен иҫтә тотоу фарыз, тибеҙ.

Бәғзе бер тикшеренеүселәр, пьянобор ҡомартҡыларының Урта Ағиҙел төркөмө материалдарының үҙенсәлеген иҫәпкә алып, үҙаллы ҡараабаҙ археологик мәҙәниәтен айырып ҡарай. Әммә уларҙың Урта Кама ҡомартҡылары менән мәҙәни яҡынлығы кире ҡаҡҡыһыҙ, һәм уларҙың этномәҙәни тарихын берҙәм пьянобор мәҙәниәте сиктәрендә өйрәнеү уңайлыраҡ.

Беҙҙең эра сиктәрендә Көнбайыш Урал буйына хас тарихи-мәҙәни процестар Көнсығыш Урал аръяғында ла оҡшаш рәүештә бара. Бында бер-береһенә яҡын күршеләш булған горохов (Тобол йылғаһы бассейны) һәм саргат мәҙәниәттәре ҡәбиләләре көн итә. Һуңғылары һан яғынан күберәк булып, бөтөн Көнбайыш Себер буйынса тиерлек, Төмән өлкәһе территорияһына тиклем үк таралып йәшәй. Көнсығыш Урал аръяғына улар Иртыш йылғаһы бассейнынан килә; күрәһең, б.э. тиклем II быуат тирәләрендә ошо территорияла барған ваҡиғалар арҡаһында бында элегерәк билдәле булған иткүл мәҙәниәте юҡҡа сыға. Горохов һәм саргат мәҙәниәттәренән ултыраҡ тормош алып барыусылар тораҡтарының эҙҙәре ҡалған - уларға майҙаны 25 - 65 кв. метрға еткән дүрт мөйөшлө йә иһә трапеция формаһындағы өйҙәре булған нығытылған ҡаласыҡтар һәм асыҡ тораҡтар хас. Өйҙәргә тәрәнәйтелеп ҡаҙылған оҙон коридорҙар алып барған. Өйҙәрҙең стеналары ағастан ҡоролоп, бағана терәктәр менән нығытылған. Тикшеренеүселәр саргат ҡәбиләләренең хужалыҡтарында малсылыҡтың асыҡтан-асыҡ сағылыш табыуын раҫлай. Йәшәгән мөхиттәренең урманлы дала һәм урман зонаһында булыуына ҡарамаҫтан, саргат һәм горохов ҡәбиләләре үлгәндәрҙе ҡурған аҫтарына, тәрән булмаған соҡорҙарға ерләү йолаһын тотҡан. Ерләү йолаһының ошо үҙенсәлеген уларға, күрәһең, хәрәкәтсән тормош рәүеше хас булыуы менән аңлатып була, ә был, Көнбайыш Урал буйы күскенселәре кеүек үк, саргат ҡәбиләләре йәшәгән территорияға йәйләүгә килеп йөрөүсе сак-гун-кангюй сығышлы дала кешеләренең йоғонтоһо һөҙөмтәһендә үҙләштерелгән.

Ошондай тығыҙ сауҙа-иҡтисади һәм мәҙәни-этник контактарҙан тыш дала зонаһы ҡурғандарындағыларға тулыһынса параллель булған оҙон муйынлы, түңәрәк төплө балсыҡ һауыттарҙың, фляғаларҙың, эш ҡоралдарының саргат ҡомартҡыларында киң таралыуын аңлатыуы ауыр булыр ине. Саргат тораҡтарында дала хайуандарынан булған дөйә һөйәктәренең табылыуын бындай бәйләнештәргә дәлил итеп килтерергә була. Көнсығыш Урал аръяғының ерле һәм күп һанлы халҡы булараҡ, саргат ҡәбиләләре III - IV быуаттарға тиклем ошонда йәшәүен дауам итә.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*МУЗЕЙ ҠОМАРТҠЫҺЫ*

# ШИХАНДАР "БҮЛӘГЕ"

**Башҡортостандың Милли музейында күп төрлө ҡыҙыҡлы экспонаттар һаҡлана. Улар араһында боронғо ҡаҙылмалар ҙа байтаҡ.**



Ошондай үҙенсәлекле экспонаттарҙың береһе - юҡҡа сыҡҡан биш аяҡлы моллюскылар класына ҡараған аммонит, уның диаметры 21 сантиметрға етә. Аммониттар тышҡы ҡабырсағы һаҡланып ҡалған беҙҙең заманда йәшәүсе наутилустарҙың алыҫ "туғаны". Улар иртә палеозойҙа барлыҡҡа килеп, 66 миллион йыл тирәһе элек юҡҡа сыҡҡан. Аммониттар башлыса балыҡ менән туҡланған һәм үҙҙәре лә диңгеҙ рептилийҙарының табышына әйләнгән. Йыш ҡына эре аммониттарҙың ҡабырсағына ҡаҙалып ҡалған плезиозавр һәм мозазаврҙың тештәре табыла.

Башҡортостандың Милли музейындағы аммонит Шихандарҙа табылған, ул музейҙың "Балыҡтар, ер-һыу һәм һөйрәлеүселәр" залында һаҡлана, Рәсәйҙең Музей Фонды дәүләт каталогына индерелгән.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Шайморатовсылар - Гомель-Речица операцияһында

62-се гв. атлы полкы Головки ауылын дошмандан азат итә һәм Защебьеға илтеүсе юлға сыға. Был алышта гв. өлкән лейтенанты Н.А. Кузьменконың эскадроны батырҙарса һуғыша, контратакаға күтәрелеп, немецтарҙы сигенергә мәжбүр итә. Шул мәлдә беҙҙең яугирҙар ҡаршыһында дошман танкылары пәйҙә була. Николай Кузьменко танкҡа ҡаршы ата торған мылтыҡтан (ПТР) мәргән атып, дошмандың яҡынлашып килгән ике танкыһын сафтан сығара. Ҡурҡыу белмәҫ эскадрон командиры Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләүгә тәҡдим ителә. 62-се гв. атлы полкының артиллеристары һәм ПТР взводы яугирҙары дошмандың барлығы 11 танкыһын емертә. Немецтарҙың 120 һалдаты һәм офицеры яу яланында ятып ҡала, улар, биләгән позицияларын ҡалдырып, артҡа сигенергә мәжбүр була.

Ошо көсөргәнешле мәлдә беҙҙең 58-се һәм 60-сы гв. атлы полктары ла дошман атакаларын кире ҡағыуға өлгәшә.

22 ноябрҙә 15-се һәм 16-сы гвардия атлы дивизиялары подразделениелары, Василевичи ауылынан төньяҡ-көнсығыштараҡ, дошман һис көтмәгән бер мәлдә, тиҙ арала маневр эшләп, Новинки һәм Корма торлаҡ пункттарына бәреп инә.

25 ноябрҙә беҙҙең 7-се гв. кавкорпусы алдында яңы боевой бурыс ҡуйыла: 61-се армияның уң флангыһында хәрәкәт итеп, 9-сы гвардия уҡсы корпус яугирҙары менән берлектә, төньяҡтан һәм төньяҡ-көнбайыштан һөжүм итеп, 26 ноябрҙең кисенә Калинковичи ҡалаһын азат итергә. Әммә армия штабында ултырған командирҙар был осраҡта дошмандың үтә ныҡлы оборонаһын ошолай тиҙ генә ҡаҡшата алыу мөмкинлеген объектив рәүештә күҙаллай алмаған. Һөжүм итеү йүнәлешендә урманлы һаҙлыҡтар, юлдарҙа киҫеп ауҙарылған йыуан ағастарҙан яһалған валдар, миналар түшәлгән яландар ята. 16-сы һәм 15-се гв. атлы дивизиялары 27 ноябрҙең кисенә генә Лазки һәм Нахов ауылдары районына килеп етә. Беҙҙең 16-сы дивизия яугирҙары Головки - Василевичи маршруты буйынса Калинковичи ҡалаһына табан хәрәкәт итә. 58-се һәм 60-сы гв. атлы полктары Черносов, Замостье ауылдары яғынан дошмандың һул флангыһын атакалай, әммә Пружанка утары янында оборонаға күсергә мәжбүр була. 62-се гв. атлы полкы 27 ноябрҙә, йәйәүле строй менән һөжүм итеп, Александровка ауылын ала, артабан Осипова-Рудня ауылы йүнәлешендә хәрәкәт итә.

Беҙҙең һөжүмгә барыусы частар дошмандың алдан бик яҡшы нығытылған оборонаһына юлыға. Калинковичи һәм Мозырь ҡалалары немец оборонаһының терәк пункттарына әйләндерелә, бында күп һанлы резерв ғәскәрҙәр туплана. Алғы һыҙыҡта дошман өс рәттән торған траншеялар системаһын төҙөп өлгөрә, нығытмалар һәм окоптар алдында, ике рәт итеп теҙеп, сәнскеле тимер сыбыҡтан кәртәләр ҡоролған була.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

**✓ Бала, бәлки, чемпион да булмаҫ, ә бына мәктәпкә барыр алдынан бер урында сыҙап ултырыу, иғтибар тупларға өйрәнеү кеүек сифаттарҙы ул ошо уйында үҙләштерә.**



# ШАШКА

## Башҡортостандың көсөн

**2021 йылда Башҡортостан Республикаһы Башлығының спорт төрөн үҫтереү буйынса өҫтәмә саралар тураһында Указы булды. Унда йыл һайын "Шашка буйынса донъя кубогын" (донъялағы хәл-торош бер аҙ үҙгәрештәр индерә: кубок атамаһы турнир тип үҙгәртелә) үткәреү тураһында пункт та бар. Ошо Указды тормошҡа ашырып, 5-13 июндә баш ҡалала ШОС һәм БРИКС илдәренең 1-се Халыҡ-ара шашка турниры үтте. Унда 15 илдең - Рәсәй, Әзербайжан, Әрмәнстан, Беларусь, Бразилия, Һиндостан, Иран, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Ҡытай, Монголия, Пакистан, Тажикстан, Төркиә, Үзбәкстан спортсылары ҡатнашты. Башҡортостан данын титуллы спортсылар Тамара Танһыҡҡужина, Елена Мильшина, Александр Георгиев, Айнур Шәйбәков, Айгөл Иҙрисова һәм Муродулло Амриллаев яҡланы. Иң яҡшы уйынсылар исеме өсөн ун тапҡыр донъя чемпиондары булған Алексей Чижов һәм Александр Георгиев, ҡатын-ҡыҙҙар араһында әле донъя чемпионы Матрена Ноговицына, 2021 йылда Донъя кубогын яулаусылар Айгөл Иҙрисова һәм Александр Гетманский, Азия чемпионаттары еңеүселәре Ҡытайҙан Ли Женью һәм Жао Ханчин, Монголиянан Цогтбаатар Сухбат һәм Энхболд Хуслэн, Латин Америкаһының көслө шашкасыһы, Бразилия кешеһе Аллан Силва көрәште.**

**Ошо сара уңайынан республиканың билдәле шашкасылары, халыҡ-ара гроссмейстерҙар, Европа һәм донъя чемпиондары Айгөл ИҘРИСОВА һәм Айнур ШӘЙБӘКОВ менән әңгәмә ҡорҙоҡ. Әңгәмәбеҙ башлыса шашка спорты, уға бигерәк тә балаларҙы йәлеп итеү тураһында бара.**

**Бала саҡта фантазияның осо-ҡырыйы булмай, тәүлек эсендә генә бер нисә һөнәр "алмаштырырға" мөмкин. Ә бына һеҙ ни өсөн профессиональ шашка спортын һайланығыҙ? Башҡа спорт төрҙәренә ҡыҙыҡһыныу булманымы? Балалар бит бәләкәйҙән шуҡ, тиктормаҫ, бер урында ултырып сыҙай алмай. Ә шашка уйыны сыҙамлыҡ, түҙемлек, иғтибар талап итә.**

**Айгөл:** Бәләкәйҙән тыныс бала булдым: ҡағыҙ, ҡәләм-ручка тоттороп, бер урынға ултыртып ҡуйһалар, мин шунда үҙ эшем менән мәшғүл булып 3-4 сәғәт ултыра ала инем. Мөҡәддәс олатай (атайымдың атаһы) бик бәләкәй сағымдан уҡ шашка уйнарға өйрәтте. Һуңынан балалар баҡсаһына йөрөй башлағас, унда тренер Алия Винер ҡыҙы килеп, беҙгә күнегеүҙәр тәҡдим итә, мәсьәләләр сисергә ҡуша ине. Шуға күрә Ишембай ҡалаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатына уҡырға барып, ундағы шашка түңәрәге барлығын белгәс, алдымда, ниндәй спорт түңәрәгенә яҙылырға, тигән һорау торманы ла. Әлбиттә, бер үк ваҡытта башҡа түңәрәктәргә лә йөрөп ҡараным: бер аҙ каратэ менән шөғөлләндем, бер аҙ бассейнға йөрөнөм, әммә шашка уларҙың барыһын тормошомдан "ҡыҫырыҡлап" сығарҙы.

Шулай уҡ шашка түңәрәгенә йөрөй башлағанда Тамара Танһыҡҡужина беренсе тапҡыр донъя чемпионы булды. Ана шул ваҡыттан уҡ шашка минең өсөн күңел талабына әйләнде. Бәләкәй ҡыҙ өсөн күҙ алдында чемпион йөрөүе - үҙе бер мотивация. Уны өлгө итеп ҡуяһың, уға оҡшарға түгел, ә уҙып китергә тырышаһың. Һуңынан, үҫмер саҡта ололар менән ярыштарға йөрөй башлағас, унда үҫәһең, көс туплайһың, әммә тәжрибәле уйынсыларҙы ҡыуып етеп булмай. Шул ваҡытта сәм тыуып, тырыша, ярыша башлайһың. Уйынын ҡарап өйрәнәһең, нишләп уның улай уйнағанын анализлайһың.

**Айнур:** Миңә алты йәш булғанда әсәйем ҡусты алып ҡайтырға әҙерләнә ине һәм мине йәйгелеккә ауылға - олатай-өләсәйгә алып барып ҡуйҙылар. Бер кис олатайымдың ҡара-аҡ төймәләрҙе тегеләй-былай күсереп ултырғанын күреп ҡалдым да, "Әйҙә, уйнайыҡ...", тип маҙаһына тейә башланым. Ул: "Әйҙә, өйрәнәйек", - ти. Минең өйрәнәһе килмәй, уйнағы килә. Шулай ныҡышып, уйнай башланым. Олатай еңә, мин еңелгән һайын илайым. Ул ваҡытта кеҫә телефоны түгел, стационар телефондар ҙа һирәк кенә булды. Мин еңелеп, илап туйғас, кискеһен күршеләргә инеп, өйгә атайыма шылтыратып, килеп алырға ҡушам. Атайым ни булғанын аңламай, шулай ҙа килеп ала. Ҡалала бер-ике көн торам да, ҡабат ауылға барам. Кисен олатай менән тағы шашка уйнайбыҙ ҙа, еңелгәс, тағы ла атайға шылтыратам. Шулай ауыл менән ҡала араһында, уйнай-илай йәй үтеп китте. Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатына уҡырға килгәс, беренсе синыфта дәрес теҙмәһендә 4 дәрес тора һәм 5-се итеп ҡәләм менән генә "шашка" тип яҙып ҡуйылғайны. Ул шул ваҡыттағы директор Гөлназ Әхмәҙиеваның индергән яңылығы булған. Был дәрескә йөрөү мотлаҡ түгел икәнен белмәй инек, шуға класс менән тороп ҡалабыҙ. Хәҙер генә мин шундай шарттарҙа ла ни өсөн шашка дәресенә теләп йөрөгәнемде аңлайым: олатайымды еңеү сәме уянған булған. Ә беренсе кластың ҡышҡы каникулында ауылға ҡайтҡас, олатайым менән уйнап, уны еңеп, илаттым.



*Шашка түңәрәгенә йөрөй башлағанда Тамара Танһыҡҡужина беренсе тапҡыр донъя чемпионы булды. Ана шул ваҡыттан уҡ шашка минең өсөн күңел талабына әйләнде. Бәләкәй ҡыҙ өсөн күҙ алдында чемпион йөрөүе - үҙе бер мотивация. Уны өлгө итеп ҡуяһың, уға оҡшарға түгел, ә уҙып китергә тырышаһың. Һуңынан, үҫмер саҡта ололар менән ярыштарға йөрөй башлағас, унда үҫәһең, көс туплайһың, әммә тәжрибәле уйынсыларҙы ҡыуып етеп булмай. Шул ваҡытта сәм тыуып, тырыша, ярыша башлайһың.*

**Сатраш уйынын балаларҙың логикаһын, уйлау һәләтен үҫтереүгә ыңғай йоғонто яһай, тиҙәр. Ә бына шашканың бала үҫешенә ниндәй йоғонтоһо бар?**

**Айгөл:** Был ике уйын араһында бер ниндәй айырма күрмәйем. Шашка ла шахмат һымаҡ уҡ логик фекерләүҙе үҫтерә, тәртипкә, түҙемлелеккә, сабырлыҡҡа, иғтибарлылыҡҡа өйрәтә. Мәҫәлән, балалар күнекмә ваҡытында төрлө мәсьәләләр сисә, шундай уҡ комбинацияларҙы улар уйын ваҡытында көнәркәше алдына ҡуйырға тырыша. Шулай итеп, ниндәйҙер анализ эшләп, үҙе өсөн һығымталар яһай, уларҙы ҡулланырға өйрәнә.

**Айнур:** Шахматта әллә нисә фигура бар һәм иң элек фигураларҙың нисек йөрөгәнен өйрәнергә, хәтерендә ҡалдырырға кәрәк. Ә шашкала бөтә фигуралар ҙа бер тигеҙ, шуға балаларға шашка уйнарға өйрәнеүе, процесҡа инеп китеүе еңелерәк. Әммә был тәү ҡарашҡа ғына шулай, ике уйындың да һәр ҡайһыһының үҙ ауырлығы, үҙ проблемалары етерлек.

**2023 йыл - Педагог һәм остаз йылы. Шашка буйынса кемдәрҙе остазығыҙ тип әйтә алаһығыҙ?**

**Айгөл:** Минең өсөн иң тәүҙә остаз булып Айнур тора. Башта ул миңә нисек ярышҡа әҙерләнергә кәңәштәр, өҫтәмә материалдар бирә торғайны. Һуңынан инде тулыһынса күнекмә процесын күҙәтеп барҙы. Шуға күрә Айнур минең өсөн - тренер, остаз һәм өлгө булған оло ағай. Ысынлап та, беҙ ағай-һеңле кеүекбеҙ һәм бер тороштан икенсеһенә күсеү ҡайһы саҡта бик ауыр. Уҡыусы тренерҙың әйткәнен, ваҡыты-ваҡыты менән ҡуйған ҡаты талаптарын һүҙһеҙ үтәргә тейеш. Бала саҡтан бергә үҫкәс, мин ҡайһы берҙә ялҡауланып, ағайыма иркәләнеп китеп, эшләгем килмәй, тип әйтә, ҡарыша ла алам. Ғөмүмән, бер-нисә тренерҙа шөғөлләндем. Әле үҙем балаларға күнекмәләр үткәргәндә һәр береһенән өйрәнгән алымдарҙы сүпләп, һайлап алып ҡулланам.

**Айнур:** Остаз тигәндә, мин Юрий Чертокты әйтер инем: ул 1982 йылдан алып республикала шашка спорты үҫешенә нигеҙ һалған кеше. Мин унан бөтә ҡарарҙарҙы, мәсьәләләрҙе хәл итеү юлдарын, стратегик идеяларҙы үҙемә алырға тырышам. Идеялар тигәндә, мин процесты ойоштороуҙы күҙ уңында тотам. Ҡайһы берҙә хатта ике көслө уйынсы араһынан берәүҙе һайлап алырға кәрәк. Шуға күрә мин уны ошо ойоштороу, шашка спортын үҫтереү өлкәһендә остаз итеп күрәм, ә уйынға килгәндә - хәҙер үҙем остаз.

**Башҡорттарҙа сәм тигән тойғо ныҡ көслө, әммә ул кемдәлер уяна, кемдәлер уянмай. Уҡыусыларҙа, балаларҙа ошо сәмде нисек уятырға?**

**Айгөл:** Балалар бәләкәй саҡтан уҡ ярышып үҫә. Әгәр күнекмәлә көслө бала берәү генә булһа, ул ялҡаулана башлай. Бер кимәлдәге уҡыусылар күберәк булған һайын сәм арта ғына, улар һәр бәйге һайын үҙ-ара ярыша һәм шулай үҫә.

**Айнур:** Сәм көсө ныҒыраҡ, әммә бында педагогтың, тренерҙың роле бик ҙур. Бер баланы алғараҡ сығарып, лидер итеп дәртләндерергә теләйһең, ә ул һуңынан маһайып китеүе мөмкин. Шуға бында һәр яҡтан ҡарарға кәрәк. Мин 12-13 йәшкә тиклем Александр Мельниковта шөғөлләндем. Ул тренер күҙлегенән миндә үҙенә кәрәкле сифатты күреп, шуға йәбешеп ята ине. Әгәр шул ваҡытта саҡ ҡына арттырып ебәрһә, мин шашканан киткән булыр инем. Мәҫәлән, ул икенсе балалар менән уйнай. Уларҙан еңелергә лә мөмкин, әммә мине мотлаҡ еңә. Йәғни ул миндә шулай итеп сәм тыуҙырырға мөмкин икәнен белә ине, ә башҡаларға икенсе төрлө ҡараштa булды. Әгәр артыҡ сәмләндерергә тырышып, тик ул ғына еңһә, мине һындырып та ҡуйыу ихтималлығы бар ине. Ул ошо сикте бик яҡшы тоя торғайны.

**Айгөл:** Мельниковтың тәрбиә алымы ҡыҙыҡ була торғайны - еңелһәң, эстән генә үҙеңде әрләп ултыраһың бит инде, һуңынан тренер әрләй тип уйлайһың, ә ул һиңә бер нәмә лә әйтмәй. Әгәр еңһәң, киреһенсә, әрләй торғайны.

**Айнур:** Моғайын, ул ошо ысулды беренселәрҙән булып ҡулланғандыр. Беҙгә 10 йәш булғанда өлкәндәр менән уйнарға ултырта һәм беҙ күп тапҡырҙар еңелә инек. Мәҫәлән, Айгөл 8 йәшендә 16-18 йәшкә тиклемгеләр төркөмөндә уйнап, күберәк "оро" алды. Тормош та бит тик еңеүҙәрҙән генә тормай. Әммә үҫеш өсөн тренерҙың күҙаллауы ҙур роль уйнай. Беҙ бит металды ла бер формаға килтерер өсөн тәүҙә ҡыҙҙырабыҙ. НыҒыраҡ ҡыҙҙырһаҡ, ул һына. Шуға оптималь температурала ғына торға кәрәк. Чемпиондар әҙерләгәндә лә шундай оптималь "температураны" тота белеү мөһим. Мин хәҙер уларҙың алымын үҙем ҡулланам.

**Әле һеҙ республикала шашка спортын үҫтереү йүнәлешендә ҙур эштәр алып бараһығыҙ, белем усаҡтарында шашка дәресен индереү әүҙем бара. Балаларға, йәштәргә тәҡдим иткәндә был спорттың ниндәй үҙенсәлеге, файҙаһы тураһында һөйләйһегеҙ?**

**Айнур:** Ғәҙәттә, атай-әсәйҙәр "Баланы шашкаға йөрөтөргә теләйбеҙ, ҡасан, нисә йәштән бирергә?" тигән һорау менән мөрәжәғәт итә. Минеңсә, шашкаға алты йәштән бирергә кәрәк. Бала, бәлки, чемпион да булмаҫ, ә бына мәктәпкә барыр алдынан бер урында сыҙап ултырыу, иғтибар туплаға өйрәнеү кеүек сифаттарҙы ул ошо уйында үҙләштерә. Һәм был бик файҙалы, сөнки бөгөнгө тиҙ үҫешеүсән, мәғлүмәт менән саманан артыҡ ныҡ тулған тормошта иғтибар туплау мәсьәләһе бик киҫкен тора.

**Айгөл:** Эйе, балаларҙа иғтибар дефициты, гиперактивлыҡ проблемаһы булыуы тураһында фекерҙәр күп ишетелә. Һәм иң ҡыҙығы - был хаҡта балалар үҙҙәре лә белә, йәғни ата-әсәләр ошо фекерҙе балаларға һеңдергән. Мәҫәлән, күнекмәгә килгәндәр араһында бер бала бар һәм ул таҡтаға ғына ҡарап ултыра алмай. "Ниңә тик кенә ултырмайһың?" - тип һораһаң, миндә иғтибар дефициты, ти ҙә ҡуя. Беҙҙең шашка клубында теннис залы бар. Шуға беренсе тапҡыр килгән балалар 5 ми-

✓ ***Шашкасылар араһында яҡшы уҡыған балалар күп. Әммә балалар шашка уйнаған өсөн яҡшы уҡыймы, әллә яҡшы уҡыған өсөн яҡшы һөҙөмтә күрһәтәме икәнен аныҡ ҡына асыҡлау ҡатмарлы.***

# УЙЫНЫ АША...

**күрһәтәбеҙ**

Иғтибарың саҡ ҡына оҙағыраҡҡа етһә - һин еңәһең йәки тигеҙ иҫәпкә уйнайһың. Ғәҙәттә, гроссмейстерҙар ниндәйҙер яңы ҙур проблема һөҙөмтәһендә түгел, ваҡ ҡына нәмә арҡаһында еңелә, ошо ваҡ нәмә барлыҡ төҙөгән планыңды селпәрәмә килтерә.

Шуға күрә ата-әсәләр өсөн иң мөһиме - балала бер нәмәгә оҙаҡ иғтибар туплап ултырыу һәләтен тәрбиәләргә кәрәк.

**Балаларҙың үҫеш, предметтарҙы үҙләштереү кимәле төрлөсә. Ә бына уларҙы: "Әгәр шашка уйнаһағыҙ, бөтөн фәндәрҙе лә үҙләштереү кимәле күтәреләсәк", - тип ылыҡтырырға буламы?**

**Айгөл:** Беҙ бәләкәй саҡта "Шашканы шәп уйнаһаң, математиканы ла шәп беләһеңдер", ти торғайнылар. Минеңсә, шашка уйнау ул бөтә фәндәр менән дә бәйле, сөнки дисциплиналы бала өйгә бирелгән эшен дә еренә еткереп, үҙаллы эшләйәсәк, уның эргәһендә атай-әсәй һәм репетиторҙың тороуы кәрәкмәй. Шуға күрә, дөйөм алғанда белем кимәле яҡшырасаҡ. Шашкасылар араһында яҡшы уҡыған балалар күп. Әммә балалар шашка уйнаған өсөн яҡшы уҡыймы, әллә яҡшы уҡыған өсөн яҡшы һөҙөмтә күрһәтәме икәнен аныҡ ҡына асыҡлау ҡатмарлы. Шуны ғына әйтә алам: беҙҙең Ишембайҙағы гимназияла шашка уйнаған уҡыусылар барыһы ла белем усағын алтын миҙалға тамамланы.

дырһаҡ та, һуңынан синыфташтарҙы тиҙ генә ҡыуып етә инек. Әлеге шашкасы мәктәп уҡыусылары ла, юғары уҡыу йортонда уҡыған студенттарыбыҙ ҙа шулай ти: бер аҙнаға ғына артта ҡалһаң, ҡурҡыныс түгел. Моғайын, был мәғлүмәтте һеңдерергә һәм үҙләштерергә кәрәк, тигән тәжрибә һөҙөмтәһелер.

**Айнур:** Бындай идея 2008 йылда уҡ барлыҡҡа килгәйне. Пекинда тәүҙә Олимпия, һуңынан Паралимпия уйындары, артабан Интеллектуаль уйындар үтте. Ошо Интеллектуаль уйындарҙы үткәреү хоҡуғын яулағас, улар башҡа ил йәки төбәккә түгел, ә тап Башҡортостан шашкасыларына мөрәжәғәт итте,



***Өфөнөң Рәсәй картаһында интеллектуаль уйындарҙың ныҡ үҫешкән төбәге булыһын ине тигән хыял бар. Әле Рәсәйҙә иң яҡшы шашкасылар Башҡортостанда икәнлеген раҫланыҡ һәм нығыттыҡ. Элегерәк Европа, донъя чемпионаттарына йөрөгәндә башҡорттоң кем икәнен дә белмәйҙәр ине. Хәҙер беләләр, сөнки уларҙы кемдер еңһә - ул мотлаҡ башҡорт, Башҡортостандан. Беҙ шашка уйыны аша Өфө, Башҡортостан, башҡорттар көслө икәнлеген күрһәттек, донъяла Башҡортостанды күҙ алдына килтергән 10 атама исемлегенә шашка уйынын да индереүгә өлгәштек.***

**Илдәге хәл-торош арҡаһында индерелгән санкциялар һеҙгә лә йоғонто яһанымы?**

**Айгөл:** Әлбиттә. Йыл буйы ярыштарға йөрөмәнек. Бары тик Рәсәй эсендә һәм Беларуста ярышта булдыҡ. Былтыр Европа чемпионатында ҡатнаша алмағанлыҡтан, быйыл донъя чемпионатында ҡатнашыуҙан мәхрүмбеҙ.

Бигерәк тә яңы шөғөлләнә генә башлаған балалар өсөн үкенесле. Уларҙың Рәсәй кимәлендә беренсе ярыштары үтте, әммә тажзәхмәт пандемияһы сәбәпле Европа чемпионатында ҡатнаша алманылар. Хәҙер санкциялар бәкәлгә һуға.

Элек беҙ Рәсәй беренселегенә һайлап алыу, Европа, донъя чемпионатына эләгер өсөн генә йөрөй торғайныҡ. Балаларға Рәсәй чемпионаты иң юғары кимәл булып тора сөнки программаға шашка уйыны ла ингән, ә ҡытайҙар уйнай белмәй. Һөҙөмтәлә ике арала килешеү төҙөлөп, хеҙмәттәшлеккә юл ярылды. Беҙҙең тренерҙар һаман да унда уҡыта.

2019 йылда иһә ул ваҡытта РФ Дәүләт Думаһы депутаты булған Сәлиә Мырҙабаева инициативаһы менән Урал аръяғы райондарында интеллектуаль спорт төрҙәрен, атап әйткәндә, шашканы үҫтереү проектын башланыҡ. Башта барып 6 районда 178 тренерҙы, дөрөҫөрәге, өҫтәмә белем биреү педагогтарын уҡыттыҡ. Уҡып сыҡҡандан һуң улар тренерлыҡ эшен башланы. Ул ваҡытта уҡ был башланғысты тотош республикаға таратыуҙы күҙаллағайныҡ.

Әле шашка клубы базаһында спорт мәктәбе эшләй, уның нигеҙендә райондарҙа 35 минут таҡта артында түҙеп ултырһа, һуңынан "Бар, уйнап кил", тип сығарып ебәрәсәктәр. Икенсе тапҡыр был ул таҡта артында 10 минут ултыра. Йайлап ҡына дәрес ваҡыты бөткәнсе тыныс ултырырға өйрәнәләр. Шулай уҡ шашка логик фекерләүҙе үҫтерә, хәтерҙе нығытырға ярҙам итә, дисциплинаға өйрәтә, ныҡышлыҡты үҫтерә.

**Айнур:** Тағы нимәгә иғтибар иттем: элек беҙ мәктәптә изложение яҙа торғайныҡ, йәғни уҡытыусы дәрестә тексты тулыһынса уҡый ҙа, уҡыусы хәтерендә ҡалғанды үҙ һүҙҙәре менән яҙырға тейеш. Хәҙер диктант яҙа беләләр, әммә барлыҡ мәктәптәрҙә лә изложение яҙыу буйынса тест үткәрһәк, проблема асыҡ күренер ине, сөнки уҡыусыларҙың иғтибар туплау һәләте юҡ. Был проблема Башҡортостанға ғына түгел, бөтөн донъяға хас. Хатта бына шашка буйынса гроссмейстерҙарҙы алғанда барыһы ла бер кимәлдә тигәндәй уйнай. Әммә кемдер ниндәйҙер мәлдә хаталана, йәғни секундтың ниндәйҙер өлөшөндә иғтибарын юғалта.

**Айнур:** Бында шундай бәйләнеште күҙәтә алабыҙ: балаға бәләкәйҙән яҡшы уҡыу программаһы һалынған икән, һуңынан ул иғтибарҙы туплау талап ителгән интеллектуаль спорт төрөн һайлай һәм яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшә. Нисек кенә булмаһын, унда бер урында оҙаҡ, иғтибарҙы туплап ултырыу, белем алыу теләге һәм һәләте бар. Ошоно һыҙыҡ өҫтөнә алыр инем. Беҙҙә әле бер нисә бала шөғөлләнә. Мәҫәлән, Аделя Ғәзизова 7-се синыфты тамамланы, физика, математика фәндәре буйынса республика олимпиадаһы еңеүсеһе. Яҡшы уҡый ҙа, шашкала ла юғары һөҙөмтәләр күрһәтә.

**Шашка уйнаған балалар, ғәҙәттә, ярыштарға йөрөй һәм уларға күпмелер дәрестәр ҡалдырырға тура килә. Улар өсөн шәхси уҡыу планы ҡаралған. Тиҫтерҙәрегеҙҙән артта ҡалмаҫ өсөн һеҙ нисек уҡый инегеҙ?**

**Айгөл:** Ярыштарға китаптар, дәреслектәр күтәреп йөрөнөк. Яңы теманы үҙләштереү еңел бирелгәс, бер аҙна дәрес ҡалһәм ошо кимәлдә туҡталып ҡалыу ҡыҙыҡ түгел. Балаларҙы бит сит илгә барып ҡайтыу, яңы дуҫтар табыу дәртләндерә.

**Айнур:** Эйе, был хәлдәр спорт торошонда ла кире һөҙөмтәләргә килтерә. Хәҙер Башҡортостан спортсылары бер ҡайҙа ла ярыштарға сыҡмай икән, бының һөҙөмтәһен беҙ бер нисә йылдан һуң асыҡ күрәсәкбеҙ. Сөнки ярыштарға йөрөмәгәс, балалар ҡыҙыҡһыныуын юғалта. Үҙемдән генә алып ҡарағанда ла, 2019 йылда Европа, донъя чемпионаттарына йөрөнөк, хәҙер тағы 5 йыл тынлыҡ.

Шул уҡ ваҡытта, донъяла өс шашка киты бар: Рәсәй, Нидерландтар һәм Ҡытай. Рәсәйҙә өс көслө мәктәп бар: Саха Республикаһы, Удмуртстан һәм Башҡортостан. Ошо өсәү араһында, әлбиттә, Башҡортостан - йөҙөк ҡашы булып тора, сөнки беҙ күрһәткән, яулаған һөҙөмтәләр башҡа бер төбәктә лә юҡ.

**Әлеге көндә Башҡортостандың ниндәй мәктәптәрендә шашка кластары асыуға өлгәштегеҙ?**

шашка төркөмө астыҡ. Йәғни беҙ тренерҙарҙы уҡытып, үҙебеҙгә ҡабул итеп, улар урындарҙа балаларҙы шашка уйнарға өйрәтә, ә беҙ уларға эш хаҡы түләйбеҙ. Әлеге ваҡытта ошо төркөмдәрҙә 353 бала шөғөлләнә.

**Тренерҙар уҡыған, әммә тәжрибәле шашкасы түгелдәр, улар көслө шашкасылар тәрбиәләй аламы?**

**Айгөл:** Минеңсә, башланғыс этаптарҙа тренерҙың спорт мастеры, гроссмейстер түгел, яҡшы педагог булыуы мөһим, сөнки ул әҙер материалды балаларға матур итеп аңлатырға, уларҙы ҡыҙыҡһындырырға, мәсьәләләрҙе сисергә өйрәтергә тейеш. 1000 баланан шашка уйнаған 100 бала ҡалһа, шул 100 араһынан барыбер 1-10 көслө шашкасыны табасаҡбыҙ. "Башҡортостан" үҙәк шашка клубы" тренерҙары 40 йыл дауамында булдырылған тәжрибә һөҙөмтәһендә уларҙан нисек чемпион эшләргә белә, быны эшләргә өйрәнгән.

**Башҡортостан шашка клубының киләсәген нисек итеп күҙаллайһығыҙ?**

**Айгөл:** Мәктәптәрҙә 1-4-се кластарҙа, реалист күҙлегенән ҡараһаҡ, хатта 1-2-се синыфтарҙа уҡ шашка дәресен индереү кәрәк. Беҙ зоналар буйынса ярыштар үткәреп, Башҡортостан беренселеге еңеүселәрен асыҡлайбыҙ. Артабан улар Рәсәй беренселегендә ҡатнашырға тейеш, әммә беҙ унда бер йәки бер ярым кешене генә ебәрә алабыҙ. Шуның менән бюджет бөтә. Ә улар бит, бәхеткә күрә, Рәсәй беренселегендә лә еңеү яулай. Уларҙы артабан командировкаға, ярыштарға ебәрергә кәрәк. Ә беҙҙең быға аҡса юҡ. Шуға киләсәктә, исмаһам, һәр йәш категорияһынан барлыҡ өс еңеүсене лә Рәсәй беренселегенә һәм артабан ярыштарға ебәрерлек мөмкинлегебеҙ булһын ине, тибеҙ. Шуға күрә финанс мәсьәләһен яҡшыртыу - иң төп мәсьәлә булып тора.

**Айнур:** Шулай уҡ Өфөнөң Рәсәй картаһында интеллектуаль уйындарҙың ныҡ үҫешкән төбәге булыуы ныҡлы урын алһын һәм беҙҙә лә Интеллектуаль уйындар үтһен ине тигән хыял бар. Ҡытай быны үткәрә ала бит, ни өсөн беҙҙең хәлдән килмәй? Улар ошо хоҡуҡты хатта 5 йыл алдан ала. Шул рәүешле улар интеллектуаль эштәр менән шөғөлләнеүҙәрен раҫлайҙар. Интеллектуаль уйындар артында ҙур киләсәк ята, сөнки спорттың теләһә ниндәй башҡа төрө - ул сикле, йәғни кеше үҙенең мөмкинлегенән ары һикерә, шәберәк йүгерә, мәргәнерәк ата алмай. Бөрсә үҙенең ауырлығынан 50 тапҡырға артығыраҡ һикерһә, кешенең быға хәленән килмәй - физик мөмкинлектәрҙең сиге бар. Ә мейе? Беҙ уның сиге ҡайҙа икәнен һәм мөмкинлектәрен белмәйбеҙ. Әле Рәсәйҙә иң яҡшы шашкасылар Башҡортостанда икәнлеген раҫланыҡ һәм нығыттыҡ. Элегерәк Европа, донъя чемпионаттарына йөрөгәндә башҡорттоң кем икәнен дә белмәйҙәр ине. Хәҙер беләләр, сөнки уларҙы кемдер еңһә - ул мотлаҡ башҡорт, Башҡортостандан. Беҙ шашка уйыны аша Өфө, Башҡортостан, башҡорттар көслө икәнлеген күрһәттек, донъяла Башҡортостанды күҙ алдына килтергән 10 атама исемлегенә шашка уйынын да индереүгә өлгәштек.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Булып үткән ШОС һәм БРИКС илдәренең шашка буйынса 1-се Халыҡ-ара турнирында унда ҡатнашыусы илдәрҙең Шашка федерацияһы ассоциацияһын ойоштороу тураһында килешеү төҙөлдө һәм уның штаб-фатиры Өфөлә урынлашасаҡ тип билдәләнде. "Бындай Ассоциация булдырыу Рәсәй һәм Беларусь спортсыларына халыҡ-ара ярыштарҙа ҡатнашырға мөмкинлек бирәсәк бик аҡыллы ҡарар. Быға тиклем уларға был ярыштарға юл ябыҡ ине, - тип яҙҙы социаль селтәрҙәрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. - Башҡортостан өсөн штаб-фатирының Өфөлә урынлашыуы оло баһа. Башҡортостан шашка мәктәбе - донъяла иң көслөләрҙең береһе".**

**Турнир һөҙөмтәләре буйынса әйткәндә ҡатын-ҡыҙҙар араһындағы ярышта ете тапҡыр донъя чемпионы Тамара Танһыҡҡужина еңеү яуланы, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Спорт министрлығынан. Шулай уҡ тағы бер яҡташыбыҙ Кристина Осипова бронза миҙал алды, ә Ижевск ҡалаһынан Маргарита Федорова икенсе урынға сыҡты. Ир-егеттәр араһында үткән турнирҙа Ижевск ҡалаһынан Алексей Чижов - беренсе, Өфөнән Александр Георгиев - икенсе, Евпаториянан Сергей Белошеев өсөнсө урын яуланы.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**✓ Алға атлау урынына артҡа сигендем. Ос һәнәге мине үҙ ыңғайына елтерәтеп алып китеп бара. Ҡайһылыр арала әсәйем күҙемә салынды: ул туҡтап ҡалған, ҡарашы миңә төбәлгән. Әйтерһең, мин ҡот осҡос упҡын алдында.**






Шашты хәҙер Шәһит. Етенсене бөткәне бирле гел еңел-елпе эштә. Хәҙер ана завхоз булып алды. Артелдең бөтә малына хужа, кешенән бесәнде лә ул ҡабул итә. Урам буйында ла атынан төшмәй һыбай ғына йөрөй. Ат етешмәгәнлектән, бүтәндәр утын-бесәнде һөйрәп ташығанда, шул да булдымы һин? Олоно - оло, кесене - кесе тип тороу юҡ, екерә лә бойора. Әсәйем уға:

- Бер сабындан икенсеһенә йүгергәнсе, үҙебеҙгә лә шул тирәнән сапһаҡ, уңайлыраҡ булыр ине лә, - тигәйне, һыңар күҙен асалаҡ-йомалаҡ итеп, екерергә тотондо.

- Башҡортса әйткәнде аңламайһыңмы әллә?! - тип ебәрә. - Үҙегеҙгә унан бер һәнәк бесән бирмәйбеҙ. Иң тәүҙә бесәнде артелгә эшләп тапшырығыҙ, унан - үҙегеҙгә.

Их, ҡыланыуы. Ул шулай ҡысҡырмаһа ла, беләбеҙ бит инде: иң тәүге бесән артелгә. Һәм беҙ өс көн буйы Оҫҡонлоға бесән сабырға йөрөнөк. Бесән сабыу хәҙер минең өсөн эш тә түгел: иң алдан йөрөп сабам, минең артса апайым, унан әсәйем төшә. Әсәйем ҡайһы саҡта туҡтай ҙа апайым менән миңә һоҡланып ҡарап тора.

Ләкин Оҫҡонло яланындағы бесәнде бер ыңғай ғына киптереп, йыйып алып булманы, яуынлап ебәрҙе. Шуға күрә икенсе бер урында, alаңҡырт ағаслыҡта, үҙебеҙ өсөн бесән саба башланыҡ. Бында үлән йоҡаҡ булһа ла, бик таҙа - ҡыйғаҡ үлән генә, мал яратып ашар әле.

Көндәр аяҙытып ебәрҙе. Бакуй йоҡа булғас ни, үҙебеҙгә тип сапҡан бесән Оҫҡонлоларынан алда кипте. Шуны йыйып йөрөгәндә генә әйттем мин әсәйемә быйыл кәбәнде үҙем ҡойорға ниәтләүемде. Көндөҙгөләккә сәй эсеп ултыра инек. Был һүҙемде ишетеп, әсәйем эсәр сәйен эсмәй туҡтаны, миңә аптыраған һымаҡ ҡараны.

- Әлләсе, улым, кәбән һалыу уйын эш түгел...

- Беләм, әсәй.

- Беләһеңдер ҙә... Быуының ҡатмаҫ борон ҡыялмаһаң да ярар. Йә имгәнеп-нитеп ҡуйырһың.

- Ә үҙең имгәнеп ҡуйһаң? - тип апайым да һүҙгә ҡушылды. - Ике йыл буйы этләндең бит инде.

Әсәйем һаман ыңғайларға теләмәй.

- Ике йыл түҙгәс, тағы берәй йыл сыҙармын әле, - ти.

Унең үҙһүҙләнеүе йәнемде көйҙөрә.

- Шунан? Минән ҡартайғансы кәбән ҡойҙормаҫ инеңме әллә?

Әсәйем көлөп ебәрә, арҡамдан һөймәксе булып ынтыла, мин ситкә тайшанам.

- Һин ҡартайғансы әле, у-лыым!.. Ярар, ярар, улай бик дәрт иткәс, самалап ҡарарһың.

Баш күккә тейә яҙҙы минең. Әйтерһең, тел менән түгел, ҡул менән ҡойоп ҡуйғанмын кәбәнде. Ошо дәрт, ошо ынтылыш мине иртәгеһенә сабынға йүгертеп алып килде. Хәҙер үҙемдең малай-шалай түгел икәнде күрһәтке килеүҙәнме, әсәйем менән апайым, ауыр булыр, тиһәләр ҙә, кәбән һәнәктәрен бер үҙем күтәреп алдым. Күбә тарттырғас, әсәйем менән икәүләп таған һөйәнек. Тик хәҙер төп эште мин башҡарам, әсәйем кәңәш-төңәше менән ярҙам итеп йөрөй. "Тағаныңдың төбөн таймаçлыҡ итеп ҡуй, кәбәнең ҡыйшаймаç", "Анау оҙонораҡ тағанды аç яҡтан һөйәһәң, арыуыраҡ булмаçмы?" "Ҡабаланма, тәүге эште уйлап ҡына эшләү яҡшы", тип һүҙ-хәбәрен табып тора.

Бына таған әҙер. Хәшейә апайым төпкә һуҡтырылған күбә башына менеп баçты. Мин, һалҡын ҡанлы күренергә тырышып, күбәгә ипләп кенә һәнәгемде ҡаҙаным. Ә йөрәк дөп-дөп тибә, тәнем буйынса ниндәйҙер зымбырҙау үтә. Уйынмы ни, ғүмеремдә тәүге тапҡыр кәбән ҡойорға тотонам бит! Кәбән ҡойоу - егет ҡорона инеү ул, тип юҡҡа әйтә тиһеңме ни Йәноҙаҡ бабай. Бына әле кәбән ҡоя башлауымды ҡарап торһон ине әле... Туҡта инде, башлауы башлау ҙа, нисек итеп ослап ҡуйылыр бит. Кәбәнем аҙаҡтан ауып ятмаçмы? Ул саҡта ер тишегенә ин дә кит...

- Бесәнде ауыр күтәрмә, самалабыраҡ сәнс, - ти әсәйем. Минең иһә сәпсеңләп, еңел-елпеләп тораһы килмәй, көс еткән тиклем күберәк сәнсеп ырғытырға тырышам. Атайым ауылда бер кәбәнсе булған бит минең, уның исеменә тап төшөрөргә ярамай.

Кәбән күтәрелгән һайын, миңә дәрт өçтәлә, кәбәнде тиҙерәк ҡойоп бөтөп, уны ситтәнерәк ҡарап торғо килә.

- Улым, кәбәнеңдең уртаһын нығыт, эргәһе ишелеп төшмәһен, - тип кәңәштәрен һаман биреп йөрөй әсәйем. - Хәшейә, һин анау ялпылдап торған бесәнде аяғың аçтына тартып һалып тапа әле...

Күкрәк һәнәгенә тотонғас, эш әкренәйә төштө. Оҙон һаплы һәнәк менән бесәнде сәнсеп алып күтәреүе ҡыйыныраҡ икән шул. Биттән, бөтә тәндән шыбырҙап тир аға. Бесән саңы менән ҡатнаш тир төшөп, күҙҙе әсеттерә. Хәл дә мөшкөлләнә бара, ахырыһы, ырғытҡан бесәнем мин һалырға теләгән урынға ятмай, йә кире шыуып төшә. Арығанымды һиҙҙермәç өсөн, кәбәндең төҙләгән ҡараған кеше булып, ситкәрәк - күләгәгә барып баçам да, аҙ ғына тын алам. Әле бит ос һәнәге менән кәбәнде ослайһы бар, ниңә йомшарам әле, тип, сәмләнеп, тағы эшкә тотонам.

Күкрәк һәнәге менән буй етмәй башлағас, ҡайында һөйәүле торған ос һәнәген алырға киттем. Нисәмә йылғы хыялымды - ошо һәнәк менән кәбән һалыу уйын бына хәҙер эшкә ашырасаҡмын. Их, атайым үҙе күрһен ине һәнәге менән кәбән ҡойғанымды!..

Эсемдә ҡайнаған уйҙарҙы һиҙҙермәç өсөн, аҙ ғына ла тик тормайынса, һәнәгемде күбәгә ҡаҙаным. Бына һәнәкте тубыҡ менән беләккә һалмауырлап һалып, һаптың осон киçкен хәрәкәт менән ергә ҡаҙарға самалайым. Ә ул ысҡына ла тупраҡты юғары сөйә. Бесән вағы йыйып йөрөгән әсәйем дә, эшенән туҡтап, миңә ҡарап тора ине. Улы ос һәнәге менән тәү тапҡыр алған бесәнен күтәреп ырғыта алырмы-юҡмы - шуны белгеһе киләләр инде. Ахырҙа ул түҙмәне, мин һәнәк һабын ҡаҙарға маташҡан ергә йүнәлде. Билдәле инде, ул кәбән ҡойған саҡта, мин уның һәнәк төбөнә баçып тора торғайным бит, хәҙер ул миңә ярҙам итмәксе. Юҡ инде, был тәүге һәнәкте мин кеше ярҙамынан тыш күтәрергә тейешмен. Тағы ла нығыраҡ сәмләнә төшөп, ос һәнәгенең һабын ҡапыл ергә сәнсәм һәм, бесәнде күтәрә биргәс, һапты нығыраҡ ҡаҙайым да, уны турайтып ҡуям. Бесәнде кәбән башына ырғытыу өсөн, һаптың төбөнән тотоп һәнәкте күтәргәйнем, ҡапыл тәнтерәкләп, тигеҙлекте юғалттым, алға атлау урынына артҡа сигендем. Ос һәнәге мине үҙ ыңғайына елтерәтеп алып китеп бара. Ҡайһылыр арала әсәйем күҙемә салынды: ул туҡтап ҡалған, ҡулын күкрәгенә ҡуйған, ҡарашы миңә төбәлгән. Әйтерһең, мин ҡот осҡос упҡын алдында. Шуны аша һикереп сыға аламмы-юҡмы?..

Туҡта, ниңә был һәнәк ыңғайына артҡа сигенәм әле? Шул тиклем ҡыйынлыҡ менән күтәргән нәмәне ҡабат ергә төшөрөргәме? Әсәйем, әйттем бит, быуының ҡатып етмәгән шул әле, тиһә...

Көсәнеп, һапты нығыраҡ ҡыçам, беләкте ҡатынҡылатып, һәнәкте саҡ ҡына юғарыраҡ күтәрә төшәм дә, елләнеп, алға атлайым һәм бесәнде ялп иттереп кәбән башына ырғытам. Булды!.. Апаруҡ сәнсеп алынған бесән Хәшейә апайымдың өçтөнә үк барып төштө.

- Ниңә енләнәһең? Ипләберәк ырғытырға булмаймы ни?! - тип ҡысҡыра ул бесән аçтынан борһаланып сығыр-сыҡмаçтан.

Миңә рәхәт, көләһе лә, урман яңғыратып ҡысҡырып ебәрәһе лә килә.

- Бына бит, ҡайһылай матур ырғыттың. Һин - мин түгел шул. Ир ҡаны һиндә, атайың ҡаны, - әсәйем шулай һөйләнеп, тағы үҙ эшенә тотондо. Уның сырайы, күҙ ҡараштары нисектер яҡтырып киткән һымаҡ ине был мәлдә.

Мин һәлмәк атлап тағы күбә эргәһенә ыңғайланым. Хәҙер үҙ-үҙемә ышаныс артып киткәйне минең. Шуғалыр инде, был юлы баяғы кеүек оҙаҡ этләнеп тә тормай, бесәнде йәлп иттереп күтәреп алдым.

Төш етеүгә, кәбән ҡойолоп бөткәйне инде. Мин уны ысын кәбәнселәрсә өйөрөлтөп йөрөп һуҡҡылап шымарттым, төбөн күбә һәнәге менән төрткөләп сыҡтым.. Хәшейә апайымды арҡандан буйлатып башынан төшөргәс, ситтәнерәк йөрөп кәбәнемде ҡарайым. Шөйлә арыу килеп сыҡҡайны ул: төптән нәҙегерәк, урта тирәһендә күкрәкләнеп китә, осланыуы ла матур ғына, аҙыраҡ ҡар ятһа ятыр, әммә һыу үтерлек түгел.

- Ҡарасы, әсәй, бөтөнләй кәбәнгә оҡшатҡан дабаһа был Кинйәбай! - тип сәрелдәй апайым. Әсәйем баçалҡы ғына яуап бирә.

- Оҡшатмай әллә. Бынамын тигәнсе. Егет кеше лә инде ул.

Ана бит, әсәйем мине тәү тапҡыр, егет, тип атаны. Былай булғас, кәбән ҡойоу уның ҡулынан төштө. Атайымдан ҡалған һәнәк менән кәбәндең икенсеһен дә өсөнсөһөн дә... ҡоясаҡмын.

Бына шундай яҡты кәйеф менән төшкөлөккә ашарға ултырғайныҡ, ситтәгерәк арба юлынан үтеп барған һыбайлы беҙгә табан боролдо.

- Шәһит түгелме һуң? - Әсәйем борсолоп һораны.

- Булһа ни, килһен әйҙә.

- Ниңә артель бесәнен йыйырға барманығыҙ, тип бәйләнерме икән инде.

- Уның ни эше бар? Бәйләнеп ҡараһын!

- Улай һөйләшмә, улым, уның һүҙе - һүҙ...

Уңарсы һуҡыр Шәһит, эргәбеҙгә етеп, атын туҡтатты. Өçтән аçҡа ҡарап, һыңар күҙен бәзерәйтте.

- Бармаҡ үҙегеҙгә кәкере!.. Оçҡонлола бесәнегеҙ ҡурап кипкән, ә һеҙ - бында!

Йомшаҡ күңелле әсәйем ошолай асыулы һөйләшкән кеше алдында ҡаушабыраҡ ҡала ине. Әле лә ни тип яуап ҡайтарырға белмәй тик тора.

- Юҡты һөйләйһең, Шәһит. Ундағы бакуй ҡалын, әйләндерһәң дә, бөгөн кипмәй ул, - тип яуапты мин бирҙем.

- Ә һин телеңде тый, ҡустым! Хәҙер үк Оçҡонлоға китегеҙ! Юғиһә!..

- Ни эшләтерһең? - Мин тороп баçтым. Һөмһөҙ ҡыланған Шәһит алдында һис тә йомшарып төшкә килмәй ине.

- Уныһын үҙем беләм! - Шәһиттең һыңар күҙе алан-йолан килә. - Артелдеке тип кәбәнегеҙгә бирка тыҡтым киттем!

- Ҡабаланма! Уны мин һинән бирка тыҡтырыу өсөн ҡойманым!

Шәһит ауыҙын йәйеп, самосад тартыуҙан һарғайып бөткән тешен ыржайтып мыçҡыллы йылмайҙы.

- Шулаймы ни! Ха-ха-ха!.. Берәү кәбән ҡойған, имеш. Һы!..

Шәһит атынан төштө лә бер нәҙек ағас ҡырҡып алды. Уны юнып, көрән ҡәләм менән ниҙер яҙғас:

- Был кәбәнегеҙҙе тонна ярымға һуғам. Ул ошо минуттан артелдеке, - тип, әле эшләгән бирkаһын тотоп, кәбәнгә табан атланы.

Әсәйем тик ошо саҡта ғына телгә килде.

- Абау, ниңә улай ҡыланаһың ул, Шәһит? Артелгә тигән сабынды сабып бөткәнбеҙ бит, йыйып бирербеҙ.

- Уныһын да бирерһегеҙ, быныһын да...

Шәһиттең уғата мәйелһеҙ ҡыланыуы бөтә сабырлығымды юйҙы. Һөйәүле торған ос һәнәген йүгереп барып алдым да юлына арҡыры төштөм.

- Яҡын юлама кәбәнгә!

Һуҡыр Шәһит һөмһөҙләнеп инеп килә.

- Кит юлдан!

- Китмәйем!

Әсәйем ни эшләргә белмәй, албырғап туҡтап ҡалды.

Шәһит һәнәкте ситкә этеп ебәргәйне, мин яңынан уға юлды кәртәләнем.

- Әле һин шулаймы! - тип Шәһит һәнәккә килеп йәбеште. Китте тартыш. Көслө ине Шәһит, мине дөрөп алып бара. Әсәйем менән Хәшейә әллә нимәһенә аңшайып тик тора. Улар ярҙам итһә, бирешмәç инем. Бына һуҡыр Шәһит ос һәнәген ҡулымдан тартып алды, яңынан барып йәбешкәйнем, мине йыҡҡансы этеп ебәрҙе лә һәнәкте юғары күтәрҙе. Һындыра һуғырға уйлай түгелме һуң ос һәнәген? Атайымдан ҡомартҡы булып ҡалған, бөгөн генә үҙем тәү башлап кәбән ҡойған һәнәктә ни үсе бар икән?..

Оҙаҡ икеләнеп, ниндәйҙер аҡыл уйлап торорға ваҡыт юҡ ине. Шәһит һәнәк менән ҡайын олонона киҙәнгән ыңғайы шунда ырғылдым. Әсәйемдең асырғанып ҡысҡырғаны, Шәһиттең салшайған йөҙө генә күҙгә салынып ҡалды. Артабан бер ни ҙә хәтерләмәйем.

...Шәһиттең кәбәнгә бирка тығыу ҡайғыһы ла киткән, атын менгән дә сапҡан. Ә мин, иçемә килгәс, ҡасандыр ошо уҡ Шәһит арҡаһында һынған ҡулымды муйынға аçып, ҡайтып киттем. Шәһит ҡайын олонона ҡуша һындыра һуғырға киҙәнгән һәнәк миңә эләккән. Беләк һынған, ә ос һәнәге имен ҡалған. Ҡулым үҙәккә үтеп һыҙлаһа ла, шуға күрә тешемде ҡыçып түҙәм. Тән яраһы уңалыр әле. Ә атайҙан ҡалған ҡомартҡыны юғалтһаң, уны ҡабат табып буламы ни?

**(Аҙағы. Башы 15-22-се һандарҙа).**

✓ *Әл-Бәҡара сүрәһенең 28-се аятында ошондай юлдар бар: "Нисек Аллаға ышанмайһығыҙ? Һеҙ үлек инегеҙ. Ул һеҙҙе терелтте. Ул һеҙҙе тағы ла үлтерер, йәнә терелтер..." Мин был аятты романға эпиграф итеп алдым.*



ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

**Яҙыусы, драматург, 60-ҡа яҡын пьеса, 5 роман, 15 повесть, 80-дән ашыу хикәйәләре ингән 26 китап авторы, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге премия лауреаты Наил Ғәйетбаев 75 йәшлек ғүмер байрамын билдәләй. Заман һулышын яҡшы тойған драматургтың төрлө жанрҙағы сәхнә әҫәрҙәре Башҡортостан, Татарстан, Рәсәй, хатта сит ил театрҙары сәхнәләрендә лә ҡат-ҡат ҡуйыла. Оло юбилейын ул "Бабич" һәм "Йән" исемле яңы романдары менән ҡаршы алды. Юбилей йылы булһа ла, бер йылда ике китап сығарыу - бик һирәктәр генә татыр бәхет. Романдарҙың яҙылыу тарихы менән ҡыҙыҡһынып, беҙ яҙыусыға өс һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

# ӘҪӘРҘӘРЕМДЕ...

## иң тәүҙә балаларым уҡый




➔ **Романдар тетрәндерҙе, уҡығандан һуң байтаҡ шаңҡып йөрөлдө. Ябай уҡыусыларҙың ғына түгел, Бабичты өйрәнеүселәрҙең дә әҫәрҙә һүрәтләнгән Бабич образына ҡағылышлы һорауҙары булыр әле, моғайын. Шағир тураһында ике пьеса яҙғандан һуң унын шәхесе менән роман яҙырлыҡ кимәлдә ҡыҙыҡһыныуығыҙҙың сере нимәлә?**

- Сере - яп-ябай. Сибай театры Бабич хаҡында пьеса һорағанға тотондом ул темаға. Бабич тураһында монографик хеҙмәттәр бар, фильм төшөрөлдө, шуларҙан да уҙып ниндәй һүҙ әйтә алам, тип тәүҙәрәк баҙап ҡалдым. Архивтарҙа документтар өйрәнә башлағайным, аҡтарылмаған сиҙәмгә юлыҡҡанымды, әҙәбиәттә Бабич образының бөтөнләй яҡтыртылмағанлығын аңланым. Материалдар шул тиклем күп, уларҙы өйрәнеүем йылдарға һуҙылды. Тәүҙә шағир һәм дәүләт эшмәкәре Бабич тураһында "Башҡортомдоң ҡуҙ йөше" тигән драма, унда Бабичтың юмор осҡаһы булыуы һыймай ҡалғас, "Бабич - атҡаҙанған әртис" тигән комедия яҙҙым. Уларҙың икеһен дә Сибай театры сәхнәгә сығарҙы. Йыйған материалдарым был пьесаларҙан да артып ҡалды. Үҙемдең Бабичты телеэкрандарға сыҡҡан Бабич менән дә, унын тураһындағы публицистик материалдарҙағы Бабич менән дә сағыштырып ҡараным да, Бабичты яңыса яҡтыртырға булдым. Ул киң даирәле, көслө шәхес булған. Шағир ҙа, сәхнәгә бер сығыуы менән генә ҡыҙҙарҙы үҙенә ғашиҡ иттергән йәш егет тә, бер ҡараһаң - бабайға, бер ҡараһаң - әбейгә йә балаға әйләнә алған әртис тә, ҡаҙаҡ аҡындары менән әйтештә еңеүсе сәсән дә, осҡа ойоштороусы ла, ниндәй ҡатмарлы заманда сәйәси ваҡиғалар уртаһында ҡайнаған көрәшсе лә. Романда шундай Бабичты яҡтыртырға тырыштым. Романдың ҡулъяҙма вариантын мин Бабич йәшәгән йылдарҙы, шул йылдарҙағы милли хәрәкәтте тәрәндән өйрәнгән Марат Ҡолшәрипов, Азат Ярмуллин, Рәиф Әмиров кеүек тарихсыларға уҡыттым, уларҙың Бабич образына ҡарата һорауҙары булманы. Бабич тураһында яҙырға ла яҙырға әле!

➔ **"Йән" романына килгәндә, йән темаһын һеҙ бынан байтаҡ йылдар элек үк, "Капкан" повесында күтәреп сығаһығыҙ, әммә ул повесҭа, кеше үлгәс, уның йәненең икенсе тәнгә күсеүен уйҙырма, фантастика итеп бирәһегеҙ, ә был романда шул үк темаңы реаль ваҡиғаларға нигеҙләп һүрәтләйһегеҙ. Романда һүрәтләнгән ғәжәйеп ваҡиғаларҙың реаль тормошта булыу мөмкинлегенә, кеше үлгәндән һуң йәндең икенсе тәндә ҡабаттан донъяға килеүенә ышанаһығыҙмы, ышанһағыҙ, ошо тойғо шәхсән үҙегеҙҙә ниндәй кисерештәр уятты?**

- Мәскәүҙә уҡып йөрөгән йылдарҙа ҡулыма Америка ғалимы Рэймонд Моудиҙың "Үлемдән һуңғы тормош" тигән китабы килеп эләкте. Ул клиник үлем кисергәндәрҙең терелгәнгә тиклем биш-ун минут ваҡыт арауығында нимә күргәндәрен өйрәнгән. Китапты уҡып, хайран ҡалып, ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәй йөрөнөм. Эзотерика, психология менән ҡыҙыҡһына башланым. Шул кисерештәрем нигеҙендә "Хазина" тигән пьеса яҙҙым, унда төп героиня клиник үлем кисерә. Быны ошо пьесаны сәхнәләштерергә әҙерләнгән ваҡытта әртистәр араһында, ундай хәлдең булыуы мөмкин түгел, тигән һымағыраҡ бәхәс китте һәм төп ролгә тәғәйенләнгән актриса үҙенең дә үлеп терелгәнлеген һөйләне. Бәхәстең осона сыға алмай туҡтап ҡуйҙыҡ, пьеса сәхнәгә сығарылмай ҡалды.

Йән тураһында роман яҙыу уйы шул ваҡытта тоҡанды миндә. Һөйләшә торғас, һораша торғас, йән менән бәйле байтаҡ тарих тупланды, бәхһаң, беҙҙең арала ла клиник үлем кисергән кешеләр байтаҡ икән. Романды реаль ваҡиғалар хаҡындағы әҫәр тип әйтерлек нигеҙ бар. Ишеткәндәрем мажаралы сюжетҡа ҡоролоп, психологик детектив рәүешендә яҙылды. Уны мауыҡтырғыс, уҡымлы итергә тырыштым. Кеше йәне үлемһеҙ. Беҙ үлгәс, йәнебеҙ был донъяға башҡа тәндә ҡабат ярала. Мин быға ышанам. Был турала Ҡөрьәндә лә яҙылған. Әл-Бәҡара сүрәһенең 28-се аятында ошондай юлдар бар: "Нисек Аллаға ышанмайһығыҙ? Һеҙ үлек инегеҙ. Ул һеҙҙе терелтте. Ул һеҙҙе тағы ла үлтерер, йәнә терелтер..." Мин был аятты романға эпиграф итеп алдым. Элек йән тураһында төптән уйланырға форсат булманы, бәлки, ваҡыты етмәгән булғандыр. Хәҙер ошо хаҡта йыш уйланам. Тик беҙ үлгәндән һуң ниндәй тәнгә, ниндәй һынға күсһә лә, был донъяға ғазапланыр өсөн килмәһен ине йәнебеҙ.

➔ **Ошо тиклем мауыҡтырғыс әҫәрҙәрегеҙҙе үҙ балаларығыҙ уҡыймы?**

- Уҡыйҙар, әлбиттә. Китаптарымды уҡып үҫтеләр. Улар бәләкәй ваҡытта, өйҙә яҙышып ултырғанда, яҙып бөткән бер битемде уларға бирәм: "Мин уҡыйым, мин уҡыйым!" - тип сиратлап ҡысҡырып уҡый торғайнылар. Әле лә уҡыйҙар, әҫәрҙәрем буйынса фекерҙәре менән уртаҡлашалар. Ҡыҙҙарым бигерәк тә. Малайҙарым ғына, ситтә йәшәгәнгәме, башҡортса һөйләшһәләр ҙә, әҙәби телде аңлауы ауыр, тип әйтеп һалдылар. Аралашыуын тик башҡортса аралашабыҙ. Балалар баҡсаһында русса ғына һөйләшеп ҡайтҡандан һуң, өйҙә рус теленә һөйләшергә маташһалар, мин уларға һәр ваҡыт: "Мин русса белмәйем", - тип яуаплай инем. Әсәһе русса әйтеп ысҡындырһа, бәләкәй малай: "Әсәй, ниңә русса һөйләшәһең, атай русса белмәй бит", - тип иҫкәрмәләр яһай торғайны. Уларға: "Үҙ балаларығыҙ менән башҡортса һөйләшегеҙ", - тип әйтеп ҡуйғанмын. Әлегә ике генә ейәнсәрем бар, улар ҙа башҡортса таҙа һөйләшәләр.

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА**
**яҙып алды.**

УЙМАҠ ХИКӘЙӘЛӘР

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*



# АНАНАС

Калининград өлкәһенең Озерск ҡалаһында майор, частың замполиты Слуквин ҡатынын өс ай барышында, тәүлек әйләнәһендә күтәрмәләгән (дауалаған өсөн түгел, бары һыҙланыуҙы баҫыусы уколдар ҡаҙаған өсөн) мине йыназа табынына саҡырҙы. Әйткәндәй, ошо сырхау ваҡиғаһын, ауырыуҙың түшәктәге ауыр, аһ-зарлы яҙмышын, һыҙланыуҙарын, бәргеләнеүҙәрен нигеҙ итеп алып, "Саҡыр мине зәңгәр кинлектәргә" повесын да яҙҙым һуңынан.

Табын, тинем, ул беҙҙеңсә күҙ алдына баҫтырғанда иң яҡындарҙы йыйып алып, мәрхүмәне иҫкә алып аят уҡытыу. Ә бында инде ҡытай сиреүеләй, ер аяғы ер башынан әллә күпме халыҡ йыйылған, өҫтәл затлы һый-ниғмәттәрҙән һығылып тора. Кеселәре хаҡында һүҙ ҙә юҡ, өлкән офицерҙар бик күп, ә мин бары старшина ғына. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, йорт хужаһы ихтирам йөҙөнән мине янына, уң ҡулы яғына ултыртып ҡуйҙы. Беҙҙәге ише түгел, бындағы ҡатынҡыҙ күңелле тамашаға йыйылғандай, бар байлыҡтарын тышҡа былтайтҡан асыҡ иҙеүле, ҡыҫҡа итәкле тар күлдәк кейеп алған, рәбәғәтһеҙ нишаналай буянған-төҙәнгән.

Дәрәжәм түбән булһа ла үҙемде Советтар Союзы маршалынан былайыраҡ эре, текә тоторға тырышам; юғарынан түбәнгә йүнәлтелгән һауалы ҡараш, уклау йотҡандай тура һын, бер һүҙ менән әйткәндә, килештерәм, саманан ашырам инде. Ҙур мәжлестәрҙең нескә этикет ҡағиҙәләрен белеп етмәү сәбәпле ҡаш аҫтынан тирә-яғыма күҙ һирпеп алам да, башҡалар ни эшләй, ҡайһы бысаҡҡа, сәнскә-ҡалаҡҡа тотона - шуны ҡабатлайым. Дөрөҫөн әйткәндә, ашау ҡайғыһы китте. Тулҡынланыуҙан, көсөргәнеүҙән арҡа буйым еүешләнеп киткән, башты бер генә һорау өҙләкһеҙ сүкей: "Касан ғына бөтөр икән был, ҡасырға ине тиҙерәк..."

Мәжлес яртылағас, бик күптәрҙең һыу буйы оҙон сығыштарынан һуң Слуквин минең яҡҡа ҡайырылып шыбырҙаны: "Хайдар, ты говорить будешь, тебе слово предоставить?" "Спасибо, не надо, товарищ майор, тут одни полковники да генералы, а я выше их по званию!" Слуквин минең әсе телгә, тортмәле тәрттөрөүҙәргә күптән күнегеп бөткәйне инде, шуға йылмайып ҡуйыу менән генә сикләнде: "Ну ладно, тебе виднее..." Бер аҙҙан ул аяғөҫтө баҫты:

- Уважаемые гости, я от всего сердца благодарю этого молодого человека за то, что он долгое время поддерживал мою жену, тем самым постоянно отодвигал беду от нашего дома. Доктор наш, мы все любезно его так величаем, очень терпеливый, исполнительный, честный, обязательный солдат, ему желаю дальнейших успехов в службе! - Шулай тине лә минең алдыма ваҡ киҫектәргә теленгән ананас һалынған тәрилкәне шылдырҙы. - Попробуй, Хайдар, очень вкусный фрукт, ты наверное, его никогда не ел!

Ошо һүҙҙәр сәмемә тейҙе - түбәнһеттеләр бит! Сыҙап ҡала алманың, ҡапыл тоҡанып киттем дә тотош залға ишеттерерлек итеп:

- А эти самые ананасы у нас, в Башкортостане растут! - тинем.

Минең әрһеҙ ҡыйыулығымдан баҙап, юғалып ҡалдылар шикелле, ауыр тынлыҡ урынлашты, бер кем дә көлмәне. Ә майор Слуквин үҙенең ебәргән хатаһын төҙәтергә ашыҡты:

- Да, действительно, ваша республика очень богата, красива, и она считается золотой кладовой Советского Союза!

Тыуған еремә һис ҡасан һүҙ тейҙермәнем, тейҙермәйәсәкмен дә! Әгәр бөгөн ерҙәге ожмах ҡайҙа, һәм ожмах емештәре ҡайҙа үҫә, тип һораһалар, күҙ ҙә йоммай сатнатып әйтәсәкмен:

- Ожмах ул - минең Башҡортостаным, бер ҡайҙа ла ерһенә, тамыр ебәрә алмаған асыл ағастар беҙҙә генә үҫә һәм емеш бирә!

✓ *Күңелле итеп, рәхәтләнеп эшләгәндән генә кинәнес алып була. Балаларға ла шулай тейем. Унан һуң, йәй ялдар, сәйәхәттәр мәле. Баҡсаны көнө-төнө ҡарап тормаһаң, үҫтереп булмай.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЭШЛӘГӘНДӘ КӨЙЛӘМӘ

■ Нервы күҙәнәктәре кире тергеҙелмәй, тип әйткәндәрен ишеткәнегеҙ барҙыр моғайын. Әммә был ысынлап та шулаймы һуң? Билдәле булыуынса, нервы күҙәнәге ике төркөм күҙәнәктәрҙән: нейрондар һәм нейроглия күҙәнәктәренән тора. Беренселәре нервы туҡымаһын төп функциялар менән тәьмин итһә, икенселәре улар өсөн уңайлы шарттар тыуҙыра. Нейроглия нейрондарҙы һаҡлау һәм туҡландырыу эшен дә башҡара. Улар яҡшы бүленә лә, сөнки әллә ни ауыр эш башҡармай. Әммә нейронға әүерелгән күҙәнәк бүленеү һәләтен юғалта. Шуға ла халыҡ араһында ошондай фекер таралған да инде. Улай булғас, яңы нейрондар ҡайҙан барлыҡҡа килә? Мейелә нейрондар гиппокамп йыйырсығында урынлашҡан һаҡлағыстан тулылана. Күҙәнәктәр унан яйлап сыға, олоғая. Был процесс ғүмер буйына дауам итә. Әгәр ҙә йәрәхәт һөҙөмтәһендә нейрондарҙың күп өлөшө зарарлана икән, уларҙы нейроглия алыштыра.

■ Автомобиль газы менән бысранған һауа ғүмерҙе ҡыҫҡарта ала. Британия ғалимдары һанап сығарыуынса, ҡала халҡы йыл һайын уртаса 6 ай ғүмерен юғалта. Британияла бысраҡ һауа һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән йөрәк һәм үпкә сирҙәренән яҡынса 50 000 кеше үлә. Экологик комитет ағзаһы Джоан Валей был мәсьәләне тиҙ арала хәл итергә кәрәк, тип иҫәпләй. Билдәле булыуынса, машиналар PM10 тип аталған матдә йәки ҡаты өлөшсәләр бүлеп сығара. Британияның ҡайһы бер өлкәләрендә был өлөшсәләр күләме Евросоюз билдәләгән норманан күпкә үтеп китә. Был өлөшсәләр респиратор системаһына һәм туҡымаларға үтеп инә һәм үпкә, йөрәк сирҙәре, астма барлыҡҡа килтерә. Ғалимдар бысраҡ һауаны хәҙер тәмәке төтөнөнә тиңләй. Тәмәке тартмаһа ла, даими рәүештә тәмәке төтөнө килтергән зыяндан үлеүселәр һаны бөтә донъяла 600 мең булһа, бысраҡ һауаның сәләмәтлеккә зыянын иҫәпләп бөтөп тә булмай, ти белгестәр. Шул уҡ ваҡытта Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы белдереүенсә, төтөн тәьсиренән йөрәк сире киҫкенләшеп - 379 мең кеше, респиратор инфекцияларынан - 165 мең, астманан - 36 мең 900, үпкә яман сиренән 21 мең 400 кеше үлгән.

■ Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көй тыңлау хәүеф тойғоһон һәм депрессияны кәметә, кәйефте яҡшырта һәм баш мейеһенең ҡайһы бер өлөштәрен уята. Әммә Америка ғалимдары билдәләүенсә, эш башҡарған ваҡытта яратҡан көйөңдө тыңлау эштең сифатына кире йоғонто яһай икән. Неврологтар көй һәм тауыштарҙың мейе функцияларына тәьсирен тикшереп, тулы тынлыҡта ғына мейенең яҡшыраҡ эшләй алыуын асыҡлаған. Белгестәр әйтеүенсә, көй яңғырап торған саҡта мейе бер юлы бер нисә мәсьәлә башҡара һәм уның когнитив функцияларының һөҙөмтәлелеге кәмей.

■ Израиль табиптары мәғлүмәттәренә ярашлы, организм тәмәке тартыуға өйрәнә алмай, был психик сәбәп кенә. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, тартырға теләү көсө организмдағы никотин кимәленә бер нисек тә бәйле түгел, бары кеше уны ниндәйҙер башҡарылырға тейешле йола кеүек ҡабул итә генә.

ӘЙТӘГҮР!



# БАҠСАҒЫҘҘА...

## ниҙәр үҫә?

**ҺОРАУ: Һабанда һайрашмаһаң, ырҙында ыңғырашырһың, ти халыҡ мәҡәле. Быйыл баҡсағыҙға нимәләр сәстегеҙ?**

***Гүзәл МЫРҘАЕВА, Баймаҡ ҡалаһы:*** Үҙебеҙҙең шәхси йортобоҙҙа йәшәйбеҙ, шуға ла баҡсаны хәстәрләмәйенсә, сәсмәйенсә булмай. Ерҙән төңөлмә, тиҙәр бит халыҡта ла. Шулай ҙа мин үҙемдә йәбешеп ятып баҡса тәрбиәләгән кеше тип әйтә алмайым. Дүрт улға атай-әсәйбеҙ, шуға ла йәшелсәләрҙе лә уларҙың нимәгә өҫтөнлөк биреүенә, нимә ятыуынан сығып сәсәбеҙ. Ҡыяр, помидор, кишер, сөгөлдөр, картуф яҡшы үҫә. Балалар баклажан, таш ҡабаҡ, патиссон кеүектәрҙе ашамай ҙа, шуға уларына иғтибар юҡ. Быңа кәбеҫтә менән һуғанды теләп тә үҫтерә алмайым. Былтыр әсәйем Бөрйәндән килеп, быңа ошолай итеп ултыраталар, тип өйрәтеп, үҙе сәсеп ҡайтты. Нисек ултыртты, шул килеш ҡатты инде. Бәлки, еребеҙ был йәшелсәләргә килешмәйҙер.

Ҡыяр бигерәк уңа беҙҙә, уны ҡышлыҡҡа ла күп итеп тоҙлайым. Томатты йыл һайын 15-20 төп кенә ултыртам, тейем дә, иҫемә килеп, ҡарап ебәргәндә, 100-ҙән ашыу төп ултыртып ташлаған булам. Хәҙер поликарбонат теплицалар бар, орлокто тура теплицаға сәсәм. Элекке һымаҡ, өйгә сәсеп мәшәҡәтләнмәйем. Иртә сәсһәң, ныҡ буйға китә лә, үҫенте насар була. Май уртаһына минең томаттарым саҡ бармаҡ буйы ғына була. Әҙерәк йылынғас, апрелдең 20-ләренән һуң сәсәм. Тышҡа сығарыу ваҡыты етеүгә матур итеп нығынып, үҫеп өлгөрәләр. Беҙҙең яҡта был сама менән июндең 15-тәренә тура килә. 5-6 йыл шулай итәм, беренсенән, өйҙә үҫенте урын алып ултырмай, тупрағы ҡойолмай, икенсенән, ошо рәүешле улар нығыраҡ, көслөрәк булып үҫә.

Ҡышлыҡҡа салаттарҙы ла күпләп ябам. Сөнки быйыл, Алла бирһә, икенсе улыбыҙ ҙа студент булырға тора. Өлкәне әҙер аштар - борщ, щи, рассольниктарҙы риза булып ҡына алып китә, һыу ҡайнатып, һалып ебәрһәң, тәмле аш әҙер ҙә. Балам ас йөрөмәй, минең дә күңелем тыныс. Сама менән 100 банканан ашыу салат ябам. Компот та 80-90 банка булып китә. Ҡуҫтәнәскә лә йәтеш.

Ялҡауланмаһаң, барыһы ла үҫә. Борсаҡ, eләк кеүек балалар үҙҙәре өҙөп ашап йөрөрлөк әйберҙәр ҙә ултыртам. Һыу һибергә, утаушырға ярҙам итәләр, шулай ҙа улдарымдан, баҡсаны ҡарашығыҙ, тип, артыҡ талап итмәйем.

***Зәйтүнә АЙЫТБАЕВА, Бөрйән районы Ҡолғана ауылы:*** Элек, балалар бәләкәй саҡта күп үҫтерҙем йәшелсәне. 1990 йылдарҙа ҡулаҡса булмаһы бит, йәшелсә көсө менән еңеп сыҡтыҡ инде ауырлыҡтарҙы, шөкөр, ризыҡтыбыҙ мул булды. Шул ваҡыттарҙа ике ырҙын тултырып, картуф сәсер инек. Кәбеҫтәне 100 баш ултыртһам, шуның 85-90 башы матур итеп үҫеп китер ине. Ул мәлдә ауылда кәбеҫтәне берәй 3 кеше сәсһә сәскәндер. Ҡарағастан мискә эшләтеп алдыҡ, шунда тоҙлап ҡуя инем. Йәшелсә өсөн айырым баҡсам булды.

Әсәйем дә шәп баҡсасы ине. Һуғанын, кәбеҫтәһен, кишерен үҫтерҙе. Һарағы йылғаһы балыҡҡа бай ине ул саҡта, күрше-күлән балалары менән балыҡ һөҙөп, яр буйында ҡурып ашап ҡайта инек. Һәр кем өйҙән ниндәйҙер ризыҡ-фәлән, тоҙ ала. Мин табаҡҡа кишер, һуған һалып алам. Әсәйем башта көйһә лә, атайым, ташыһын, ул тиклемде нимә эшләтәһең, тигәс, тыйманы. Ул саҡта шул йәй-көҙөн ашайбыҙ ҙа, ҡышлыҡҡа әллә ни һаҡланмай ҙа ине.

Хәҙер балаларҙың һәр береһенең үҙенең йорто, баҡсаһы бар, шуға ла күп сәсмәйем. Ҡыяр ултыртам, электән ҡыярым уңа, уны помидор ҡатыштырып тоҙлап та ҡуябыҙ. Помидорҙы 3 төп ултыртһам, миңә шул етә. Гел ит ашап булмай, йәшелсәһе лә кәрәк. Сөгөлдөр насар һаҡлана, шуға ла уны бешереп, турап, тундырғысҡа һалам, винегрет эшләгәндә йәтеш. Борщ, салат итеп тә ябам банкаға сөгөлдөрҙө. Биш баламдың береһе ауылда, ҡыҙым килеп ярҙам итә. Йәйгеһен ейән-ейәнсәрҙәр өҙөп ашарлыҡ eләк тә бар.

Күпләп ҡарағат үҫтерәм. Ағы, ҡыҙылы, ҡараһы бар. Баҡсам батҡыл ерҙә, ҡарағат өсөн иң ҡулайлы урын, сөнки улар дым ярата. Көндәр ныҡ эҫе торғанда һыу ҙа һибәм, яумайыраҡ торған йылдарҙа төбөнә бысҡы онтағы һалам, ул дымды яҡшы тота. Шулай уҡ төбөнә тупраҡ та өҫтәп торам. Һорағандарға тамырландырып бирәм, бының өсөн эйелеп торған ботаҡтарҙы тупраҡ менән күмеп, баҫтырып ҡуям. Ул шулай тамыр йәйеп китә. Шулай уҡ яҙын ҡыйыҡтан ҡар йә боҙ төшөп һындырған ботаҡтарҙы ла ергә төртөп ҡуйһаң, улар ҙа тамырлана. Бындай йәш үҫентеләр 3-4-се йылына яҡшы уңыш бирә башлай. Ҡартайған ҡыуаҡтарҙы ҡырҡып барам. Яңыртып та алам. Балан, ҡара миләште шулай ҡарайым. Тәрбиәләһәң, барыһын да үҫтереп була.

***Зөлфиә КӘРИМОВА, Ишембай районы Әхмәр ауылы:*** Йыл һайын мотлаҡ картуф сәсәбеҙ, ғәзәткә лә ингән, көҙөн мөғәрәпкә картуф төшөп ятмаһа, күңел булмай. Шулай уҡ күп итмәй генә сөгөлдөр, кишер, ҡыяр кеүек йәшелсәләр ултыртабыҙ. Помидорҙы быйыл 107 төп сәстем, үҫентеһен дә үҙем үҫтерәм. Ҡышҡылыҡҡа ҡыярҙы, помидорҙы тоҙлайбыҙ ҙа.

Баҡса эше кешене ныҡ арытырға, йонсоторға тейеш түгел, тигән фекерҙәмен. Көнө-төнө баҡсанан сыҡмай ятҡандарҙы аңламайым. Ҡалаға барһаң, өлкән инәйҙәрҙең сумкаларына үҫентеләр тултырып баҡсаға киткәнен, көҙөн иһә кәрзин-кәрзин уңыш ташығанын йыш күрәһең. Ауырлыҡ менән табылғаны, бәлки, ҡәҙерләрәктер ҙә, тик шул уҡ һуғанды йәрминкәнән осһоҙға ғына һатып алып була икән, ни өсөн үҙеңде ул тиклем ыҙалатырға? Ерҙән көс-ҡеүәт алыу - ер менән булышыуҙың төп маҡсаты ла шундалыр. Күңелле итеп, рәхәтләнеп эшләгәндән генә кинәнес алып була. Балаларға ла шулай тейем. Унан һуң, йәй ялдар, сәйәхәттәр мәле. Баҡсаны көнө-төнө ҡарап тормаһаң, үҫтереп булмай. Шуға ла һинең ике ҡулыңды ла бәйләп ҡуймаһын ул, матур итеп ял итергә лә ваҡыт булырға тейеш.

Хәҙер кеше сәскәне лә күпләп сәсә. Башта үҫентегә өйҙә үҙем ултырта инем. Ауылыбыҙҙың бер уңғаны теплицала сәскә үҫентеһе үҫтереп һата башланы ла, мине был эштән ҡотҡарҙы. Петуния, виола, бер йыллыҡ георгин, бәрхәт гөлө, антирринум (халыҡта "Арыҫлан ауыҙы" тиҙәр) орлоҡтан сәсһәң, мәшәҡәте күп, сәскә атыр хәлгә еткергәнсе ҡарарға ла ҡарарға. Былай әҙерҙе һатып алаһың да ҡуяһың. Йыл һайын 30-50 дана һатып алам да, йәй буйына сәскәләр йорт алдын биҙәп ултыра.

БАҠСА МӘШӘҠӘТТӘРЕ

# ҠЫЯРҘЫ ҮҘЕМСӘ ҮҪТЕРӘМ

**Ҡыяр үҫтереүҙең ниндәй ауырлығы бар инде ул, тиерһегеҙ. Шулай ҙа ҡыяр - йылы яратыусы йәшелсә. Көндөҙ 20-24, төнөн 16-18 градус йылыла ҡыяр яҡшы үҫә, һауа температураһы +12-нән саҡ ҡына түбәнәйә икән, сәскәләрен ҡоя, тупраҡтан файҙалы матдәләр алыуҙы туктата, +5 градуста иһә һәләк була. Уны иртә яҙҙан теплицала, парниктарҙа үҫтерәләр, асыҡ һауаға иһә ҡыраузар ҡурҡынысы бөткәс кенә сәсергә була. Беҙҙең республикала был май аҙаҡтары - июнь баштарына тура килә. Гәзит уҡыусыларға минең тәжрибәм дә, бәлки, ҡыҙыҡлы булыр.**



Мин ныҡ ялҡау баҡсасы, теплицам да юҡ. Ҡыярҙы асыҡ һауаға ғына сәсәм. Бының өсөн башта тиҙәкте, компосты өйөп, өҫтөнә тупраҡ һалып, бейек итеп түтәл яһап ҡараным. Махсус рәүештә бәләкәй генә теплица ла яһап сәстем, ҡыярҙарҙы вертикаль буйынса тартылған бауҙарға үрмәләтеп тә үҫтереп ҡараным. Былар барыһы ла өлкән кеше өсөн ҡатмарлы, шуға ла эште ябайлаштырып, элеккесә сәсеүгә күстем. Ҡыярҙы ябай ғына түтәлдә үҫтерәм.

Беҙҙең төбәктең климатын иҫәпкә алып, белгестәр уңыш булһын өсөн бер нисә сортты сәсергә кәңәш итә-

*✓ Запас вариант әҙер булырға тейеш. Яңы ҡитғалар асыр өсөн һеҙ күҙ уңынан таныш ярҙарҙы юғалтырға тейешһегеҙ. Запас вариантҡа ихтыяж булғанда, үҙегеҙҙе тулыһынса яңы проектҡа бағышларға тәүәккәллегегеҙ етмәйәсәк.*

*ЙӘЙГЕ ЫҒЫ-ЗЫҒЫЛАР*

# ҮЛӘНДӘРҘӘН...

## сәй яһай һал!



**Әбйәлил районында йәшәгән журналист һәм блогер Рәхимә Мусинаның ҡулынан килмәгән эше юҡ! Йә ҡулына бәйләм ала, йә сәйләндән күҙҙең яуын алырлыҡ әйберҙәр эшләй, йә ҡаҡ ҡоя, помидор киптерә. Әле төрлө үлән һәм япраҡтарҙан сәй эшләү серҙәрен уртаҡлаша. Авторҙың яҙмаһын гәзит уҡыусыларыбыҙға тәҡдим итәбеҙ.**

Былтыр йәй башында, үләндән сәй эшләй башланым, тип яҙғас, күптәр был эштең тәртибен аңлатыуҙы, видео төшөрөп һалыуҙы һорай башланы. Был турала Ютубта минән былайыраҡ оҫталарҙан йөҙләгән видео бар. "Ферментация листьев" тип эҙләргә генә кәрәк. Ләкин беҙҙә халыҡ күберәк үҙебеҙҙекеләргә ышана бит инде. Әммә минең тәжрибәм аҙ, шулай ҙа сәйем тәмле килеп сыҡты, үҙемә оҡшаны, шуға белгән тиклемемде өйрәтергә йөрьәт итәм.

Үлән сәйе яһауҙа биш этап бар: япраҡ йыйыу; япраҡтарҙы һулытыу; уларҙы туңдырыу; ваҡлау; әсетеү (ферментлау).

Белгестәр файҙалы сифаттары юғалмаһын өсөн йыйылған япраҡтарҙы йыумаҫҡа кәңәш итә. Мин шулай ҙа йыуҙым. Йоҡа итеп төнгөлөккә киптерергә һалдым да, иртәнсәк 5-6 см тирәһе ҡалынлыҡта өйөп, сепрәк өҫтөнә ҡояш төшмәгән урынға һулытырға ҡуйҙым. Һулытырға, ә киптерергә түгел (берүк кибеп ҡуймаһын)! Болғап торһаң, йылы урында бер нисә сәғәттә япраҡтар һулый, уста йомарлап ҡыҫҡанда ойошһа - әҙер тигән һүҙ. Икенсе ысул: банкаға тултырып, берәй тәүлеккә тәҙрә төбөнә ҡояшҡа ҡуйырға ла була (ҡайһы берәүҙәр һулытыу этабын "һикереп", япраҡтарҙы тура туңдырғысҡа тыға).

Артабан һулыған япраҡтарҙы полиэтилен моҡсайға тыңҡыслап тултырып, туңдырырға һалдым. Бер аҙ ваҡыттан уны һыуытҡыстан сығарып, бер аҙ иретеп, эште артабан дауам итәһең. Ҡайһы берәүҙәр был этапты ла "һикерә", туңдырғас, япраҡтар байтаҡ витаминдарын юғалта, тиҙәр. Белмәйем, мин туңдырҙым һәм күҙәнәктәрҙәге һут тиҙерәк сыҡһын өсөн шулай кәрәктер тип уйлайым.

Иң мәшәҡәтенә килеп еттек: ваҡлау. Белгестәр ваҡламай ферментлау юлын да өйрәтә, иң сифатлы үлән сәйе шулай эшләнә, тиҙәр. Тик уның өсөн һәр япраҡты уста ыуалап, һутын сығарып ултырыр кәрәк. Ә ундай эш өсөн буш ваҡытың күп һәм үҙең бик түҙемле, сабыр кеше булырға тейешһең. Ә миндә түҙемлек самалы, шуға япраҡтарҙы ферментлауҙан алда ваҡланым.

Ике ысул ҡулландым: ит турағыс һәм бысаҡ (йә ҡайсы). Электр ит турағысына әҙләп кенә һалып, һүндерә-һүндерә, һыуыта-һыуыта ғына эшләмәһәң булмай, ватылырға мөмкин. Шуға ҡул ит турағысы менән үткәрҙем, улай тиҙерәк тойолдо (тик рәшәткәнең иң эреһе кәрәк). Ваҡ рәшәткәлеһенән үткәрһәң - гранулалы сәй килеп сыға. Ә япраҡлыһын бысаҡ (ҡайсы) менән тураным.

Айырмаһы нимәлә? Гранулланғанының сығышы яҡшы, төҫө ҡуйыраҡ, тик ваҡ булғас, иләк аша төшөп, сәй "ҡыйлыраҡ" килеп сыҡты. Япраҡлыһы тоноҡ, төҫһөҙөрәк булды, әммә тәмлерәк тойолдо. Унының "дело вкуса" тип уйлайым.

Ә хәҙер иң мөһиме - ферментлау (әсетеү) этабына күсәйек. Ваҡланған япраҡтарҙы эмаль, керамик, быяла, пластик һауыттарға һалырға мөмкин. Өҫтөн һыуланған таҫтамал менән ҡаплайһың да әсеһен өсөн йылы ғына (эҫе түгел) урынға ҡуяһың. Япраҡлы булһа, тәрилкә менән ҡаплап, ауырлыҡ яһап, таҙа таш йә һыулы банка менән баҫтырырға кәрәк.

Сәй әҙер булыуын еҫенә ҡарап beләһең: өй тулып әскелт-татлы еҫ тарала. Мин был еҫте яңы бешкән ҡуҙғалаҡ бәлешенекенә оҡшаттым. Минең ферментлауға бер тәүлек тирәһе ваҡыт китте. Ул ҡыҫҡараҡ та, оҙонораҡ та булыуы мөмкин - бөтәһе лә температуранан тора. Ләкин арттырып ебәрмәгеҙ. Шуға тәмле еҫ ныҡ итеп таралыу менән был этапты туҡтатығыҙ, сәйегеҙ силосҡа әйләнеп йә күгәреп ҡуймаһын.

Сәй әҙер булғас, ҡағыҙ түшәлгән (гәзит түгел) листарға һалып, духовкала 70 градуста киптерҙем, гранулланғаны тиҙ генә, тегеһе оҙағыраҡ кипте. Кипкән сәйҙе магазин сәйҙәренең ҡаптарына ҡойоп, шкафҡа ултыртып ҡуйҙым.

Эше ауыр ғына тойолор. Әммә сәйен эсеп ултырыу - үҙе бер кинәнес! Ҡышҡы һалҡын кистәрҙә бигерәк тә шәп. Үлән ултыра-ултыра тәмләнә. Үләндәрҙе бутап, купаж яһап алһаң да, матурлыҡ өсөн айырым киптерелгән сәскәләрен йә емештәрен ҡушып болғарға була. Тик эш процесында төрлө япраҡтарҙы ҡушырға ярамай, сөнки уларҙың ферментланыу ваҡыты һәр береһенең үҙенсә.

Мин был сәйҙе ҡарағат, ҡурай еләге, алма, ер һәм баҡса еләктәре япраҡтарынан эшләнем. Сейә лә ҡушып бер аҙ эшләгәйнем, тәмен яратманым. Иң тәмлеһе - ҡарағаттыҡы, тик сығышы насар, ысын сәй йә ҡурай еләгенекен ҡушырға кәрәк. Алманыҡы һут кеүек, һандал ғына (пакистан сәйҙәренең төҫө кеүек), үҙе йомшаҡ. Ер еләгенеке баҡсаныҡынан тәмлерәк, әммә икеһенең дә сығышы ныҡ көслө.

Иң шәп сәйҙәр йәй башында йыйылған япраҡтарҙан сыға. Бына хәҙер шул мәл етте. Уңыштар! Хаталарым булһа, был эштең оҫталары төҙәтеп ебәрһен йә үҙҙәренең ысулы менән бүлешһен.

**Рәхимә МУСИНА.**

ләр, береһе уңмаһа, икенсеһе уңыр, тигән маҡсаттан сығып эшләнә был. Асыҡ грунт өсөн партенокарпик гибридтар ҙа, шулай уҡ бал ҡорто ярҙамында һеркәләнгән сорттар ҙа бара. Тәүгеләре ышаныслыраҡ, сөнки улар өҫтәмә һеркәләндереүһеҙ ҙә уңыш бирә. Шулай ҙа бал ҡорттары ярҙамында һеркәләнгән ҡыярҙар тәмлерәк, улар тоҙлау өсөн дә ҡулайлыраҡ. Урал климаты өсөн иң билдәле сорттар түбәндәгеләр: "Муромский 36", "Изящный", "Алтайский ранний 166", "Конкурент", "Водолей", "Неженский". Уларҙы тоҙларға ла була.

Шулай ҙа мин күптән 2 сортты ғына сәсәм. "Апрельский F1" менән "Зозуля F1", улар икеһе лә гибрид сорт, уңышты яҡшы бирә. Яҙын ҡыяр сәсә торған урынды көҙҙән әҙерләйем. Томат, һуған, кәбеҫтә үҫкән урын ҡулайлы. Ҡарбуз, ҡабаҡ кеүек культураларҙан һуң ул урынға ҡыяр сәсергә ярамай. 1 м киңлегендә, 5 м оҙонлоғондағы түтәлгә 1 биҙрә янған тиреҫ, 1-2 биҙрә компост, 5 биҙрәгә тиклем ҡом һалам. Ҡом тупраҡты еңеләйтә, ҡыяр тап шундай ерҙе ярата ла инде. Түтәлде көҙ ҡаҙмайбыҙ, шул килеш ҡалдырабыҙ. Майҙың башында ҡаҙабыҙ. Был түтәлдең бер яғына редис, салат түтәле урынлаша, икенсе яғына иртә өлгөрә торған картуф сәсәм. Июнь - июль башында был ике түтәл дә бушай, тимәк, ҡыярға йәйелеп үҫеү өсөн урын буласаҡ.

Майҙың 15-20-ләрендә ҡыяр орлоҡтарын сәсәм. Уны алдан шыттырмайым да, һыуҙа ла тотмайым. Бер-береһенән 10-20 см аралыҡ ҡалдырам. Ҡояшта йылынған һыуҙы һибәм. Металл дуғалар ҡуйып, түтәлде һыуыҡтан һаҡлап тороусы материал менән тарттырып ҡуям. Ҡыяр сәселгән буйҙың ике яғынан 1,5 - 2 м ҡалдырып, кукуруз сәсәм. Ул ҡыярҙы елдәрҙән, ҡояштан һаҡлап тора, яҡшы микроклимат булдыра. Ҡыяр уға үрмәләп тә үҫәсәк.

2-3 япраҡ сыҡҡас, ҡыуаҡтар араһында 50-60 см ҡалырлыҡ итеп һирәкләтәм. Йышыраҡ булмаһын, ҡыяр йәй былай ҙа ныҡ итеп үҫеп китә. Июндең 20-ләренә тиклем төнгөлөккә ябам. Көндөҙ япманы алып торам.

Ике тапҡыр ашлайым. Май аҙағында-июнь башында ҡыярҙың 2-3 япрағы барлыҡҡа килгәс һәм июль башында. Матур итеп ямғыр яуып үткәндән һуң ашлаһағыҙ, бигерәк яҡшы. Ямғыр юҡ икән, һыу һибеп, 2 сәғәт үткәндән һуң ашлағыҙ. Ашлама өсөн 10-12 л биҙрәгә 1:10, 1:15 нисбәтендә тауыҡ тиҙәген һыу менән болғарға һәм шунда уҡ ҡойорға, шул саҡта азот юғалмай. Бер түтәлгә 1 биҙрә ашлама.

Һыуҙы йыш ҡоябыҙ, ул йылы булһын, башта утаһағыҙ, аҙаҡтан сүп үләндәренә иғтибар итмәһәгеҙ ҙә була. Бер түтәлдән яҡынса 8 биҙрә ҡыяр алып була, бер биҙрәгә 7-8 кг ҡыяр һыйһа, иң әҙендә лә 50 кг уңыш була. Мәлендә туйғансы ашарға ла, тоҙларға ла етә.

**Әлфирә ҒҮМӘРОВА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

**Хәҙер ошо инаныуҙарҙың һәр береһен ентекле ҡарап үтәйек.**

- Бәхет аҡсала түгел. Әгәр компьютерығыҙҙы (мейегеҙҙе) "бәхет" эҙләүгә программалағанһығыҙ, шул уҡ ваҡытта бәхет аҡсала түгел, тип һәр даим ҡабатлайһығыҙ икән, ни өсөн аҡсағыҙҙың аҙ булыуы йәки етерлек кимәлдә күп түгеллеге аптыратмай. Һеҙҙеңсә, компьютерығыҙға күп аҡса алыу мөмкинлеге бирелһә, ул үҙен нисек тотасаҡ?
- Бар йомортҡаларҙы ла бер кәрзингә һалырға ярамай. Әгәр күҙҙәрегеҙҙе асыбыраҡ ҡараһағыҙ һәм гәзит-журналдарҙа яҙылғандың барыһын да онотоп, юғары уңыш ҡаҙанған һәм тормоштан ҡәнәғәтлек алған кешеләр тормошон объектив баһалаһағыҙ, уларҙың бар йомортҡаларҙы ла бер кәрзингә һалыуын күрерһегеҙ. Әлбиттә, бер нисә йомортҡа ватылып та китә, әммә шуның өсөн генә көйәләндеме икән? Киреһенсә, кәрзингә яңынан-яңы йомортҡалар өҫтәп торҙолар. Онотмағыҙ: йомортҡаларҙы һытмай ғына ҡыҙҙырып булмай.
- Һәр ваҡытта ла запас вариант әҙер булырға тейеш. Яңы ҡитғалар асыр өсөн һеҙ күҙ уңынан таныш ярҙарҙы юғалтырға тейешһегеҙ. Запас вариантҡа ихтыяж булғанда, үҙегеҙҙе тулыһынса яңы проектҡа бағышларға тәүәккәллегегеҙ етмәйәсәк. Мейегеҙ запас вариантты һәр саҡ уңышһыҙлыҡ ихтималлығы тип ҡабул итеп, уңышһыҙлыҡ механизмын эшләтеп кенә торасаҡ.
- Страховка полистары, патенттар, сигнализация системаһы һәм пенсия фондтары менән һаҡланырға кәрәк. Нимәнән һаҡларға? Һаҡланырға кәрәкле берҙән-бер нәмә - үҙегеҙҙең уйҙырмаларығыҙ ҡыҫымында быуылыу ихтималлығы. Әммә мин әлегә ундай хәүефтән һаҡланыу полисы күргәнем юҡ!
- Ҡартлыҡҡа аҡса йыйырға кәрәк. Бик дөрөҫ. Һеҙ барлыҡ әүҙем тормошоғоҙҙо эшкә бағышлап, сәләмәтлегегеҙҙе бөтөрөп, үҙегеҙҙе ҡәбергә ҡыуып индерергә сарыф итәһегеҙ. Ә пенсия тупланмаһын дарыуҙарға һәм табиптарға түләү өсөн файҙаланаһығыҙ.
- Гонаһ - тамуҡҡа, изге эштәр ожмахҡа алып бара. Миңә диндәрҙе өйрәнеү оҡшай. Дини хәрәкәттәр башында торған ойошмалар тураһында әйтмәйем, ә изге китаптар һәм бар тормошон үҙ тәғлимәтенә ярашлы ҡорған бөйөк оҫталарҙы күҙ уңында тотам. Улар барыһы ла ожмахтың ошо уҙып барған мәл икәнлеге тураһында һөйләй. Бынан тыш, Аллаһы Тәғәләнең бер үк ваҡытта барлыҡ урында ла була алыуын белдерә. Әгәр ул бөтә ерҙә икән, тимәк, ул ошонда. Уға миһырбанлы һәм шәфҡәтле булыуҙан башҡа сара юҡ.
- Мускулдарығыҙға кәрәкле аҡһым алыу өсөн ит ашарға кәрәк. Ете көн дауамында ниндәй ҙә булһа ит ашап ҡарарға тәҡдим итәм һәм көн һайын үҙегеҙҙең хис-тойғоларығыҙҙы, енси теләгегеҙ көсөн, йоҡоғоҙҙоң тыныслығын йәки тынғыһыҙлығын - йәки был диетаны мейегеҙ һәм организмығыҙ нисек ҡабул иткәнен, ниндәй уйҙар килгәнен ҡарағыҙ. Икенсе аҙнала ит тә, йомортҡа ла ашамағыҙ һәм шулай уҡ күҙәтеүҙәрегеҙҙе яҙып барығыҙ. Тәнегеҙҙең эшмәкәрлеге нисек айырылғанын күрерһегеҙ. Был - физик күренеш. Шулай ҙа миңә талымһыҙҙар араһында йәшәү оҡшай. Улар беҙ, вегетариандар ашаған нәмәләрҙе ашамай.
- Ябығыр өсөн физик күнегеүҙәр эшләргә кәрәк. Һеҙ рациондағы майҙарҙың кәмеүе автоматик рәүештә тән ауырлығы кәмеүгә килтерә, тип уйлайһығыҙ. Хайуан аҡһымы үҫемлек майына ҡарағанда ҡимматерәк. Әммә төрлө имеш-мимештәр ябай кешене албырғатырға мөмкин. Шуға күрә нимә теләйһегеҙ - шуны ашағыҙ, сөнки һәр диетаға ҡаршы булыусылар табыласаҡ. Был йәһәттән һәр кемдең үҙенең инанысы булырға тейеш.

**Пьер МОРАСИ.**



## 19 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 0.25, 1.05, 1.45, 2.25, 3.05, 3.40, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.50, 14.15, 18.05, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Великая". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.15 Т/с "Операция "Престол". [12+]
23.10 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00, 3.00 Т/с "Остаться в живых". [12+]
3.55 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз).**
**14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**16.00 "Это моя профессия". [12+]**
**16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45 Специальный репортаж. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 Т/с "Переводчик". [16+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**21.00 Пофутболим? [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Д/ф "Доброволец". [16+]**
**23.30 Историческая среда. [12+]**
**0.00 Х/ф "Остров исправления". [12+]**
**1.45 "Суд матери". [12+]**
**3.30 Бәхетнамә.**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Следопыт. [12+]**

## 20 ИЮНЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 18.05, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Великая". [12+]
0.25, 1.05, 1.45, 2.25, 3.05, 3.40, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.15 Т/с "Операция "Престол". [12+]
23.10 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00, 3.00 Т/с "Остаться в живых". [12+]
3.55 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45, 23.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**11.00, 16.00, 6.00 "Дорога к храму". [0+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 20.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**16.45 Криминальный спектр. [16+]**
**17.00 Дела и люди. [12+]**
**17.30 Т/с "Переводчик". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 Елкән. [6+]**
**21.00 Полезные новости. [12+]**
**21.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**0.00 Х/ф "Лера". [16+]**
**1.45 Спектакль "Три аршина земли". [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**

## 21 ИЮНЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 18.05, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Великая". [12+]
0.25, 1.05, 1.45, 2.25, 3.05, 3.40, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.15 Т/с "Операция "Престол". [12+]
23.10 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00, 3.00 Т/с "Остаться в живых". [12+]
3.41 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Әлләсе… [6+]**
**10.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**11.00 Территория женского счастья. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [12+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.30 Новости спорта (на рус. яз).**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 3.30 Бәхетнамә.**
**15.00 МузКәрәҙ. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]**
**16.45 История одного села. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 Т/с "Переводчик". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 Тормош. [12+]**
**21.00 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Автограф". [12+]**
**23.30 Д/ф "Украина. Бегство на восток". [16+]**
**0.00 Х/ф "Тень врага". [16+]**
**1.45 Спектакль "Между небом и землей". [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 22 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 18.05, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Великая". [12+]
0.25, 1.05, 1.45, 2.25, 3.05, 3.40, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

4.00, 2.00 "22 июня, ровно в четыре утра... Реквием Роберта Рождественского".
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.15 Т/с "Операция "Престол". [12+]
23.10 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.10 Х/ф "Сорокапятка". [12+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.00, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**14.15 День памяти и скорби. Общероссийская минута молчания. [0+]**
**15.00 Сулпылар. [0+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Этно-краса. [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Специальный репортаж. [12+]**
**16.45 Криминальный спектр. [16+]**
**17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**17.30 Т/с "Переводчик". [16+]**
**18.30 Вечерний телецентр.**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Д/с "Герои". [12+]**
**0.00 Х/ф "Прощаться не будем". [12+]**
**2.00 Д/ф "Перезвон". [16+]**
**3.00 Спектакль "Половецкая мистерия". [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**

## 23 ИЮНЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
17.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Великая". [12+]
22.45 Д/ф "Прыжок из космоса". [12+]
23.50 Д/ф "Первая женщина во главе Дома Моды Christian Dior". [12+]
0.55, 1.40, 2.20, 2.55, 3.35, 4.10, 4.45, 5.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Удивительные люди. Новый сезон. Финал. [12+]
0.50 Х/ф "Тренер". [12+]
3.15 Х/ф "Воин". [12+]
4.49 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**10.30, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**12.15 Слово Земли. 2.0. [12+]**
**12.45 Автограф. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**15.00 Лит-ра. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Патриот РФ. [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**16.45, 19.45, 5.15 История одного села. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 "Круиз-контроль". [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**22.00, 6.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Перед рассветом". [16+]**
**2.00 Спектакль "Ҡаһым түрә". [12+]**
**3.30 Д/ф "Ищите меня под фамилией Матросов". [12+]**
**4.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.30 Тормош. [12+]**

## 24 ИЮНЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Поехали!" [12+]
11.05 Д/ф "МКС-селфи". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Поединки. "Нелегальная жизнь полковника Рыбкиной". [16+]
14.05 Х/ф "Судьба резидента". [12+]
17.10, 18.20 "Абракадабра!" [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.55 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.40 "Акустика". Гарик Сукачев. [16+]
0.40, 1.20, 2.00, 3.05, 3.40, 4.15, 4.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
2.40 "Алые паруса-2023". Прямая трансляция из Санкт-Петербурга.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.05 Х/ф "Чужая". [12+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Тайная жизнь Маргариты". [12+]
0.35, 3.05 Х/ф "Деревенщина". [12+]
2.40 "Алые паруса-2023". Прямая трансляция из Санкт-Петербурга.
4.20 Х/ф "Оазис любви". [16+]
6.05 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 Башкирские каникулы. [12+]**
**9.15 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 Елкән. [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Этно-краса. [6+]**
**11.00 Лит-ра. [6+]**
**11.30 МузКәрәҙ. [0+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Х/ф "Чак-чак". [12+]**
**19.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 1.15 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Х/ф "Мальчик русский". [12+]**
**2.00 Спектакль "Вот так случилось..". [12+]**
**4.15 Әлләсе… [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Мистический Башкортостан. [12+]**

## 25 ИЮНЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.50, 1.30, 2.10, 2.55, 3.35, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 "Жизнь других". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.05 Т/с "Спросите медсестру". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Две звезды. Отцы и дети". Новый сезон. [12+]
21.00 "Время".
22.35 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр. Финал. [16+]
23.50 Т/с "Серебряный волк". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.10, 1.30 Х/ф "Полынь - трава окаянная". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Большие перемены.
13.05 Х/ф "Все как у людей". [12+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.15 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [12+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 "Дорога к храму". [0+]**
**15.30, 4.30 Историческая среда. [12+]**
**16.00 "Честно говоря". [12+]**
**16.45 Спектакль "Живая Земля". [12+]**
**19.00 Әлләсе… [6+]**
**19.45 Патриот РФ. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Интервью. [12+]**
**20.45 Преображение. [12+]**
**21.00, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Д/ф "Документальный фильм". [12+]**
**23.15 Х/ф "Не чужие". [16+]**
**0.45 Спектакль "Эти свободные бабочки". [12+]**
**4.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

✓ ***Батып барған бала үҙен нисек тота икәнен беләһегеҙме? Ул ҡулдарын болғап ярҙамға саҡыра, ҡысҡыра, әүҙем хәрәкәтләнә, һыу сәсрәтә, нимәгәләр тотонорға тырыша тип уйлаһағыҙ, яңылышаһығыҙ.***



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# РӘСӘЙ КӨНӨНӘ АРНАП




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**22-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Сарыҡ. Ярғанат. Нотоҡ. Тамыр. Армыт. Еҙем. Ат. Ҡоралай. Аҡлан. Дуҫлыҡ. Тонна. Ут. Какао. Рәшә. Итәк. Соҡор. Ғөрөф. Кеше. Мәрәһим. Рабат. Кендек. Австрия.

**Вертикаль буйынса:** Ҡултамға. Тархан. Ир. Логарифм. Ярлы. Әбәк. Саған. Текмә. Һалдат. Тамплиер. Емтек. Ҡатыҡ. Оя. Ата. Кәсер. Ҡала. Акса. Тин. Ойрат.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**20 июнь "Әҙләнем, бәгрем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 12+

**21 июнь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**19 июнь "Золушка"** (Г. Корнелиссон), тамаша. 10.30 0+

**20 июнь "Пеппи ДлинныйЧулок"** (А. Линдгрен), әкиәт. 10.30 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*

**24 июнь "Кошкин дом"** (С. Маршак). 12.00, 14.00 0+

**25 июнь "Муха-цокотуха"** (И. Романов). 12.00 14.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедияһы менән Иглин районында гастролдәр:

**19 июнь** - Иглин,
**20 июнь** - Аҡбирҙе,
**21 июнь** - Оло Теләк,
**22 июнь** - Түбәнге Ләмәҙ ауылдарында. 12+

**"Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев), драмаһы менән Бөрйән районында гастролдәр:

**19 июнь** - Әтек,
**20 июнь** - Брәтәк,
**21 июнь** - Иҫке Монасип,
**22 июнь** - Исламбай,
**23 июнь** - Ғәлиәкбәр,
**24 июнь** - Ғәҙелгәрәй,
**25 июнь** - Әбделмәмбәт,
**26 июнь** - Мораҙым,
**27 июнь** - Байғаҙы ауылдарында. 16+

### БР Милли музейы

**22 июнь "Заоблачный фронт"** күргәҙмәһе асыла. 15.00 6+

**25 июнь "Уралдың ер аҫты байлыҡтары"** мәҙәни-ағартыу сараһы. 14.00 6+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Июнь (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 19 (1) дүшәмбе | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 19:04 | 21:54 | 23:24 |
| 20 (2) шишәмбе | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 19:04 | 21:54 | 23:24 |
| 21 (3) шаршамбы | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 19:04 | 21:54 | 23:24 |
| 22 (4) кесе йома | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 19:04 | 21:54 | 23:24 |
| 23 (5) йома | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 19:04 | 21:55 | 23:25 |
| 24 (6) шәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 19:04 | 21:55 | 23:25 |
| 25 (7) йәкшәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 19:03 | 21:55 | 23:25 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

## ҺЫУ ҘА ХӘҮЕФ



**Йәй хәүефле ваҡыт та. Һыуға батып һәләк булыусылар араһында балаларҙың күп булыуы бигерәк аяныслы.**

Батып барған бала үҙен нисек тота икәнен беләһегеҙме? Ул ҡулдарын болғап ярҙамға саҡыра, ҡысҡыра, әүҙем хәрәкәтләнә, һыу сәсрәтә, нимәгәләр тотонорға тырыша тип уйлаһағыҙ, яңылышаһығыҙ.

Кеше шым ғына бата. Ул ҡулдарын да күтәрмәй, ҡысҡырмай ҙа. Был ваҡытта организмдың саҡ ҡына тын алырға ғына көсө бар. Тән вертикаль тора, бер бата, бер ҡалҡа. Был ғына арауыҡ эсендә ярҙам һорап ҡысҡырып булмай.

**Күҙ алдығыҙҙа кешенең батып барыуы тураһында нисек белергә?**

Батыусының башы һыуҙа, ауыҙы ғына өҫтә;
Башы артҡа ташланған, ауыҙы асыҡ;
Сәстәре маңлайын йә битен ҡаплаған;
Кеше һыуҙа вертикаль рәүештә тора, аяҡтары менән үҙенә ярҙам итмәй;
Йыш тын ала, ауыҙы менән тын алырға тырыша;
Арҡаһына әйләнергә тырыша;
Ул арҡандан яһалған баҫҡыстан менергә маташҡан кеүек күренә.
Аяғы һыуҙың төбөнә тейеп торғанда ла кеше бата ала.

**Иң үкенеслеһе, гәҙәттә, батып барыусы янында һәр ваҡыт кеше була, әммә ул уларға был турала әйтә алмай. Шуға ла иғтибарлы булығыҙ!**

✓ Борондан мал көсө менән йәшәгән халҡыбыҙға хас булған аҙыҡ-түлектәр араһында һөт ризыҡтары ҙур урын биләй. Милли ризығыбыҙ күбекмай - тағы бер шифалы тәғәм.



ХӘТЕРЛӘП...

# ХАЛЫҠТЫҢ...

## тоғро дуҫы булырға тырыштыҡ

**2001 йылдың 24 майында ишембайҙарҙың күптән көтөлгән хыялы тормошҡа ашты. Быға биклем дубляж гәзите сифатында сығарылған "Торатау" ҡала Советы сессияһы ҡарары менән июль айынан башлап башҡорт телендә сығасаҡ айырым баҫма тип танылды һәм ошо уҡ сессияла ҡала депутаттары мине бер тауыштан яңы гәзиттең мөхәррире итеп тәғәйенләргә ризалыҡ бирҙе.**

Редакцияның төп составына республика радиоһы хәбәрсеһе булып эшләгән Гүзәл Заһиҙуллина килеп ҡушылды, уның беҙҙең коллективҡа эшкә күсергә ризалыҡ биреүенә сикһеҙ шатландым, артабан ул "Сәнәғәт һәм иҡтисад" бүлеге етәксеһе эшен уңышлы атҡарҙы.




Редакцияның "йөрәге" булған бүлек етәксеһе Гөлнур Дәүләтйәрова яуаплы сәркәтип эшен генә түгел, ә хаттар бүлеге эшен дә үҙ елкәһенә һалды. Уның тирәһенә штаттан тыш хәбәрселәр йыйылып китте: Рауза Маннанова, Риф Тимербулатов, Зөфәр Ҡарамышев, Фәүзиә Аҡколова, Мәғәфүрә Фәйзуллина һәм башҡалар тарафынан яҙылған мәҡәләләрҙе халыҡ көтөп алды.

Бирәм, тигән ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына, тигәндәй, яңы коллектив эшләй башлаған тәүге айҙа уҡ кабинетыма БДУ-ның журналистика факультетынан практика үтергә Таһир Шәрәфетдинов, Гөлшат Ҡаһарманова, Мансур Ғилфанов, Зөлфиә Рәхмәтуллиналар килеп тулды. Өҫтәүенә, медицина университеты һәм БДУ студенттары булған ҡыҙым Зәлифәне һәм улым Юлдашты ла эшкә ектем. Шул мәл хатта ҡала буйлап "Торатау"ға Өфөнән тәжрибәле журналистарҙы эшкә саҡырғандар икән, тигәнерәк хәбәр ҙә таралды.

Йәштәр дәртләнеп эшкә тотондо: яңы темалар эҙләп тапты, яңы формала яҡтыртырға тырышты. Гәзит өсөн яҙып-көйҙәләр. Мин уларға әле лә сикһеҙ рәхмәтемде белдерәм. Әйткәндәй, хәҙерге ваҡытта уларҙың һәр береһе үҙе эшләгән өлкәлә танылыу алды.

Ауыр булһа ла, коллектив тырышып эшләне, ҡала һәм район тормошон бар тулылығында яҡтыртырға тырышты. "Бөйөк Еңеү шаңдауы", "Осрашыуҙар", "Шәхси фекер", "Арҙаҡлы яҡташтарыбыҙ", "Ҡала башҡорттары", "SOS. Милләт киләсәге ҡурҡыныс аҫтында" һәм башҡа төрлө тематик биттәр даими сығарыла башланы.

Рәсимә Фәткуллина, Роза Хисамова, Гөлдәр Собханғолова, Гүзәл Янбаева кеүек йәш журналистарыбыҙ ҙа ижадта үҫҙөрен тапты. Уларҙың үҙенсәлекле мәҡәләләре, интервьюлары һәм репортаждары гәзитебеҙҙе биҙәне. Башҡорт әҙәбиәтендә прозаик булып танылған Мөҙәрис Багаев гәзитебеҙ темаларын байытыуға үҙ өлөшөн индерҙе.

"Торатау" редакцияһы халҡыбыҙҙы туплай торған урынға әйләнде, тиһәм дә хата булмаҫ, редакциянан кеше өҙөлмәне. Күп кенә яҡташтарыбыҙ теге йәки был мәсьәләне хәл итеүҙә ярҙам һорап та "Торатау"ға мөрәжәғәт итер ине. Ул дәүерҙә беҙҙә эшләгән Бурханғол Ғәлин, нигеҙҙә, шундай сетерекле темаларға тотондо. Мәҡәлә яҙып ҡына сикләнмәйенсә, гәзит уҡыусының проблемалары хәл ителеүенә лә өлгәшә торғайны.

Йәш быуынды "Журналистика" тигән мөғжизәле донъяға ылыҡтырыу буйынса ла эште әүҙемләштерҙек. Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге гимназияның башҡорт теле уҡытыусылары Г. Аҙнабаева менән Ф. Ишбирҙина, үҫмерҙәр өсөн махсус "Елкән" битен сығарыуҙы хуплап, ижади фекерләүсе балаларҙың тәүге ижад емештәрен беҙгә ебәреп торҙо. Шуға ла йыл да беҙҙең редакция йүнәлтмәһе менән 4-5 егет һәм ҡыҙ БДУ-ның журналистика факультетына уҡырға инер булды. Әлеге ваҡытта уларҙың күбеһе республикала танылған журналистар.

"Торатау"ҙың аяҡҡа баҫыу мәлендә осраған ҡайһы бер ауырлыҡтарҙы ла атап үтеү урынлы булыр. Тәүге айҙа уҡ редакцияның бөтә электр системаһы сафтан сыҡты. Был эштең проекты ғына ла беҙ күтәрә алмаслыҡ хаҡ менән иҫәпләнелә. Шундай мәлдәрҙә ҡала предприятиелары етәкселәре Юлай Йәғәфәров, Рәүҙәт Рәжәпов, Сафа Кәримовтар һәм башҡалар "Торатау"ға ярҙам ҡулы һуҙҙы. Ғөмүмән, мин мөрәжәғәт иткән бер генә предприятие етәксеһе лә беҙгә кәрәк булған ярҙам күрһәтеүҙән баш тартманы.

"Восход" редакцияһынан 6-сы моделдәге иҫке "Жигули", иҫке компьютерҙар, иҫке принтер менән бүленеп сыҡҡайныҡ. Нисә тапҡыр ул машинаны Өфө юлынан буксирҙа алып ҡайтырға тура килеүен үҙем генә беләм. Юлға сығып, йөк машиналарын туҡтатырға тура килә ине. Ҡайһы берҙә водителдәр, беҙҙең редакция машинаһын танып, үҙҙәре үк туҡтай торғайны...

Ә "Исток" компьютер фирмаһы компьютерҙарыбыҙҙың туҡтауһыҙ эшләүен тәьмин итте. Саҡырыуыбыҙға 5-6 минут үтәме-юҡмы, фирманың компьютерсылары килеп тә етә торғайны.

Редакция коллективы ауырлыҡтарға бирешмәне, янып-көйөп, шаулап-гөрләп эшләне. Гәзитебеҙ йылдың-йылында Матбуғат министрлығы үткәргән төрлө конкурстарҙа еңеүсе булды. Йыл әйләнәһенә ауылдар буйлап йөрөп, гәзит уҡыусылар менән осрашыуҙар ойоштора инек. Рөстәм Ғиззәтуллин, Илшат Яппаров һәм башҡа танылған йәш йырсылар ҡатнашлығында үткәрелгән "Торатау-шоу" кисәләрен гәзит уҡыусыларыбыҙ әле лә һағынып иҫкә ала.

Дөйөм тырышлыҡ бушҡа китмәне, әлбиттә. "Торатау" ҡала һәм район халҡы өсөн яратҡан баҫмаға әүерелде. Шуға күрә артабан да "Торатау" гәзит уҡыусы өсөн тоғро дуҫ һәм кәңәшсе булып ҡаласаҡ, тип уйлайым.

**Хаят ЙОСОПОВА,**
**Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, 2001-2005 йылдарҙа "Торатау" гәзитенең баш мөхәррире.**

*ҺАЙ, БАШҠОРТ АШТАРЫ!*

# КҮБЕКМАЙ

Халҡыбыҙҙың милли аш-һыуҙары иҫ киткес күп тә, тәмле лә, туҡлыҡлы ла. Шундай ризыҡтарҙан булған күбекмай тураһында ишеткәнегеҙ бармы? Һеҙҙең яҡта уны әҙерләйҙәрме, ниндәй ысул менән?

Борондан мал көсө менән йәшәгән халҡыбыҙға хас булған аҙыҡ-түлектәр араһында һөт ризыҡтары ҙур урын биләй. Милли ризығыбыҙ күбекмай - тағы бер шифалы тәғәм. Ашҡаҙаны ауыртҡан, ашауҙан яҙған кешегә ул айырыуса файҙалы, май айында эшләнгәне бигерәк тә шифалы була.

Иғтибарығыҙға бер нисә ысул тәҡдим итәбеҙ. Күбекмай 1-2 көн ултырып, әсе тәме ингән 1 литр ҡаймаҡҡа 4 литр яңы ғына ойоған ҡатыҡ, бер аҙ ҡайнаған һыулы һыу ҡушып бешелә. Әммә был шифалы ризыҡты мотлаҡ батманда (көбөлә) бешергә кәрәк. Өҙлөкһөҙ, туҡтамайынса туҡыһаң, эш һөҙөмтәһе лә тиҙерәк килеп сыға. Бер сәғәт самаһы туҡығандан һуң, күбекле май бөрсөктәре бүленеп сығып, өҫкә ҡалҡа һәм бер-береһенә йәбешә башлай. Йөҙөп йөрөгән майҙы ҡалаҡ менән йыйып алырға ғына ҡала. Майҙың айранын һыуһынды ҡандырыу өсөн эсәләр.

Икенсе ысул буйынса ул ошолай әҙерләнә: 3 литр яңы һауылған йылы һөткә 1 литр ҡатыҡ, 500 грамм яңы үткәрелгән ҡаймаҡ ҡушып бешәһен. Тәмле ризыҡ килеп сыҡһын өсөн ике сәғәт өҙлөкһөҙ, талғын ғына туҡырға кәрәк. Тиҡ һәр ысулда ла батман булыу шарт. Бындай милли ризыҡты етештереү серҙәрен юғалтмаҫҡа кәрәк беҙгә. Бәлки, кемдәрҙер күбекмай әҙерләүҙең тағы берәй ысулын иҫкә төшөрөр? Уртаҡлашығыҙ әйҙә!

**(Сәхифәнән).**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҮҘЕМ БЕЛӘМ, ТИГӘН...

## үргә йөҙә алмаҫ

Хәҡиҡәтте белмәү гәйеп түгел, белә тороп күрмәү - гәйеп.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Былай йәшәргә ярамай, әлбиттә, әммә беҙ башҡа төрлө йәшәй белмәйбеҙ.

**(Борис Крутиер).**

Әгәр ҙә һине дөйә тип иҫәпләйҙәр икән... барыһына ла төкөр.

**(Владимир Голобородько).**

Һеҙҙең нимәнелер даулап тартҡылашыуҙар тормош һаҡтарығыҙға һәм тәжрибәгеҙгә нигеҙләнгәндә генә урынлы буласаҡ.

**(Шарлотта Бронте).**

Батып барыусылар һыуҙы болғансыҡҡа әйләндерә лә инде...

**(Анджей Сток ).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер сауҙагәр үҙенең улын иң ҙур аҡыл эйәһенә Бәхет серен өйрәнергә ебәргән. Үҫмер ҡырҡ көн буйы сүллек аша үтеп, аҡыл эйәһе йәшәгән матур һарайға барып юлыҡҡан. Ләкин аҡыл эйәһе эргәһендә шул тиклем кеше күп, ти, үҫмер ике сәғәт көтөп ултырғандан һуң ғына уның эргәһенә килә алған. Ҡарт үҫмерҙең һүҙҙәрен иғтибар менән тыңлаған һәм уға "Бәхет серен асырға әлегә ваҡытым юҡ, һин тағы ла ике сәғәт һарай тирәләй йөрөп тор, шунан килерһең", - тигән һәм үҫмергә бәләкәй генә ҡалаҡ тотторған, уға ике тамсы май тамыҙған һәм: "Йөрөгән саҡта ошо ҡалаҡты һәр ваҡыт ҡулыңда тот, тик майын түгә күрмә", - тигән. Үҫмер һарай тирәһендәге баҡсаларҙан бер төшөп, бер менеп, ваҡыт уҙғарған, ә күҙҙәре гел ҡалаҡта булған. Ике сәғәттән әйләнеп килгәс, аҡыл эйәһе унан: "Шунан, минең ашханамдағы келәмдәрҙе күрҙеңме? Баҡсамда ниҙәр үҫә икәнен шәйләнеңме? Минең китапханамдағы матур китаптар күҙеңә салындымы?" - тип һораған. Үҫмер ҡалаҡтағы майҙы түкмәҫ өсөн башҡа бер нигә лә ҡарамауын, бер ни ҙә күрмәүен танырға мәжбүр булған. Аҡыл эйәһе: "Улай булғас, бар, минең донъямдағы мөғжизәләр менән яңынан танышып кил", - тип, үҫмерҙе сығарып ебәргән. Был юлы үҫмер ҡулына ҡалағын тотҡан көйө һарай менән танышырға сығып киткән һәм бындағы бар матурлыҡты, байлыҡты күреп һоҡланған. Аҡыл эйәһе янына килгәс, ул күргәндәрен ентекләп һөйләп биргән. "Ә ҡалағыңдағы ике тамсы майың ҡайҙа һуң?" - тип һораған унан аҡыл эйәһе. Үҫмер ҡалағына ҡараһа, ундағы май ағып бөткәнен күргән. "Һиңә бирә торған берҙән-бер Бәхет сере шул, - тигән аҡыл эйәһе, - донъяның мөғжизәләрен байҡағанда ҡалағыңдағы ике тамсы май тураһында онотма".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 23023

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
16 июнь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3267
Заказ - 791